Фәниҙә ИСХАҠОВА




(роман-хикмәт)*

*Роман журнал вариантында ҡыҫҡартылып бирелә.

*“Ваҡыт Аллаһы, Йыһанды барлыҡҡа килтергәндән һуң, уйға ҡалған. Тирә-яҡта иҫ киткес Матурлыҡ һәм Гармония, ләкин ниҙер етмәй кеүек. Бик оҙаҡ уйлағандан һуң, Ул кинәт кенә аңлап ҡалған: бына ошо гүзәллеккә бергәләп һоҡланыр өсөн Уға юлдаш кәрәк икән!*

*Мең йыл буйына Алла үҙенә ул биреүҙәрен ялбарған. Бөйөк, ҡеүәтле һәм берҙән-бер Алла кемгә ялбарғандыр — билдәһеҙ, ләкин Ул ялбарған — һәм Уның теләге ҡабул булған.*

*Ләкин теләгенең ҡабул булғанын аңлағас, Ваҡыт Аллаһы бер мәл бик үкенгән, сөнки был әлегәсә һаҡланып килгән Тигеҙлекте һәм Гармонияны юҡҡа сығарасаҡ икән. Ләкин инде һуң — Ул донъяға яралтҡан йән эйәһе инде был донъяға килергә юлға сыҡҡан... Алла күҙ йәшле үтенестәре менән бары бер нәмәгә — уның икегә бүленеүенә генә өлгәшә алған, ти.*

*Ваҡыт Аллаһының ике игеҙ улы донъяға килә: доғаларының ҡабул ҡылыныуы һөҙөмтәһендә — Изгелек (Ормузд), ә үкенеүҙәренең һөҙөмтәһе булараҡ — Яуызлыҡ (Ахриман).*

*Хафаға ҡалған Алла Изгелек атлы улының донъяға тәүҙәрәк тыуыуы өсөн барыһын да эшләй — сөнки Изгелек игеҙ туғанының нәфсеһен тотҡарлап һәм йомшартып, Йыһанда бәлә-ҡаза сығармау өсөн барыһын да эшләргә тейеш икән. Ләкин, билдәле булыуынса, Яуызлыҡ йылғырыраҡ һәм хәйләкәрерәк, шуға күрә лә иң һуңғы минутта Яуызлыҡ туғанынан алдараҡ тыуып өлгөрә һәм Йыһандағы йондоҙҙарҙы тәүге булып күреүгә өлгәшә...”*

*(Фарсы халыҡ риүәйәте)*

## Пролог

Был донъяға кеше тыуҙы...

Бәхетле әсә игеҙ сабыйҙарын ике яҡлап күкрәгенә ҡыҫҡан һәм йылмая. Хәле булмаһа ла, ошо сабыйҙарҙы имен-аман яҡты донъяға килтерер өсөн төнө буйы ғазапланып сыҡһа ла, бөтә донъяны нурға ҡойондорорҙай булып йылмая ул. Тулғаҡ ғазаптарынан йәне алҡымына килеп тығылған минуттары артта ҡалған шул. Ошо Мөғжизәне — донъяла Кешене барлыҡҡа килтереүҙең ябай аңға һәм аҡылға һыймаҫлыҡ хәл икәнлеген унан башҡа тағы кем белә?!

Әсә ике сабыйын күкрәгенә ҡыҫып-ҡыҫып һөйҙө лә янындағы балалар карауатына һалды. Сабыйҙар шунда уҡ тиерлек мышнап йоҡоға ҡалды.

— Тәүге сабыйҙарың, ахыры?

— Эйе шул. — Сәлимәнең йөҙө йәнә балҡыны. — Ныҡ һиҙеләме?

— Һиҙелмәй ни. Ыуалырға торған быялаға тотонған шикеллерәк ҡулыңа алаһың.

— Ҡурҡыныс бит, яңылыш берәй ерҙәрен ауырттырып ҡуйһам.

— Һаҡ тотон, тик һин, һылыу, ҡулыңа алған һайын дерелдәп торһаң, ысынлап төшөрөп ебәреүең бар. Сабый кеше нимә булһа ла әсәһенә һыйына. Үҙең ныҡ булмаһаң, балаң да шыйыҡ була. — Сәлимә менән палатала күрше генә ятҡан Хәбирә урынынан тороп уҡ ултырҙы. — Эй, балаҡай, һин әле үҙең сабый булыуҙан уҙмағанһың бит. Нисә йәш һуң һиңә?

— Ун һигеҙ... — Сәлимә ҡыҙарҙы.

— Туҡта әле, ҡыҙый... — Хәбирә йәш ҡатынға яҡыныраҡ шыуып ултырҙы. — Ә аталары бармы был балаларҙың? Ҡейәүҙәһеңме, тим...

Йөҙөнә тимгел-тимгел ҡыҙыллыҡ йүгергән Сәлимә аҡланырға ашыҡты:

— Эйе, бар, бар. Тик...

— Нимә “тик”?

— Ул... уға ла... егерме лә тулмаған шул. — Хәбирәнең хәстәрлекле тауышынан йомшарған йәш ҡатын ҡапыл ике ҡулы менән биттәрен ҡаплап илап ебәрҙе. — Ул...

ул... был балаларҙың донъяға килеүен теләмәне... Ул... абортҡа барырға ҡушҡайны... Тик... мин... сабыйҙарҙы йәлләнем...

Әлегәсә тыныс ҡына барған әңгәмәгә күҙ йәштәре килеп ҡушылғас, палаталағы ҡатын-ҡыҙҙар барыһы ла дәррәү ҡуҙғалып, Сәлимәнең эргәһенә йыйылды. Береһе стаканға һалып минераль һыу тотторҙо, кемеһелер ҡулъяулыҡ һуҙҙы. Йәш ҡатындың эргәһенә күсеп ултырған Хәбирә уның арҡаһынан ҡосаҡлап тынысландырырға тырышты.

— Йә, йә, тыныслан. Өҙләкһәң, һөтөң юғалыр. Шунан сабыйҙарыңды нимә менән ризыҡландырырһың? Хәҙер һин үҙең генә түгел, һеҙ инде өсәү. Ул ике сабый һиңә генә ҡарап тора... Ата-әсәң бармы һуң?

— Улар ауылда йәшәй.

— Ә кейәүең... Яҙылышҡанһығыҙмы?

— Эйе...

— Һуң, шулай булғас... Барыһы ла рәтләнер. Ирҙәрҙең бәғзеләре ҡырҡҡа еткәндә лә бала аҡыллы. Йә, һөрт күҙ йәштәреңде.

Аҡҡа буялған кескәй балалар карауатында мышнап йоҡлаған сабыйҙарға, күрәһең, әсәләренең борсолоуы күсте — тәүҙә береһе, унан икенсеһе бер-бер артлы илап ебәрҙе.

— Эң-ңә-ә... Ә-ә-ә...

— Хәҙер, хәҙер, бәпәйҙәрем...

Әле генә үҙе лә балаларса балауыҙ һыҡҡан ҡатынҡай урынынан һикереп торҙо, сабыйҙарын күкрәгенә ҡыҫып, әкрен генә бәүелтә башланы.

— Йәгеҙ инде, йә, иламағыҙ... Әсәй һеҙҙең менән... Мин бер кемгә лә һеҙҙе рәнйетергә бирмәм... Иламағыҙ инде, бәләкәстәрем...

* * *

Бейек тәҙрә төбөндә күперелеп үҫкән гөлдәр араһынан ҡояш нурҙары һарҡыла. Тағы ла яңы көн тыуа. Бөтә булған балҡышы, сикһеҙ өмөттәре, йәшәйешкә булған ғәжәйеп ышанысы менән өр-яңы көн тыуа донъяға.

...Сәлимә ыңғырашып ҡуйҙы. Хәлһеҙ кәүҙәһен көс-хәл менән ҡуҙғатып, урынынан ҡалҡынырға аҙапланды ла, көсө етмәгәс, ҡабат ятырға мәжбүр булды. Ҡасандыр көс-дәрт ташып торған арыҡ кәүҙәһе быуынһыҙ булып күҙҙең яуын алырлыҡ сағыу биҙәкле япмаға һылашҡан. Их, ошонан ҡалҡынып ҡына йүгереп кит ине лә бит...

“Йә, ҡыҙым, сирләп киттеңме?”

Был Ағинәй ине. Аҡ яулығын һәйбәтләп ябынған. Әкрен генә тиҫбе тарта. Йөҙөндә йылмайыу уйнай.

— Эйе шул, — тип яуапланы Сәлимә хәлһеҙ тауыш менән.

“Иртәрәк йыйынғанһың әхирәткә. Әле бит ҡырҡың да тулмаған”.

— Нишләйем һуң... Йәшәү кәрем ҡалманы, Ағинәй.

Бер аҙға тынлыҡ урынлашты. Ағинәй эстән генә ниҙер уҡый-уҡый тәсбих тартыуын белде.

“Аңлайым хәлеңде, балам. Әлегәсә һине был донъяла бурыс тотто. Иҫеңдәме, сабыйымды аяҡҡа баҫтырасаҡмын, тип һин миңә һүҙ биргәйнең?”

— Эйе! — Сәлимә кипкән ирендәрен ауырттырып, интегеп кенә йылмайҙы. Күҙендә теремек осҡон да уйнап ҡуйҙы. Уйнаны ла һүнде. Күкрәк тирәһен йәнә үҙәккә үткес ауыртыу бөрөп алды. Ул ыңғырашып ҡуйҙы.

“Бурысыңды үтәнең, рәхмәт, балам. Фани донъяла ҡалған бурыстан да яман нәмә юҡ ул. Йәнеңде гелән аҫҡа һөйрәр ине, һин бына шунан ҡотолдоң...”

— Тик бит әле ул... ныҡынып етмәгән... — Сәлимәнең тауышында үкенеү сағылды.

“Борсолма. Әлегә саҡлы мин икегеҙҙе лә ҡурсаланым, бынан һуң да уны ярҙамымдан айырмам... Тик... һин генә... улыңды йәһәт кенә күрә алмаҫһың әле... Үтер сиктәрең бар”.

— Ниндәй сиктәр һуң ул, Ағинәй?

“Йәшәү менән үлем сигенән һуң ожмахҡа юлдар тиҙ генә асылмай әле ул, балам. Таҙарынаһың бар...”

— Мин шулай гонаһлымы ни һуң? Бер кемде лә бит рәнйетмәнем.

“Рәнйетмәү генә аҙ. Үҙеңә бирелгән мөмкинлектәреңде файҙаланмағанһың... Һәм... тағы... икенсе улың...”

— Рәзим! Улы-ым!!! — Һис көтмәгәндә Сәлимә үҙәк өҙгөс тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе, күҙ йәштәре бөрсөк-бөрсөк булып яңаҡтары буйлап тәгәрәне.

Ағинәй юғалды. Ысынбарлыҡ бөтә ҡырыҫлығында йәнә күҙ алдында ҡалҡып сыҡты.

Тәҙрәләре бейек итеп һалынған ҙур һәм күркәм ауыл йорто. Зауыҡ менән урынлаштырылған йыһаздар өй эсенә йәм бирә. Тәҙрә төптәрендә күпереп үҫкән гөлдәрҙән таралған хуш еҫтән баштар әйләнерлек. Саҡ ҡына ҡыҫылған асылмалы тәҙрәнән иҫкән ел биҙәкле селтәрҙәрҙе тирбәлдерә. Быялаларҙа ҡояш нуры уйнай. Уларҙы әйләнгән һайын ялтыратҡансы һөртә торғайны Сәлимә. Эйе шул, һөртә торғайны...

Сәлимәнең аҙарынып ҡысҡырыуынан әле генә һил булған йортта барыһы ла бер юлы тиерлек хәрәкәткә килде. Аҡ халатлы шәфҡәт туташы ҡулына шприц тотоп, ауырыу ятҡан төпкө бүлмәгә үтте. Уның артынса шымыраҡ баҫырға тырышып ингән әсәһе Рәхилә менән еңгәһе Зәмзәгөл бөгөн төндә хәле кинәт насарайған Сәлимәнең йөҙөнә сараһыҙҙың көнөнән төбәлде. Әйтерһең дә, ныҡлабыраҡ ҡараһалар, һүнә барған күҙҙәрҙә һәм күкһелерәк төҫкә ингән нурһыҙ йөҙҙә өмөт осҡоно табыла...

Атаһы Рыҫҡужа урынынан ҡуҙғалманы.

Бер аҙҙан төпкө бүлмәгә үтеүселәр ҡабат сыҡты.

— Тынысланды. Хәҙер, бәлки, йоҡлап китер. Әлегә борсомайыраҡ тороғоҙ. — Шәфҡәт туташы ниңәлер күҙҙәрен йәшерҙе.

— Һылыу, бикәсемде әйтәм, ҡасан аяҡҡа баҫа алыр икән? — Зәмзәгөл ниңәлер ҡайныһына ҡарап ҡуйҙы. Ҡүрәләтә мәғәнәһеҙ һорау биреүенән үҙе оялғандай итте.

Шәфҡәт туташы өндәшмәне.

— Үлер инде бәбекәйем... Йәш кенә көйөнә... — Рәхилә сеңләп илап ебәрҙе.

— Ҡәйнәм... Йә инде... Йоҡлап китте, тине бит. Бәлки, йүнәлеп тә ҡуйыр. Йәш бит әле, бирешмәҫ.

— Фәһимем генә ҡайтып өлгөрә алһа ярай ҙа... — Рәхилә йәнә балауыҙ һығырға кереште.

— Ҡискә ҡайтып етер. Үҙем ҡаршы барып алырмын. — Рыҫҡужа ғәҙәтендә булмағанса өҙә-өҙә генә һөйләшә, күрәһең, берҙән-бер ҡыҙының үлем түшәгендә ятыуынан һене ҡатҡан.

Балалар уларҙы донъяға килтергән ата-әсәләренән алда был яҡты донъянан китергә тейеш түгелдәр. Тәбиғи түгел был. Бер нисек тә...

Рыҫҡужа, етмештең өҫтөнә саҡ сыҡҡан ир уҙаманы, бөгөн ошо ҡот осҡос хәҡиҡәтте бар аяуһыҙлығында аңланы. Ҡем бит әле! Берҙән-бер генә, “өф” итеп кенә үҫтергән ҡыҙы. Өрлөктәй өс ир-егет араһында бер үҙе булғанғамы, Сәлимәкәйҙе атаһы бигерәк тә ныҡ яратты шул. Ауыл ирҙәренә хас булмаған наҙлылыҡ менән. Ғүмер баҡый тиерлек колхоз рәйесе йөгөн тартып, һис тә генә бушамаһа ла, етен сәсле сибек ҡыҙыҡайға ата хәстәрлеге мул тейҙе.

Ярай ҙа, улдары теремек булып сыҡты. Аталарының ярҙамы менән, Йыһангир менән Рәхимйән яңы йүнәлештә эш башлап ебәрҙеләр — фермерлыҡ хужалығын

теркәнеләр. Ҡалай булһа ла булды, Рысҡужаның улдары бирешмәне. Эштәрен тәүҙә һағайыбыраҡ ҡына башлағайнылар, тәжрибә лә, таһыллыҡ та әкренләп килде.

Аталарының кәңәшен тотоп отолманы Йыһангир менән Рәхимйән. Ҡан ҡанды тарта тип, нәҫел-ырыуҙарына арҡа терәнеләр. Бөлгөнлөккә төшә барған ауылда Иҫәнсуриндар, үткән быуаттарҙағы ата-бабалары кеүек, үҙҙәренең затлы тоҡомдан булыуҙарын иҫбатлап, йәнә хәлләнде, көс йыйҙы. Тәүҙә Йыһангир, унан Рәхимйән бер-бер артлы икешәр ҡатлы матур йорттар һалып керҙеләр. Бер яҡ ситтәрәк ҙур ҡура һалып, мал-тыуарҙарын ишәйттеләр. Әкренләп иген сәсеү кеүек шөғөлгә лә тотондолар.

Рәхилә лә киленле булып ҡыуанды. Ике өлкәненең артынса уҡ кесе улдары Илсура ла башлы-күҙле булды. Тик уныһы үҙһүҙлерәк ине. Ағайҙарының өгөтөнә лә ҡараманы, кәләшен етәкләп Себер яғына сыҡты ла китте. Рәхилә бошонғандай булды тәүҙә, әкренләп ул да тынысланды. Ҡалайтаһың, һәр кемдең үҙ мөнбәре.

Донъялар түңәрәк тә бит, китекһеҙ булмай икән шул. “Өф” итеп кенә үҫтергән, суҡтан-суҡ кейендереп, күҙ ҡараһындай күргән ҡыҙҙары Сәлимәкәйҙең яҙмышы маңлайына аяуһыҙыраҡ итеп яҙылғайны. Бик йәшләй кейәүгә сыҡты. Мәктәпте тамамлап, уҡырға ғына ингәйне, тәүге курсын да тамамламаҫ борон, ҡышҡы каникулында “Кейәүгә сығам!” тип ҡайтты. Әсәй кешенең иҫе-аҡылы китте. Атаһы арты менән ултырғысҡа ултыра төштө.

— Ҡайҙа ҡабаланаһың ул саҡлы, балам? — тип ҡараны аптырашта ҡалған Рәхилә.

— Мин уны яратам! — булды ҡыҙҙың яуабы.

— Һуң, бик йәшһең бит әле?

— Булһа һуң, — тип бошмай ғына яуапланы Сәлимә. — Ул да мине ярата. Был донъяла тағы ни кәрәк?

Артынса уҡ тигәндәй кейәү булаһы егет тә килеп төштө. Уныһы ла күп булһа бер-ике йыл элек мәктәп эскәмйәһе артынан торған балаға оҡшап тора ине. Аптырағандың көнөнән кейәү булаһы егеттең ата-әсәһен саҡыртып килтерҙеләр. Тегеләре әллә еңел-елперәк ине, үҙҙәренсә никахҡа тип килеп еткәндәр булып сыҡты. Сабый ғына балаһын үҙ мәшәҡәттәре һәм бурыстары хаттин ашҡан ғаилә тормошона башкөллө бирәһе килмәйенсә, Рәхилә байтаҡ айҡашты. Булаһы ҡоҙа-ҡоҙағыйҙары үҙ хәбәрҙәрен һөйләне. Йәнәһе, “Балалар үҙҙәре танышҡан, табышҡан, нимә тип уларҙың юлдарына арҡыры торорға? Мәйелдәре...” “Суҡынып китмәйҙәрме икән...” кеүегерәк яңғырай ине был.

Яҙғы тәүге тамсылар тупылдап тама башлаған мәлдә Иҫәнсура ауылы Сәлимәкәйҙе килен итеп оҙатып ебәрҙе. Стәрлетамаҡ ҡалаһына. Йәш кәләш менән кейәү ҡайны-ҡәйнәнең ике бүлмәле фатирының бер бүлмәһенә барып һыйынды. Ләкин Сәлимә икенсе курсҡа бара алманы. Ауырлы ине инде ул.

Бына шунда башланды ла инде бар ғәләмәт. Сәлимәне битәрләүҙәр, йәберләүҙәр, йәмһеҙ һүҙҙәр менән тиргәүҙәр. Ҡағылыу-һуғылыуға бөтөнләй өйрәнмәгән ҡыҙ бала тәүҙә юғалып ҡалды. Һуң, ғаилә ҡорғас, сабыйҙарҙың донъяға килеүе тәбиғи түгелме ни ул, тип үҙенсә көйәләнде йәш ҡатын.

— Һеҙ ике әрәмтамаҡты аҫраған етмәгән, хәҙер инде бала буғы таҙартып ҡына ултыраһы ҡалғайны! — тип ажарын сәсте ҡәйнә кеше. — Төшөрт ул нәмәңде! Күҙемә күрһәтәһе булма!

— Бына һиңә донъя көтөүсе! Ауыл ҡыҙҙары, имеш, эшсән була, — тип мыҫҡылланы ҡайны, телевизорынан айырылған арала.

— Уның шул тиклем йүнһеҙ булып сығырын кем белгән... Ҡарабыраҡ алырға кәрәк булған да бит. Мин юл йөрөгәндә өҫ-башығыҙҙы ҡарарға, тамаҡҡа бешерергә йәтеш булыр тип уйлағайным. Саҡ ҡына аҡылы булһа, үҙе лә аңларға тейеш ине.

Уҡырға инеп өлгөрмәҫ борон аҡылы теүәл әҙәм бала тиҙәгенә батып ята буламы! Крәҫтиән тоҡомонан тағы ни көтәһең... Сусҡа балалары шикелле бер-береһенең өҫтөнән йыбырлашып йөрөп үҫкәндәр бит инде.

Сәлимәнең быуылып илап бүлмәһенә йүгереп инеп киткәненә лә иғтибар итмәнеләр. Хатта ҡыуанып та ҡуйғандай иттеләр. Хәҙер артабан ни эшләргә кәрәклеген иркенләп уйлашырға мөмкин ине.

— Һиңә әйтәм, Тәлғәт! — тип башланы Гөлсара. — Мин киләһе аҙнала Мәскәүгә тауар артынан китәм. Шуға тиклем хәл итергә кәрәк.

Ирекәй иңбашын ғына һикертте. Ҡатынының ҡарарҙарына илтифатһыҙ ғына ризалашып йәшәргә күптән өйрәнгән инде ул. Уны артыҡ борсомаһа, шул еткән. Йортҡа килен килтереп керетеүҙең төп сәбәбен дә беләә.

Гөлсара Мәскәүгә, башҡа ҡалаларға йөрөп, тауар ташып һатыу эшенә тотонғас, хужалыҡтың рәте китте. Ҡатын-ҡыҙ тәрбиәһе күрмәгән ҡашығаяҡ тирәһе ике-өс көн эсендә аҫты өҫкә әйләнеп ята ине. Тәлғәт уны тәртипкә килтереп аҙапланманы. Бисәһе былай ҙа елкәһенә менеп бара, уны оторо аҙҙырып, тәрилкә-ҡашыҡ йыуып ултыраһы эше юҡ. Ҡаҡашып ҡатҡан тәрилкәләр өҫтө-өҫтөнә өйөлә торҙо. Берҙән-бер улдары Марселдең дә иҫе китмәне. Өҫтәүенә ҡаты ҡуллы әсәләре булмаған арала иптәштәрен йыйып, шағараҡ ҡорорға әүәҫләнде. Электән дә улы менән бөтөнләй шөғөлләнмәгән Тәлғәт бисәһе менән берҙән-бер малайына бөтөнләй ҡул һелтәне. Былай ҙа ялтырап тормаған ғаиләһенең ваҡыт үткән һайын бөтә йөйҙәр буйлап һүтелеүен, таралыуын күргән Гөлсара инде сәбәләнә башланы.

Төшөмлө эшенән баш тартырға уйы юҡ ине уның. 90-сы йылдарҙа заводтан ҡыҫҡартылыуға эләгеп, бик күптәр кеүек урамда тороп ҡалғас, сараһыҙҙың көнөнән был шөғөлөнә тотоноп киткәйне. Ғүмер буйы окладҡа эшләп, осон осҡа саҡ ялғап көн иткән ҡатынҡай аҡсаның тәмен тиҙ тойҙо. Бүрене аяғы туйҙыра икән. Бына шуны аңланы ул. Етеш йәшәүең күп осраҡта үҙеңдән тора. Урамда һатыныуҙан башлап ебәргәйне, тора-бара бер нисә һатыу нөктәһе ойошторҙо. Һалым полицияһы-фәлән бәлә һалып ҡуймаһын өсөн, уларҙың барыһын да үҙ исемендә генә теркәмәне. Донъя хәлен белеп булмай. Шулай итеп, Марсель дә, әлегә бер тин эшләп алырға ҡулынан килмәһә лә, ниндәйҙер рәсми ҡағыҙҙарҙа эшҡыуар булараҡ иҫәпләнде.

Бер ниндәй эшкә күңеле ятмаған ул малай аҡтығы йыраҡ бара алмаҫ. Әсәһенән шөрләңкерәй ҙә үҙе. Уҡыуын тамамлар алдынан да башында ел уйнаһа, күҙ күрер. Әлегә уны өйләндереү рәтен күрергә кәрәк. Гөлсара хәтеренән генә таныштарын барланы. Кәрәктә иҫенә лә төшмәй бит, ҡәһәрең. Марселдең үҙенең ҡылын тартып ҡарарға булды. Тегеһе иһә көтөлмәгән хәбәр ысҡындырҙы. Ике ай буйы дуҫлашып йөрөгән ҡыҙы бар икән. Ҡолағы ҡарп итеп ҡалған Гөлсара уның кем булыуы менән ҡыҙыҡһынды. Ауыл ҡыҙы, тигәс күңеле ҡайта бирһә лә, төпсөнөүен дауам итте. Хәлле генә йәшәйҙәр. Атаһы оҙаҡ ваҡыт колхоз рәйесе булған. (“Быныһы хуп!” — тине Гөлсара эстән генә.) Хәҙер ике ағаһы ҙур ғына фермер хужалығы ойоштороп ебәргән.

Гөлсараның шул мәлдә йәнә күҙҙәре теремекләнде. Ситтән ташып һатҡан сифатһыҙ кейем-һалым урынына осһоҙға ғына, йәиһә бөтөнләй бушҡа килгән һимеҙ ит-һөт рәттәре күҙ алдына килде. Барып сыҡһа, бик шәп кандидат бит был! Улына ситләтеп кенә әйткәйне, әлегәсә үҙ өҫтөнә яуаплылыҡ алыуҙың ни икәнен дә белмәгән малай шатланып риза булды. Күрәһең, ҡыҙ етәкләп киноға барып ҡайтыу итеп күрҙе. “Бала табып ултырыу тураһында уйлайһы ла булмағыҙ!” — тип киҫәтте әсәй кеше. Быны Марсель әллә ысынға алды, әллә юҡ — билдәһеҙ килеш ҡалды. Шулай итеп, Сәлимәнең яҙмышы хәл ителде. Әммә ләкин бөтә йөйҙәре туҙған ғаилә карабына ямау булырға тейешле килен өҫтәмә мәшәҡәт тыуҙырҙы. Һәм был мәшәҡәт — уның ҡорһағындағы бала. Нисек ҡотолорға был бәләнән?

— Һинең бер танышың бар бит, ҡала больницаһын әйтәм. Шуның аша эшләргә кәрәк.

— Мәйелең... — Ир йәнә иңбашын һикертте. Был юлы аш бүлмәһендә. Һимеҙ йылҡы итен сәйнә-сәйнәй. Ҡилен ишетмәһен тип, ошонда күскәйнеләр.

Ләкин Тәлғәттең танышы — оло йәштәге табип башына гонаһ алырға теләмәне. Гөлсараның киҫәтеүенә ҡарамаҫтан, ҡурҡынған йәш ҡатынға барыһын да төшөндөрөп бирҙе. Ҡағыҙҙай ағарынған Сәлимә шул көндө үк элек йәшәгән ятағына китте. Ҡейәүе артынан килер, уны яҡлар, терәк-таяныс булыр тип өмөтләнде. Марсель килмәне. Үҙенең ҡайғы-хәсрәте менән Сәлимә ҙур ҡалала япа-яңғыҙы ҡалды. Төшөнкөлөккә бирелгән йәш ҡатын: “Әллә төшөртәйем дә ҡуяйыммы икән?” тип яҙмышына буйһонорға ниәтләгәндә, һуң ине инде — яралғылар дүрт айлыҡ булып киткәйне. Уларҙың игеҙ булырға тейешлеген белгәс, ҡатынҡай тағы ла нығыраҡ ҡурҡты.

“Нисек инде? Бер үҙемә ике бала?! Мин уларҙы нишләтәйем?” — тип аҙарынды ул, йәштәренә төйөлөп. Сабыйҙарға иһә тап шул осорҙа йән инде. Үҙҙәренең барлығын белгертеп, тулай, ҡыбырлай башланылар. Әсәләренең ни уйлауын, ни кисергәндәрен дә тойған кеүектәр ине хатта. Борсола, хәсрәтләнә башлаһа, һағайып, шымып ҡалғандай булалар. Әйтерһең дә, әллә тағы беҙҙән ҡотолорға уйлаймы, тип шикләнәләр.

Йәйге сессияһын көс-хәл менән тапшырған, әлегәсә үҙ хәлен белдерергә ғәрләнгән Сәлимәне атаһы Иҫәнсураға алып ҡайтып китте. Ярһығайны Рыҫҡужа. Бешмәгән кейәүҙәрен шундай уҡ атаһы менән бергә ҡуша бәргеләп ташларҙай булды. Ярай ҙа эргәһендә рулдә Йыһангир ине. Рәхимйән килгән булһа, моғайын, берәй низағ сыҡмай ҡалмаҫ ине. Атаһының холҡон яҡшы белгән Йыһангир тәүҙә уны тынысландырҙы. Унан ипләп кенә эштең айышына төшөндөрөргә тырышты. Сәлимә уларҙан үҙе киткән. Бер кем дә ҡыуып сығармаған. Ә инде сабыйҙарынан уны мәжбүр итеп ҡотолдорорға маташыуҙы бер нисек тә иҫбатлап булмаясаҡ. Хәҙер тәүге бурыс — күҙҙәре төпкә батҡан, хәлһеҙләнгән, өмөтһөҙлөккә һәм төшөнкөлөккә бирелгән, ғәрлегенән күҙҙәрен ҡайҙа ҡуйырға белмәгән Сәлимәне яҡлау һәм ҡурсалау. Ҡейәү менән ҡоҙа әллә ҡайҙа китмәҫ.

Рыҫҡужа улы менән килеште. Һулҡылдап илаған Сәлимәне ауылға алып ҡайтып киттеләр. Йәйҙе бер кемдең күҙенә сағылмаҫҡа тырышып, йорт-ихата тирәһендә үткәрҙе ул. Намыҫланыуы шул саҡлы ине. Шул мәлдә Ағинәй Сәлимәне үҙе эҙләп килде. Йөҙөк ҡашындай ҡыҙының һулыуынан йәне өҙгөләнгән Рыҫҡужа әбей алдындағы элекке тәкәбберлеге өсөн ояла ине. Ололоҡлап уны түргә саҡырҙы, элекке һерелектәре өсөн ғәфү үтенгәндәй, ихтирам күрһәтергә тырышты. Әбей үҙен Сәлимә менән яңғыҙ ҡалдырыуҙарын һораны.

— Балам, — тине ул йөҙҙәре һурылып, яңаҡтары ослайып ҡалған Сәлимәне ҡаршыһына ултыртып. — Өҙгөләнмә ул саҡлым. Осраған бер кеше бармаҡ төртөп күрһәтеп көлә тип уйлап та яңылышаһың. Һәр кемдең үҙ мәшәҡәте башынан хаттин ашҡан. Сабыйҙарың килер юлға сыҡҡан. Һин уларҙы инде туҡтата алмаясаҡһың. Ҡөҙрәтеңдән килмәҫ. Әлегә саҡлы улар донъяға тыуым һорап яралғанға үкендең. Артыҡ, самаһыҙ үкендең. Хәлең еңелдән булманы. Быныһын да беләм. Хәҙер инде һиңә, балам, Хоҙай Тәғәләгә ялбарырға ғына ҡала. Әгәр ҙә инде быныһын да эшләмәһәң, донъяға килтергән ул сабыйҙарыңдан шәфҡәтлелек көтөүе ауыр булыр. Алланан көнө-төнө сабыйҙарыңдың йәндәрен-рухтарын имгәтмәүҙәрен, алты һандары теүәл булыуҙарын үтен. Тыумаҫ борон уҡ уларҙы яратыуыңды иҫбатла. Шунһыҙ булмай, балам. Бөтә булған рәнйегән кешеләреңде кисер. Хатта уларҙан яуызлыҡ күрһәң дә. Шунһыҙ үҙ йәнеңә көс килер... Һәм иң мөһиме, балам, — Ағинәй йөҙө саҡ ҡына яҡтыра төшкән Сәлимәгә текләберәк ҡараны, — ҡарыныңдағы сабыйҙарҙы ҡурсалауҙы фәрештәләрҙең үҙҙәренән һора.

— Нисегерәк итеп? — тип сәйерһенә төштө йәш ҡатын.
— Әгәр ысынлап теләһәң, һүҙҙәрен табырһың, — тип өҙҙө Ағинәй.
Әбей китергә йыйынды. Шулай ҙа йәнә боролоп, һынамсыл ҡарашы менән йәш ҡатынды күҙҙән үткәрҙе.
— Һине тағы бер һынау көтә, — тип кисә әйтте бер аҙҙан. — Ул хаҡта һуңыраҡ... Әлегә мәле етмәгән.
Сәлимә бала табыу йортона киткәнсе тағы бер нисә тапҡыр килде Ағинәй. Әлегәсә балауыҙ һығыуҙан башҡаны белмәгән йәш ҡатын әкренләп тынысланды, йөҙө аллана төштө. Ҡешеләр менән аралашҡанда элекке алсаҡлығы ҡайтты. Ләкин ул “һынау” хаҡында башҡаса һүҙ ҡуҙғалманы. Тик бына Сәлимә ике игеҙ улын күкрәгенә ҡыҫып бала табыу йортонан ҡайтҡанда, Ағинәй фани донъяларҙан үткәйне инде. Ике балаһының да алты һандары теүәл булып, һау-сәләмәт донъяға килеүҙәрендә әбейҙең ҡөҙрәтен күреп, уны ризаларға нәҙер әйткән Сәлимә йәнә һығылып иланы.
Ул да булмай Стәрлетамаҡтан ҡәйнә тейешле кеше килеп төштө. Ике игеҙҙең береһен алырға. Бөтә Иҫәнсура ауылы тетрәнде был хәлгә. Рыҫҡужа уны өйөнән ҡыуып сығарҙы. Ҡәйнә текә баҫып йорттан сыҡты ла машинаһына ултырып ҡайтып китте. Был имсәк сабыйҙың хәжәте юҡ ине уға. Ләкин “алимент” тигән ҡот осҡос һүҙ уны йоҡоһонан яҙҙырҙы. Ә малайының исемендә — иң килемле нөктәләр. Уларҙы әүеш-тәүеш итеүе байтаҡ ваҡыт аласаҡ. Бер түгел, ике балаға әжерен таптыра башлаһалар, мөлкәтенең яртыһын ҡайырып аласаҡтар. Шуға күрә лә былар иҫтәренә килмәҫ борон иң ҡулайлы юлды тәҡдим итергә булды ул.
Гөлсара артыҡ тауышланып торманы, икенсе аҙнаға Марселде лә алып килергә ниәтләнеп, ҡайтып китте. Бер юлы судҡа повестка ла йүнәтергә кәрәк ине. Ата кешене үҙ хоҡуғынан мәхрүм итергә маташыуҙың нимә икәнен белһендәр. Ә һыңар игеҙәккә килгәндә... шунда аяҡ араһында буталып йөрөп үҫер әле. Ана, бик булмаһа, ҡасабалағы ике туған һеңлеһенә олаҡтырыр. Детдомдан бала алғандар бит, быныһын да ҡарарҙар.
Һуңлап уянған әсәлек наҙы менән балаларын һөйөп туя алмаған, уларға исем ҡушыу шатлығы менән балҡыған Сәлимә ҡәйнә тейешле кешеһенең оятһыҙлығынан шаңҡыны. Әлегә рәсми рәүештә айырылмаған иренең килеп тә күрмәүенән йәнә ғәрләнде. Ҡөн көсөргәнешле булғас, балаларын эргәһенә һалып, нисек йоҡлап киткәнен дә һиҙмәй ҡалды ул.
Әллә төш, әллә өн булды...
Сәлимә күҙҙәрен асҡанда эргәһендә Ағинәй ултыра ине. Үҙе ап-аҡтан ғына кейенгән. Ҡулында — тиҫбеһе.
“Йә, хәлдәрең нисек, балам? — тип үҙ итеп кенә өндәште әбей. — Иҫән-имен генә ҡотолдоңмо?”
— Эйе, — тип яуап бирҙе Сәлимә. — Һинең хәйер-фатихала, Ағинәй.
Әбей тиҫбеһен тартып, бергилке өндәшмәй ултырҙы.
“Ҡиләһе аҙнала тағы ла килерҙәр, — тине ул кинәт. — Сабыйҙарыңдың береһен биреп ебәрергә кәрәк булыр...”
— Нисек??? — Сәлимә кинәт уянғандай булды. Йөрәген әсе әрнеү бөрөп алды.
“Шулай, ҡыҙым. Башҡа сара юҡ. Икеһен дә ҡалдыра алаһың. Йәиһә эйәреп бергә китә алаһың. Ләкин юлы был түгел”.
— Ниңә улай тиһең, Ағинәй? — тип өҙәләнеп өндәште Сәлимә. Уға ни тиклем ҡыйын икәнен күрһә, һүҙҙәрен кире алыр тип өмөтләнә ине әллә...
“Эйәреп китә алаһың, — тип ҡабатланы Ағинәй. — Ләкин Хоҙай Тәғәлә биргән тағы ике тиҫтә самаһы ғүмереңдең бер генә йылы ла михнәтһеҙ үтмәҫ. Шатлыҡ төҫө күрмәй, әкренләп һулыясаҡһың. Уларға ҡаршы тороғ көс һиндә юҡ”.
— Ағинәй... — Сәлимә әкрен генә һулҡылданы.

“Икеһен дә бында ҡалдыра алаһың, — тип дауам итте әбей. — Ләкин сабыйҙарҙың ҡурсалаусы фәрештәләре башҡа. Төрлө сиреүгә ҡарай улар. Бер-береһе менән айҡаша, мәңге көрәшә торған сиреүҙәргә. Был — яҙмыш, балам. Туҡтауһыҙ өҙгөләнеүҙәрең, үкенеүҙәрең менән береһененң йәнен тыумаҫ борон үҙең үк улар ҡарамағына билдәләнең һин. Икенсеһен генә ҡотҡара алдыҡ. Икәүләшеп. Ләкин тәүгеһе көслөрәк. Бергә үҫһәләр, ул икенсеһен иҙәсәк һәм үҙенә буйһондорасаҡ. Һин быныӊ менән бер нәмә лә эшләй алмаясаҡһың. Һәм улар һиңә көйәләнеү һәм ҡайғы-хәсрәттән башҡа бер нәмә лә килтермәйәсәк. Ҡуптәр һине ғәйепләр. Балаларын тәрбиәләй ҙә белмәгән ебек, бешмәгән, тиерҙәр. Ләкин һин хәлде үҙгәртә алмаясаҡһың. Сөнки уларҙың тәғәйенләнеше алдан билдәләнгән. Шуның өсөн тәүҙә тынныслан, үҙеңде ҡулға ал. Һин хәҙер Ҡеше яҙмышы өсөн яуаплы. Тағы бер аҙнанан килеп төшәсәктәр. Был көнгә әҙер булырға тейешһең...”

Сәлимә сабыйҙарына ҡараны. Тулған айҙың яҡтыһында мышнап ҡына йоҡлаған булалар. Йәне өҙөлгәндәй булды. Нисек итеп шуларҙы тотторop ебәрмәк кәрәк?! Йөрәкте һурып алған кеүек бит был!

— Ағинәй... — тип ыңғырашты ул. — Башҡа юлы юҡмы ни һуң?

“Бар. — Ағинәй тыныс ҡына яуап бирҙе. — Мин һиңә уларҙы һананым инде. Хоҙай Тәғәлә әҙәм балаһына һәр саҡ һайлау мөмкинлеге бирә. Һин дә һайлай алаһың”.

— Һуң кемеһен? Ҡемеһен??? — тип өҙәләнде Сәлимә. — Икеһе лә ғәзиз бит миңә!

Ағинәй ситтәрәк ятҡан Фәһимде доғаһын уҡый-уҡый ҡулына алды, ләкин үҙе бер нәмә лә өндәшмәне. Ләкин быны ике төрлө аңларға мөмкин ине. Ҡүрәһең, һынау тигәне ошо ине. Һәм һынауҙың да ниндәйе! Әгәр ҙә ул яңылышһа? Яңылышһа?! Йәш ҡатындың башы шаулай башланы. Ағинәй ай яҡтыһында нурлана биреп торҙо ла әкренләп һүнде.

— Ҡем? Ҡемеһе? — тип өҙәләнде Сәлимә. — Доға? Доға уҡыны бит Ағинәй! Фатихаһын бирҙе... Тимәк... Фәһим!

Тағы бер аҙнанан Сәлимә теремегерәк, етеҙерәк тойолған Рәзимде атаһына тотторop ебәрҙе. Мәгәр кейәүенә күтәрелеп тә ҡарамады.

Ейәндәре өсөн һуңғы сиккә тиклем айҡашырға ниәтләнгән Рыҫҡужаның иһә сабыйын еңел генә тотторop ебәргәне өсөн ҡыҙынан күңеле ҡайтҡандай итте. Һуңғы ярты йылда сикәһендәге сал сәстәре самаһыҙ ишәйгән Рәхилә йыуатманы ла, кире лә һүрмәне, бары таш һын кеүек ҡатҡан ҡыҙының башын тубығына һалып, бала саҡтағы кеүек итеп сәстәренән һыйпаны.

Ләкин бер кем дә ошо мәлдән алып Сәлимәнең күҙҙәрендә инде йәш күрмәне. Шул мәлдән алып Рыҫҡужаның йортонда игеҙҙең икенсе һыңары хаҡында бер кем бер ни һөйләмәне. Ҡүрәһең, һәр ҡайһыһы үҙен ғәйепле тип иҫәпләй ине. Инеп сыҡҡылаған күршеләре, ауылдаштары был хаҡта һүҙ башлаһа, әңгәмәне дауам итеүсе булманы. Рыҫҡужа менән Рәхилә ейәндәрен тотторop ебәреүҙә, уны һаҡлай алмауҙа үҙҙәрен ғәйепләне, Сәлимә иһә инә ҡарсыға кеүек эргәһендәге сабыйын һаҡлай ине. Тик Сәлимәнең быныӊ өсөн ниндәй хаҡ түләгәнен бер кем дә белмәне. Белмәүҙәре, бәлки, һәйбәт тә булғандыр. Был хаҡты, бәлки, төн йөҙөндә тәҙрәнән үрелеп кенә ҡараған Ай күргәндер. Мендәрен күкрәгенә ҡыҫҡан йәш ҡатындың ҡайҙалыр сит тупһаларҙа көн күргән Рәзим исемле сабыйы өсөн өҙгөләнгән минуттары күпме булды икән? Хәтһеҙҙер, моғайын. Аллаһы Тәғәләнән ул сабыйына игелекле яҙмыш һорап ялбарыуҙар? Хәтһеҙҙер... Ләкин Хоҙай ишеттеме икән? Сабыйҙың бит яҡлаусы фәрештәләре икенсе ине...

Фәһим иҫ белә башлаған мәлдән бирле әсәһенең донъялағы иң аҡыллы, һөйкөмлө, көләс һәм ышанысл йән эйәһе икәнлегенә ышанып үҫте. Уның һәр бер

ҡыуанысы әсәһенең дә уртаҡ шатлығы булды. Урамда малайҙар менән эләгешеп илап ҡайтҡан саҡтарында ла Сәлимә уны ситкә ҡаҡманы. Тубыҡтарына ултыртып, күҙ йәштәрен һөрттө, ипләп кенә хәлдең айышына төшөнөргә тырышты. Фәһим үҙе ғәйепле булған саҡтарҙа ла ҡаты ҡаҡманы. Ләкин малай әсәһенең ризаһыҙлығын тойҙо. Сәлимә үҙе шул арала ситтән тороп педагогия институтын тамамланы, ауыл мәктәбендә география фәненән уҡыта башланы. Мәктәпкә йөрөй башлаған Фәһимгә ҡупшы кейенгән әсәһен өлкән уҡыусылар араһында күреү бигерәк тә оҡшай ине.

Рыҫҡужаның иһә ейәнен тәрбиәләүгә ҡарашы үҙенсә булды. Үткәндәге хатаһын ҡабатламаҫ өсөнмө, әллә әсәй ҡулында малай үтә ебеккә әйләнер тип иҫәпләпме, үҫә килә Фәһимде үҙ эргәһенән ебәрмәне. Бесәнен дә бергәләп саптылар, мал аҫтын да бергәләп таҙарттылар.

Фәһим йылдың йылына буйсанырак, иңбашлырак була барҙы, Рыҫҡужа иһә әкренләп сүкте. Етмеште ҡыуған уҙаман әлегә нык булһа ла, йылдар үҙен һиҙҙерә ине инде. Фәһим үҫкән һайын Рыҫҡужаның күптән бирле йөрәген өйкәгән теләге лә арта барҙы. Унын икенсе ейәнен бик тә күргеһе килә ине. Бәлки, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙары йомшарғандыр, тигән уй ҙа башына килгеләп ҡуя. Ике малай бер-береһен белеп үҫһә, насармы ни? Ҡан туғандар бит ни тиһәң дә. Ҡәрҙәшеңә таянмай, тағы кемгә өмөт итмәк кәрәк был донъяла? Әкренләп, ситләтеп кенә Сәлимәгә был хаҡта әйткәйне, ҡыҙының йөҙө үҙгәреп китте. Әллә ниндәй ярамаған нәмәне атаһы уға тәҡдим итеп тора, тиерһең. Элекке кеүек күҙ йәшенә быуылып, туҡтауһыҙ илап ултырған ебегән зат түгел ине шул хәҙер. Тыныс, ләкин ҡатынҡы тауыш менән был хәлгә үҙенең ҡырҡа ҡаршы икәнлеген әйтте. Бер-береһен бөтөнләй белмәһәләр, тағы ла һәйбәтерәк булыр, тип өҫтәне. Һүҙ башҡаса ялғанманы.

Рыҫҡужа аптыраны. Ә бит унын ҡыҙы ҡаты күңелле түгел. Тормош ауырлығынан һынып, бәғере ташҡа әйләнгән кешеләр осрай. Уларҙан бындай һүҙҙәрҙе көтөргә мөмкин. Ләкин Сәлимәнән?! Аңлашылмай... Шулай ҙа эсендә оялап алған хөсөт ҡорто үҙенекен эшләй бирҙе. Һәм Рыҫҡужа тәүәккәлләне.

Ҡисләтеп кенә барып етте ул ҡалаға. Арлы-бирле иткәнсе, күҙ ҙә бәйләнде. Машинаһын бер ситтәрәк ҡалдырып, һалмаҡ аҙымдар менән әкрен генә баҫып, таныш йорт эргәһенә яҡынланы. Тик ғәжәп, ниңәлер аяғы тартмай. Боролоп ҡайтырға ла китергәме әллә тип тә уҡталып ҡуйҙы. Хәҙер уларға нимә тип әйтә инде ул? Бер киҫелгән телем ҡабаттан йәбешә буламы? Аяҡтары ихтыярһыҙҙан йорт ишеге ҡаршыһында туҡтаны. Ни булһа ла булыр тип ишектең тотҡаһынан тартҡайны, уныһы асылманы, күрәһең, кодлы йоҙаҡҡа бикләнгәйне.

— Эй, дед, что ты там потерял?

Рыҫҡужа һиҫкәнде. Ун дүрт-ун биш йәштәр тирәһендәге бер өйөр шалапай күҙ менән ҡаш араһында уны уратып алды. Ҡемеһелер әсе итеп һыҙғырып ебәрҙе.

— Бомждыр был!

— Юҡ, бур! Полундра, пацаны!

Ҡемеһелер нык ҡына итеп яурынына төртөп ебәрҙе. Ҡарт сайҡалып китһә лә йығылманы.

— Уландар, ни эшләүегеҙ был? Мин...

Йәнә төртөп ебәрҙеләр. Рыҫҡужа был юлы инде арты менән ергә барып төштө. Ҡемеһелер өйрәнелгән хәрәкәттәр менән унын кеҫәһендәге аҡса янсығын тартып сығарҙы. Ҡарт имгәкләп торорға маташҡан еренән башын күтәргәйне, ҡаршыһында тештәрен ыржайтып көлөп торған таныш йөҙҙө күреп, йәне алҡымына килеп тығылды. Был йөҙҙәге һәр һыҙат уға таныш ине. Күҙҙәрендәге яһиллыҡтан башҡа...

— Рәзи-им... Улы-ым...

— Рузик! Был бомж, нимә, һине беләме ни?

— Тамбовский волк тебе товарищ! Бирермен мин һиңә улды! — Үсмер егет сертләтеп ситкә төкөрҙө лә ерҙә ятҡан Рысҡужаның осаһына баҫып, уны ашатлап үтте. — Ҡиттек!

...Төн уртаһында ҡайтып ингән атаһының йөҙөнә ҡарау менән, Сәлимәнең йөрәге сәнсеп алды. Өҙәләнеп йөрөгән атаһының ҡасан да булһа был аҙымға барасағын белеп, йәне өшәнеп, тертелдәп йөрөгәнгә лә, уның ҡайҙа барғанын ул шундуҡ аңланы. Һәм... аяҡ аҫтарында ер уйылғандай булды. Барыһын да төшөнөү өсөн Рысҡужаның ни ҙә булһа һөйләүе лә кәрәкмәне. Рысҡужа үҙе иһә был хаҡта бер ҡасан да һүҙ ҡуҙғатманы. Ғәрләнде.

Ә Сәлимә барыһын да белә ине инде. Һәм шул мәлдән алып әленән-әле уның йөрәге сәнсә башланы. Тәүҙә үтер ул, тип уйланылар. Өмөтләнделәр. Өс йыл үтеүгә тәүге инфаркт булды. Был мәлдә Фәһим юғары уҡыу йортона инеп, саҡ тәүге курсын тамамлап килә ине. Атаһы телефон аша саҡыртып алырға уйлаһа ла, Сәлимә үҙе ҡаршы төштө. Тормошто яратыусан, күңелсәк улының йөҙөнә хәсрәт болото яғылыуҙан ҡурҡты. Ул бит ир-егет, тип нығышты Рәхилә. Сәлимә барыбер ризалығын бирмәне. Ваҡыты етмәгәйне әле. Ҡаникулға ҡайтҡан Фәһимдән барыһын да йәшерҙеләр. Сөнки әсәһе шулай теләне.

Аяуһыҙ сир менән көрәшеп, йәнә ике йыл самаһы ваҡыт үтте. Йәшәү көсөнөң көндән-көн уны ҡалдыра барғанын Сәлимә һиҙә ине. Инде оҙаҡҡа бармаҫын да белә. Тик бына улы аяғына нығлап баҫырға өлгөрмәне. Шул ғына үкендерә. Икенсе үкенесе — икенсе улының сит тупһаларҙа йөрөп буй еткереүе. Һәм уның хәл-әхүәлдәрен дә белә алмау.

Сире көсәйгән һайын, Сәлимәлә Рәзимде күреп ҡалыу теләге лә артты. Һуңғы тапҡыр булһа ла күҙҙәрен тултырып үҙе донъяға килтергән был йән эйәһенә ҡарайһы, уның инде, моғайын да, шырт баҫа башлаған яңаҡтарынан һыйпайһы килә ине ҡатындың. Ә, бәлки, тап киреһенсә булғандыр? Бәлки, был тормошҡа ашмаҫтай теләк уның йөрәгенең һуңғы кәрен алғандыр?

Балаһының ситтә тилмереп үҫеүендә үҙен ғәйепле итеп тойҙо ул. Башҡаса мөмкин булмауын белһә лә, уның алыҫыраҡ булыуының был осраҡта күпкә хәйерлерәк икәнен аңлаһа ла, ғәйеп тойғоһонан арына алманы. Улының үҙен ғәфү иткәнен бик-бик ишеткеһе килә ине Сәлимәнең. Был уға ниңә кәрәк булғандыр — үҙе лә аңламаны. Ошо теләк уны эстән яндырҙы, хәлен алды. Һәм бер көн Сәлимә тәүәккәлләне — әсәһенән Рәзимде табыуҙарын һораны. Атаһына әйтергә ҡыйманы.

Стәрлетамаҡ яҡтарына хат китте. Ләкин яуап булманы. Өмөт өҙөлдө. Барыһының да. Ләкин Сәлимә көтә ине әле. Һуңғы минуттарына тиклем ул Рәзимдең шырт баҫҡан яңаҡтарын һыйпап ҡына ҡарау хаҡында уйлаясаҡ. Ләкин Рәзим килмәйәсәк. Сөнки был уның биләмәһе түгел. Әлегә...

...Бейек тәҙрә төбөндә күперелеп үҫкән гөлдәр араһынан ҡояш нурҙары һарҡыла. Тағы ла яңы көн тыуа. Их, офоҡ ситенән ҡалҡып ҡына килгән ҡояштың нурҙарына ҡойоноп, ысыҡлы үлән өҫтөнән йүгереп йөрө ине ул!..

Сәлимә ыңғырашып ҡуйҙы.

“Балам, өҙгөләнмә ул тиклем...” — Был Ағинәй ине.

— Нишләйем һуң... — Сәлимәнең яңаҡтары буйлап юлаҡ-юлаҡ күҙ йәштәре һарҡты. — Үкенестәрем ҡала...

“Бына быныһы инде кәрәкмәҫ. — Ағинәй тиҫбе тартыуын дауам итте. — Барыһын да кисер. Һиңә яуызлыҡ ҡылған әҙәм балаларын да хатта. Үҙеңдә — тәү сиратта”.

— Улай яраймы ни һуң, Ағинәй? Ғәҙел буламы был?

“Шулай кәрәк, балам... Ғазаптарҙан өҙгөләнгән йәнеңә еңеллек килергә тейеш. Шунһыҙ ауыр булыр. Үҙеңә лә, һуңғы тапҡыр һинең артыңдан килгәндә миңә лә. Ошоно иҫкәртер өсөн килдем дә...”

— Ғүмерем шулай аҙ ҡалдымы ни?

Ағинәй өндәшмәне.

Сәлимә йәнә упҡынға осто. Күҙ алдына бала табыу йортонда ҡурҡа-ҡурҡа ғына ике сабыйын ҡулдарына алған мәл килде. Шунан күҙ асып йомған арала тулы ай нурында ҡойонған бүлмәгә күстеләр. Бер аҙҙан Сәлимә шул уҡ бүлмәлә яңғыҙ сабыйы менән генә тороп ҡалды. Үҙе таш һындай ҡатҡайны... Ғәйепләүсән ҡараштар... Шыш-быш килеүҙәр. Барыһы ла үтте, үтә, үтергә тейеш... Мәңгелек бер ни ҙә юҡ был донъяла...

...Фәһим һап-һары ҡаҙ бәпкәләрен ҡыуып, йәшел үлән өҫтөндә йүгереп йөрөй. Үҙе шул тиклем шатланып көлә. Тик бына ата ҡаҙ һис тә генә уның шатлығын уртаҡлашырға йыйынмай — кинәт суҡып ала. Өс йәшлек малай ҡысҡырып илап ебәрә. Унан да бигерәк, улын тубыҡтарына ултыртҡан әсәһе әрней: ана бит, аталыҡ тойғоһо хатта ҡаҙға ла хас — үҙ сабыйын яҡлай. Әҙәм балаһының бәғзеләре шуның шикелле лә була алмай бит!

...Алты йәшлек Фәһим әсәһенә үҙенең ғашиҡ булыуы хаҡында әйтә һәм оҙаҡламай өйләнәсәге хаҡында белдерә. Сәлимәнең шул саҡта рәхәтләнеп көлөүҙәре! Малай аптырап ҡала.

...Ул инде ир-егет ҡорона ингән. Сәстәре тулҡын-тулҡын булып ҡабарып тора. Иҫәнсуриндар нәҫеленә оҡшап, мыҡты кәүҙәле, буйсан. Бына бынығынан инде олатаһы Рыҫҡужа бигерәк тә ҡәнәғәт. Тамағын эре генә ҡырғылаған булып, ейәненең яурындарынан ҡағып ала. Эшсән шул Фәһим: ун йәшенән ҡоластарын киреп бесән сапты. Ике-өс йылдан күбәләй башланы. Бер аҙҙан техникаға әүәҫләнде. Ағаларының фермер хужалығындағы боҙолоп ултырған тракторҙар эргәһендә ике туған ҡустылары менән сәғәттәр буйы мәж киләләр. Рәтләй алһалар, үҙҙәре уйлап сығарғандай шатланалар.

...Сәлимә бер мәлгә генә иҫенә килде. Шул уҡ бүлмә. Шул уҡ гөлдәр. Ләкин ниҙер етмәй... Ҡояш! Ҡояш нурҙары юҡҡа сыҡҡан бит...

Гөл япраҡтары араһынан һарҡып ҡына ҡояш нурҙары күренде. Сәлимәгә был айныҡҡыс тәьҫир яһаны. Был донъялағы һуңғы минуттарын тотоп ҡалырға теләгәндәй, ынтылып ҡуйҙы.

— Әсәй!

Сәлимә шундуҡ иҫенә килде. Һуңғы өс көн эсендә үлем менән көрәшеп, тағы саҡ ҡына китмәҫкә ҡырталашҡан йәне ҡайҙандыр Йыһан төпкөлдәренән урап ҡайтты.

— Улы-ым! Ҡайттыңмы?

— Эйе, әсәй... — Фәһимдең күҙҙәренән субырлап йәштәре аҡты. — Әсәй!..

— Илама, улым. Илама... — Сәлимә хәлһеҙ ҡулдары менән уның эргәһендә тубыҡланып торған улының күҙ йәштәрен һөрттө. — Һин бит инде хәҙер ир-егет. Ныҡ бул.

— Әсәй... Китмә! Ҡалдырма мине!..

Фәһимдең башынан әкрен генә һыйпай Сәлимә, үҙе иртәгәһе көн хаҡында уйлай. Сиктең эргәһенә бер килеп баҫҡас, уны ла аша үтер инде ул. Ә ҡалыусыларға йәшәргә кәрәк...

— Хоҙай Тәғәлә һәр кемгә үҙ өлөш ризығын бүлеп бирә, — тине ул тыныс ҡына тауыш менән. Һәм үҙенең тыныслығына үҙе ғәжәпләнде. — Кемдеңдер ул дәү, бәғзеләрҙеке бик самалы ғына. Мин, улым, ана шул үҙ өлөшөмдө ашап бөткәнмендер, күрәһең. Ҡайтып өлгөрҙөң. Рәхмәт һиңә. Барыһы менән дә бәхилләшеп бөттөм. Һиңә иң һуңғы сиктә генә хәбәр итергә ҡуштым. Тыңланылар. Бынығына ла ризамын. Әйтәһе һүҙем шул һиңә, улым. Тыңла һәм аңларға тырыш. Бер кем дә донъяға үҙ теләге менән килмәй. Атай-әсәй хәл итә быны. Бәғзе берҙә хатта улар ҙа хәл итә алмай. Әгәр ҙә минең үҙ ҡөҙрәтемдә генә булһа, һин дә үҙеңдән ярты ғына сәғәткә оло ағайың менән бергәләшеп үҫер инегеҙ. Булманы. Ҡөсөм

етмәне. Нимәнелер дөрөҫ эшләмәнем. Шуға күрә лә был минең өсөн яза булды. Һеҙҙе айырҙылар. Бәлки, шулай булыуы һәйбәтерәк тә булғандыр. Унығын һин, бәлки, һуңынанырак аңларһың. Бәлки, шуның өсөн дә Хоҙай минән тормошто иртәрәк тартып алалыр. Сөнки һәр нәмәгә хаҡ түләргә кәрәк. Һинең дә түләйһе хаҡтарың барҙыр, балам. Йәл, эргәңдә мин булмам. Тик ана шул түләйһе хаҡтарың намыҫыңа көс килтермәһен. Бына быныһына инде минең бәхиллегем булмаҫ...

Сәлимә таң алдынан ғына үтеп китте. Был минуттарҙың ҡотолғоһоҙ булыуына инде шиктәре ҡалмаған Иҫәнсуриндарҙың күбеһе ата йортонда ине. Йыһангир барыһын да үҙ ҡулына алды. Сөнки көсө Рыҫҡужаны кинәт ҡалдырҙы.

— Балалар аталарынан алда китергә тейешме ни... Был ғәҙел түгел, — тип ҡабатланы уның кипкән ирендәре.

Рәхилә йәнһеҙ һынға әүерелгән ейәнен күкрәгенә ҡыҫҡан да тынып ҡалған. Бынан тап егерме йыл элек өнһөҙ ҡатҡан ҡыҙын ошолайтып йыуатырға тырышҡайны ул. Ул ваҡытта ейәнен алып киттеләр. Ҡыҙы улынан яҙҙы. Хәҙер инде үҙ ҡыҙын Әжәл алды. Ә уның үҙен һуң, үҙен кем йыуатыр? Һығылып ҡына төшөр ине лә бит... Ярамай. Ярамаҫ...

* * *

Сәлимәне ер ҡуйынына биргәнгә лә аҙнанан ашыу ваҡыт үтеп китте. Өндәшмәҫкә әйләнгән Фәһимде Илсура ағаһы машинаһында Өфөгә илтеп килде. Рыҫҡужаның өйөндә әллә ниндәй сәйер тынлыҡ хөкөм һөрә ине. Рәхилә ҡыҙы үҫтергән гөлдәр эргәһендә уйға батып ултырырға ғәҙәтләнде. Бигерәк ярата ине уларҙы Сәлимә. Тик бына сәскәләрҙең дә ғүмере ҡыҫҡа. Ҡыҙының ғүмере шикелле. Рәхиләнең күҙҙәренә йәнә йәш төйөлә... Рыҫҡужа өйҙә толҡа тапмай күберәк ихата тирәһендә урала. Тик бер нәмәгә лә ҡулы бармай. Былай ғына йөрөй ул. Сөнки йорт эсенә керһә, тағы ла ауырыраҡ булаһын һиҙә.

Илсура эшләгән еренән отпуск алып, ғаиләһе менән ҡайтҡайны. Элегерәк йәйҙең матур көндәрендә иркенләп йөрөһәләр, быйыл шулайыраҡ тура килде. Ҡәләше, үҙенән ете-һигеҙ йәшкә йәшерәк Лира килендәре, шуға, ана, кәйефһеҙләнеп тырт-бырт йөрөй. Эргәһендә уралған дүрт йәшлек Айратҡа ла иғтибар итмәй. Ҡалала үҫкән шул Лира, ауыл тормошон үҙһенмәүе үҙенекен итә.

Айраттың ғына донъяһы түңәрәк. Иркен ихатала сабып арығас, бер мөйөштә тимер сынйырға әләктерелгән овчарка тоҡомло эттәре янында сыуалырға керешә. Рекс үҙ эргәһенә килгәндәрен бик тә ярата, ярайһы уҡ уҫал булһа ла, ҡойроҡтарын болғап, аҡыллы күҙҙәрен хужаларына төбәй. Мәгәр ихата эргәһендә сит-ят тауыштар ишетелгәндәй тойолһа, ул аҡыллы күҙҙәрҙә шунда уҡ уҫал осҡондар һикерешә башлай, эт үҙе тимер сылбырын өҙөп алырҙай булып ажарлана.

Әле лә Рекс Айрат эргәһендә ҡойроғон болғап ултырған еренән кинәт кенә һикереп торҙо, ауыр сылбырҙарын һөйрәп йөрөп өрөргә кереште. Үҙ иркен үҙе сикләгән шул. Этенең хәүефләнеүе Айратҡа ла күсте. Ул тирә-яҡҡа күҙ ташланы. Борсолорлоҡ бер нәмә лә юҡ кеүек. Артҡы кәртәнең ҡапҡаһы эргәһендә әсәһе менән һөйләшеп торған оҙон буйлы ағайҙы ғына иҫәпләмәгәндә. Ағай? Бәй, Фәһим ағаһы ла инде! Тик кейемдәре генә икенсе.

— Өләсәй! Өләсәй... — Болдорҙан үрмәләп менгәнсе бышлығып бөткән Айраттың тауышынан Рәхилә һиҫкәнде. — Өләсәй... Ни... тегендә...

— Ни булды, балам? — Күҙ йәштәрен яулығының осо менән һыпырып, әбей урынына ҡуҙғалды. — Әллә бер-бер хәл булдымы?

— Юҡ та... Ни... Фәһим ағайым ҡайтты! — тине малай шатланып.

— Нисек? — Рәхилә аптырап китте. — Өс көн элек кенә оҙатҡайныҡ та һа. Атайың бит үҙе алып барып килде. Эй алла, әллә бер-бер хәл булып киттеме, илаһым... — Күңеленә хәҙер инде хәүефтән башҡа бер нәмә лә килмәгән Рәхилә,

әле генә хәсрәтләнеп ултырғанын да онотоп, ҡабаланып урынынан торҙо, сәстәрен һыпырғылап, яулығын ипләп ябынды. — Ҡайҙа һуң ағайың, балам? Ниңә өйгә инмәй? — тип өләсәһен шатландыра алмағанына аптырабыраҡ баҫып торған Айратҡа өндәште.

— Тегендә... Артҡы ҡапҡа эргәһендә... Әсәйем менән һөйләшеп торалар.

Рәхилә ҡабаланып болдорға сыҡты. Айрат уның ҡултыҡ аҫтынан йылт итеп үтеп, аҫҡа йүгерҙе. Рекс һаман да ажарланып өрә, әле бер, әле икенсе яҡҡа ташланып, сынйырынан ысҡынырға аҙаплана. Кескәй малай күтәрмәнән йүгереп төшөп ағаһына ҡаршы йүгерергә самалағайны, ләкин шып туҡтап ҡалды — килеүсе Фәһим түгел ине.

Дөрөҫ, һын-һыйпаты оҡшаған. Буйға ла бер самараҡ. Шул уҡ сәстәр. Йөҙөнөң төҙөлөшө лә ҡабатлана, тиерлек. Тик бына ҡарашы әллә нисегерәк... Оҙағыраҡ төбәлеп ҡараһаң, күңелгә аңлайышһыҙ һалҡынлыҡ үрмәләй. Күҙҙәр — күңел көҙгөһө тигән һүҙҙәрҙә әллә хаҡлыҡ бармы?

Килеүсе берсә алдында аптырап торған малайға, берсә өтәләнеп болдорҙан төшөп тә бер һүҙ өндәшә алмай үҙенә төбәлгән әбейгә алмаш-тилмәш ҡараштарын йүгертә. Ситтәрәк баҫып торған Лираның күҙҙәрендә йәнләнеү сағыла. Ялҡытҡыс ауыл тормошона мәҙәк бер яңылыҡ инеүенә шатланыуын да, күрәһең, йәшерә алмай.

— Һаумыһығыҙ? — тип өндәште килеүсе, күрәһең, үҙен ни ҙә булһа әйтергә тейешле һанап.

— Һау... — Рәхиләнең шул мәл йәнен-бәғерен йәшен ҡыйып үткәндәй булды. Күңеленә килгән шиктән хәлһеҙләнеп, ултыра төштө, ике ҡулы ирекһеҙҙән килеүсегә һуҙылды. — Рәзим... Рәзим!.. Балам!..

Килеүсенең күҙҙәрендәге сағылыш йәшен тиҙлегендә үҙгәрҙе. Ул хәҙер бик мөләйем ине.

— Өләсәй! — тине ул бышылдап. — Өләсәй...

— Балаҡайым! — Рәхилә ысынлап тороп илап ебәрҙе. — Йә инде, балаҡайым... Йә инде... Хоҙай Тәғәлә береһен ала, икенсеһен бирә... Эй, балаҡайым, әсәйеңде күрергә өлгөрмәнең бит! Китеп барҙы шул йөрәккәйем!

— Беләм... — Рәзим күҙҙәрен аҫҡа төбәне. — Тик бына саҡ ҡына һуңланым. Тере килеш тап итергә шул тиклем өмөтләнгәйнем...

— Эй, бала, бала...

Рәзим юл кейемендә ине. Яурынында ҙур булмаған сумкаһы ла күренә. Күрәһең, Иҫәнсураның эргәһенән тиерлек үткән трассала автобустан төшөп ҡалған.

Рәзим сәйер хатты алғандан һуң, һис ниндәй шикләнеүһеҙ-икеләнеүһеҙ, сүп һауытына осорҙо. “Әсәй? Һе... Үлер алдынан, имеш, күрергә теләй. Әлегәсә ҡайҙа инең? Бала табыу йортонда уҡ ташлап китергә булғас, ни бысағыма таптың? Икенсе имгәгеңде үҙең менән алғанһың бит. Ашарға күпте таптырыр тип өрккәнһеңдер...” Донъяға килтергән әсәһенә ҡарата шуға күрә лә унда әлегә саҡлы бер ниндәй ҙә тойғо булманы. Нәфрәттән башҡа. Сепрәк кеүек бер мәүеш байғошҡа әйләнгән ҡартаһына ла, донъя көтәм тип сәбәләнгән ҡартәсәһенә лә ул кәрәкмәне. Үҙ атаһы ҡайҙалыр ситкә китеп олаҡҡайны. Ете-һигеҙ йәштәргә тиклем уны апаһы ҡараны. Рәзимдең ғүмерендәге иң яҡты хәтирәләр ошо йылдар менән бәйле. Унда уны ҡағыусы ла, һуғыусы ла булманы. Апаһы ла, ағаһы ла уны үҙҙәренсә яраттылар ҙа, ахыры. Һәр хәлдә ҡаҡманылар.

Рәзимдән өлкәнерәк бер сирләшкә генә балалары ла бар ине. Әллә ниңә шуны яратмаҫ булды Рәзим. Өлкәнерәк көйөнә атлай ҙа алмай ултырған ғәрип булғанына йәне көйөүе инеме, белмәҫһең. Апаһының ишектән сығыуын ғына ҡарап тора ла тегене бороп семетеп ала. Теге имгәк яр һалып иларға керешә. Ә Рәзим һис ни булмағандай уйынсыҡтары менән уйнап йөрөй. Апаһы йүгереп ингән була, ерле-юҡҡа аҡырған

улын битәрләй ҙә эше буйынса тағы сыға. Бер минут та үтмәй, хәл йәнә ҡабатлана. Һуңынан апаһы уның ҡысҡырыуҙарына өйрәнеп китте, иғтибар итмәй башланы.

Үсеше тотҡарланған был Йәмил исемле малайҙың теле лә һуң сыҡты. Шуға күрә Рәзим уны хәтһеҙ ыҙалатты. Хатта ошо яфалауҙары үҙенә күрә көн үткәреүҙең бер мәҙәк сараһына әүерелде. Әлфридә апаһы улын йыуындырған арала уның күгәргән урындарының хәтһеҙ күп булыуына иғтибар итә башлағас ҡына, бер аҙға туҡтап ҡалды. Ләкин язалау дауам итте. Рәзим инде эҙ ҡалдырмай эшләргә тырышты. Теге яҡлауһыҙ, йөрөй алмаған йән эйәһенең сәсен-ҡолағын тартыуҙар, уйынсыҡтар менән башына тондороуҙар... Иҫәпһеҙ-хисапһыҙ булды улар. Теге бахыр әсәһе ишеккә йүнәлеү менән иларға керешә, Рәзим менән ҡалмаҫ өсөн үҙенсә ҡырталаша. Әсәһе уфтана.

Ләкин бер көндө ағаһы уйламаҫтан килеп инеп, уны ҡыҙыу эш мәлендә тап итте. Һәм барыһы ла асылды. Һәм шул мәлдән алып Рәзимдең тормошо үҙгәрҙе. Бәләкәй балаларға хас булмаған ҡанһыҙлыҡҡа хайран ҡалған Әлфридә менән Нәсих икенсе көндө үк Рәзимде Стәрлетамаҡҡа алып киттеләр. Бында инде малайҙы бөтөнләй икенсе тормош көтә ине.

Юл сабыуҙан бушамаған, көҙөн-ҡышын аяғөҫтө тороп һатыу иткәнгә һаулығы ла ҡаҡшаған Гөлсараға был имгәктең хәжәте юҡ. Ярай, берәй яйы табылыр әле тағы ла, тип ул сараһыҙҙан малайҙы алып ҡалды. Рәзимде урам тәрбиәһе үҙ ҡосағына алды.

Мәктәпте тамамлаған мәлдә Рәзимдең тәржемәүи хәлендә бер нисә шау-шыулы тарих бар ине инде. Ләкин ул үҙе бер ваҡытта ла тотолманы. Ул ҡылған ҡылыҡтар өсөн кемдәрҙер колонияға китте, бәғзеләре штраф менән, кемеһелер еңелсә ҡурҡыу менән ҡотолдо. Элекке эшнәләренән бер кем дә уның менән уртаҡ эш алып барырға теләмәй. Сөнки беләләр: һыуҙан ул барыбер ҡоро сығасаҡ. Тик бына шуныһы аңлашылмай: бының өсөн ниндәй хаҡ түләй икән ул? Элекке дуҫтарының башы менән иҫәпләшәме?

Түбәһе осонда болоттар ҡуйыра башлаған мәлдә Рәзим әсәһенән, икенсе төрлө итеп әйткәндә, “әсәй ишаратынан”, хат алды. Алды ла һүгенеп сүп һауытына осорҙо. Ләкин бер ай ҙа ваҡыт үтмәне, эштәре мөшкөлләнде. Ҡистәрен уны урамда һағалайҙар ине инде. Ҡисә генә эшнә булып йөрөгән шешәләш дуҫтары “һатлыҡ йән”дән үс алырға йыйынғайны. Ә һатлыҡ йәндәрҙе нисек язалағандарын Рәзим һәйбәт белә. Үҙенең дә ҡатнашҡаны, улай ғына ла түгел, идеологы һәм практик башҡарыу йәһәтенән етәксеһе булғаны бар.

Эске бер тойғо был көндө Рәзимде урамға сығыуҙан тыйҙы. Ул буйһондо. Унда үҙен ни көткәнен белгәнгә, әллә ни атлығып та тормай ине. Ә инде иртә менән, таңдың әре-һәреһе саҡ беленә башлаған мәлдә, Рәзим юлға сыҡты. Иҫәнсура ауылы тигән һүҙ уның иҫендә ҡалғайны. Мәле еткәс, хәтеренә төштө. Һәм был йәнен һаҡлап ҡалыу өсөн бик тә ваҡытлы булды...

* * *

Рәхилә ейәненә ҡарап туя алмай. Аҙна-ун көнлөк кенә сағында ҡулдарынан тартып тигәндәй алып кителгән был баланың нисәмә йылдарҙан һуң ошондай ҙа киң яурынлы һәм мөһабәт һын-һыйпатлы ир-егет булып тупһаларына аяҡ баҫыуын Хоҙайҙың бер ҡөҙрәте итеп ҡабул итте ул. Берҙән-бер генә ҡыҙын юғалтыу ҡайғыһынан кинәт шиңгән әбейҙең күҙҙәре йәнә теремекләнде. Әйтерһең дә, ҡыҙҙарының үлеменән күңелендә яралған йән өшөткөс бушлыҡты кинәт пәйҙә булған ейәндәре тултырырға тейеш ине.

— Эй, балаҡайым... — тип туҡтауһыҙ ҡабатланы Рәхилә. — Йә инде, нисек кенә таба алдың беҙҙе? Ниңә генә хәбәр итмәнең? Ағайҙарың үҙҙәре машина менән

барып алырҙар ине бит. Беҙ ни... күпме йылдар үткәс... тота килеп барып төшөүҙе килештермәнек шул... Уйлап ҡуйғайныҡ та... Тик бына...

— Шулай тура килде. — Рәзим ҡарашын йәшерҙе. Күҙҙәрен ҡаршыһында ултырып бер туҡтауһыҙ зыуылдаған әбейгә ҡабат күтәргәндә, уларҙа илтифатлыҡ һәм үкенеү хистәре сағылғандай булды. — Йөрәк етеңкерәмәне шул, өләсәй. Нисек ҡабул итерегеҙҙе лә белмәнем. Әсәйем саҡырһа ла, башҡалар ҙа бар бит әле. Улар ни тип әйтерҙәр һуң? — Рәзимдең күҙҙәре әбейҙең йөҙөндә сағылған уй-фекерҙәрҙе йәшен тиҙлегендә байҡап алды.

Рәхилә йәнә өтәләнеп китте.

— Эй, балаҡайым, тапҡанһың ҡурҡыр нәмә! Һинең ситтә үҫергә мәжбүр булыуың өсөн дә олатаң менән икебеҙ үҙебеҙҙе ғүмер буйы ғәйепле һананыҡ... — Егеттең ҡарашында ҡәнәғәтләнеү һиҙелде. Ул шул арала йорт эсен байҡап алырға өлгөргәйне. Хәлле йәшәгәнгә оҡшайҙар. Өй ҙур, иркен. Йоҡо бүлмәләре генә лә ике-өс, ахыры. Йыһаздары заманса. Тыштан ҡаралтылары ла ныҡ. Гараждарына тиклем бар. Мейеһендә яралған фекерҙән Рәзим һиҫкәнгәндәй итте. “Ә ниңә... бик тә мөмкин. Нисек элегерәк уйламағанмын?..” Үҙе берсә күҙ йәштәрен һөртөп, берсә уның яурындарынан ҡосаҡлап һөйөп, ҡаршыһында әллә нәмәләр ҡыланған ҡарсыҡҡа итәғәтле генә итеп ҡараны. — Фәһимем менән бергә-бергә пар ҡолонсаҡтарҙай йүгерешеп йөрөп үҫер инегеҙ бит инде...

“Фәһим? Ярай, күрербеҙ ниндәйерәк ҡошсоҡ икән... Ә ниңә мин түгел, ул үҫкән был байлыҡ эсендә? Мин кипкән икмәк ҡатыларын тапҡанға ла ҡыуанып бер булғанда, ул, күрәһең, ошо йәүкелдәгән ҡарсыҡтың итәгендә иркәләнеп ултырған. Ғәҙелме был? Иҫерек ҡарттай ишаратының бысраҡ итекле аяғы менән арт һанға типкәндәрен үҙ осаһында татымаған...”

Рәзимдең йөҙө ҡараңғыланып китте. Инә ҡошсоҡтай уның эргәһендә уралған Рәхилә быны үҙенсә аңланы.

— Игеҙәк туғаныңды әйтәм инде, Рәзим улым. Фәһимемде һөйгән саҡтарымда һине лә яратҡан кеүек итеп танһыҡтарымды баҫа торғайным, — тип эс серҙәре менән уртаҡлашты бер ҡатлы ҡарсыҡ.

Рәзим инде эскерһеҙ йылмайып өләсәһенә ҡараны.

— Аңланым, өләсәй. Ә ҡайҙа һуң үҙе?

Күңелһеҙлектең үткәненә Рәхилә ҡыуанып китте.

— Уҡып йөрөй балаҡайым. Быйыл өсөнсө курсын тамамлай. Гелән һәйбәт билдәләргә генә өлгәшә үҙе.

“Шулайҙыр шул... Ул гелән һәйбәт билдәләрҙең нисегерәк һатылғанын беләбеҙ. Хәйер, былар ул өтөктәре өсөн бер ни ҙә йәлләмәйҙәрҙер. Ә ниңә, минең дә хаҡым юҡмы ни?..”

— Күрергә ине үҙен. Әлегәсә япа-яңғыҙы үҫкәс, нисегерәк икән ул туғанлы булыу. Етмәһә игеҙәк... — Рәзим өләсәһенә тишә ҡараны.

Әбейҙең йөҙө үҙгәрҙе. Уфтанғандай итеп, урынына ҡабат ултырҙы. Егет эстән тантана итә ине. Тоҫҡағаны сәбенә йәтеш ултырҙы. Хәҙер был ҡарсыҡ башҡалар алдында уны яҡлаясаҡ. Әлеге лә баяғы хәстрүш намыҫ тигән нәмәһен эшкә егеп. Ни тиһәң дә, үҙ ейәндәрен сит-ят ерҙә үҫергә мәжбүр иткәндәр бит. Башҡалар менән танышҡанға тиклем ҡарсыҡты был яҡтан тағы ла ныҡытып ҡуйған яҡшы булыр.

Рәзим тирә-яғына күҙ йүгертте. Уға артҡы ихатала ҡаршы осраған һылыу ҡатын аш бүлмәһендә табын йыйыштыра. Кем булды икән был сибәркәй? Ну, күҙҙәре, малай! Яндырып ала.

Егеттең һәр бер һүҙенән бәгеренә уҡ ҡаҙалғандай тертләп ултырған Рәхилә яулығының осо менән йәштәрен һөрттө.

— Белмәнек шул, балам, хәлдәреңде. Әллә ҡасан барып алыр инек.

“Хәҙер ҙә һуң түгел, борсолма...” — тип эстән генә өҫтәне Рәзим һәм һүҙҙе икенсегә борҙо. Эш эшләнде. Ул бында күпме теләй, шунса йәшәйәсәк. Кәрәк булһа, ошо ҡарсыҡҡа “эт типкеһендә үткән сабый саҡ” темаһына әңгәмә ҡуйыртыу ҙа етә. Шунда уҡ был әбей инә ҡарсығa шикелле уны яҡларға ташланасаҡ. Әлегә был хаҡта башҡаса кәрәкмәй. Артығыраҡ булыр.

...Рыҫҡужа был мәлдә яй ғына атлап урам буйлап килә ине. Лира килене әле генә төп йортта булған ғәжәп хәл тураһында тәмләп-тәмләп тасуирлап, Зөһрә эргәһендә ҡалды. Рыҫҡужаның йәне һыҙлай ине. Әйләнә лә күҙ алдына ҡалала ҡоҙаларының йорто ҡаршыһында булған күренеш килә. Үҙенең аяҡ аҫтында тапалып ятыуы, ейәненән шәфҡәтлелек көтөүе, уныһының иһә ерҙә ятҡан ҡарт яғына сертләтеп төкөрөп һүгенеүҙәре... Нисек онотаһың быны? Күп ваҡыт та үтмәгән бит юғиһә. Биш йыл, ни бары биш йыл. Ә был биш йыл дәртләнеп эшләп йөрөгән алмалай ҡыҙын һулытып-шиңдереп теге донъяларға алып китте.

Рыҫҡужа әкрен ғына аҙымдар менән болдор баҫҡыстары буйлап күтәрелде. Үҙ өйө ят һымаҡ тойолдо уға. Вәт ғәжәп, һәр бүрәнәһен үҙ ҡулдары менән һалған, уларҙағы китек-ҡотоғона тиклем таныш булған йортоң да сит тойолһон әле!

Рәхиләнең өтәләнеп китеүенән олатай тейешле кешенең инеп килеүен аңлаған Рәзим ҡартты ҡаршылап аяғөҫтө баҫты. Был йортта төп кешенең тап ул икәнен егет инде аңлап өлгөргәйне. Ҡарсыҡ күпме йәүкелдәһә лә, аҙаҡҡы ҡарарҙы ҡараштары ҡарсығаныҡы кеүек үткер, үҙе лә ҡайһы яғы менәндер һунар ҡошон хәтерләткән ошо ныҡ кәүҙәле ир уҙаманы ҡабул итә. Йәше сама менән етмештең өҫтөндә булһа ла, һис кем дә уға был йәште бирмәйәсәк. Донъяла үҙе баш, үҙе түш булып йәшәргә өйрәнгән һәм ошо ҡомарҙы улдарының улдарына биреп ҡалдырырға өйрәнгән заттарҙың береһе ине был.

— Һаумы, ҡартатай! — тип үҙе башлап өндәште Рәзим бик итәғәтле тауыш менән.

Өйөнөң түрендә һыра шешәһе күтәреп, теш араһынан төкөрөп ултырған берәй шпананы күрергә әҙерләнеп килгән Рыҫҡужа аптырап китте. Ҡаршыһында оҙон ғына буйлы, киң яурынлы егет баҫып тора. Төҫө-ҡиәфәте менән Фәһим ейәненә апаруҡ оҡшаһа ла, уларҙы “һуйған да ҡаплаған” тип һис кенә лә әйтеп булмай. Әллә нимә айыра уларҙы. Тик бына нимә — төшөнөүе ауыр.

— Һаумы, — тип өндәште ул ҡарлыҡҡаныраҡ тауыш менән. Үҙе ҡаршыһындағы егеткә һынап ҡараны. Бисәләр шикелле ҡосаҡлаған һәм арҡанан ҡаҡҡан булып сөсөлдәүҙе килештермәне.

Рәзимдең ҡарашында аңлайышһыҙ тойғо сағылып үтте.

— Бына, ғүмер булғас, һеҙҙе килеп таптым... олатай... — тине ул һуңғы һүҙенә баҫым яһабыраҡ. — Әгәр ҡабул итһәгеҙ, — тип тә өҫтәне.

— Кит, улым, ул ни тигән һүҙең тағы? — тип өтәләнеп китте Рәхилә.

— Бик хуп. — Рыҫҡужа һуңғы аҙнала шырт баҫып киткән яңағын һыйпаны. — Бик хуп. Күптән кәрәк ине, — тип өҫтәне, бының ихлас әйтелдеме-юҡмы икәнен үҙе лә белмәһә лә.

Рыҫҡужа түргә үтте һәм уның ни әйтерен көтөп түҙемле генә ҡиәфәттә баҫып торған Рәзимгә өндәште.

— Әйҙә, улым, табын артында һөйләшербеҙ. Беҙҙең бит өр-яңынан танышаһы, онотолған туғанлыҡты тергеҙәһе бар... Үҙең хаҡында шунда барыһын да һөйләрһең.

Егеттең эсенә йылы йүгерҙе. Рыҫҡужаның уны инде бер тапҡыр күргәнен белмәһә лә, был ҡарттың ыштанһыҙ бер ябай ауыл ҡарты түгеллеген ул аңлағайны инде. Тимәк, күп нәмә унан торасаҡ. Һаҡ булырға кәрәк. Улар һәр ҡайһыһы үҙ уйын уйлап, ҡәнәғәт ҡиәфәттә йүгерә-йүгерә табын әҙерләп булашҡан Рәхилә эргәһенә үттеләр.

* * *

— Инергә яраймы?

Ауыл ерендә ишек туҡылдатып инеү кеүек ғәҙәт булмағанын белһә лә, Рәзим әҙәп һаҡлауҙы урынлы күрҙе.

— Һо-о, үҙемдең ҡусты! Иртәләгәнһең бөгөн...

— Ҡәҙәшләшергә ине, ағай, һеҙҙең менән.

Рәзим бейек һәм күркәм итеп һалынған йорттоң тупһаһы аша үтте.

— Әйҙә, әйҙә, түргә.

Йыһангир менән Зөһрә табын артына ултырып ҡына торалар ине. Зөһрә йәһәт кенә урынынан ҡалҡынып, шкафтан сынаяҡ-ҡалаҡтар алып теҙҙе. Үҙе лә атаәсәһенән иртә ҡалып, апаһы ҡулында буй еткергәнгә, ҡатынҡай Рәзимдең тарихын йөрәгенә бигерәк тә яҡын ҡабул иткәйне. Улын анһат ҡына тотороп ебәреп, донъяла уның бармы-юҡмы икәнлеге менән дә ҡыҙыҡһынмаған, исмаһам, уны бер тапҡыр барып күрергә лә ынтылмаған Сәлимә бикәсен эстән битәрләне.

Нисек инде, күпме ыҙалап шул сабыйҙарҙы донъяға килтер ҙә, бесәй балалары урынына “быныһы — һиңә”, “быныһы — миңә” тип бүлгелә? Әсәй кеше, балаларына ғүмер биргән әсәй кеше шулай эшләй аламы?! Юҡ, йәнһеҙ булғандыр уның бикәсе!

Зөһрә уйлағандарын әллә ни тышҡа сығарманы. Ошондайыраҡ хис-тойғолар үҙен солғап алған мәлдәрҙә инде апаруҡ буй еткереп килгән кинйәләрен тупылдатып һөйҙө, үҙенең барыбер ҙә һәйбәт әсәй булыуына күңеле бөтәйҙе, мәгәр шунан ары китмәне. Хис-тойғоларын Зөһрә тышҡа сығарырға һәм кем менәндер уртаҡлашырға бигүк ҡабаланманы. Ҡилендәше Зәмзәгөлдән башҡа.

Ә Зәмзәгөлдөң холоҡ-ҡылығы бөтөнләй башҡасараҡ. Шаран-яра Зәмзәгөл менән шундайыраҡ уҡ холоҡло яндырай Рәхимйән нисек һыйышып йәшәйҙәр икән тип, Иҫәнсура ауылы халҡы тәүге мәлдәрәк аптырап бер булды.Тора-барараҡ өйрәнделәр.

Рәзим хәҙер инде Йыһангир һәм Рәхимйән менән уртаҡ тел табыу яйын эҙләй башланы. Сөнки Рыҫҡужа әбейе эше ҡапҡанға анһат ҡына эләгерҙәйгә һис тә оҡшамағайны. Һынамсыл итеп ҡарай, һәр һүҙен үлсәп һөйләй. Ул ҡарт төлкөнөң уйында ни булғанын бар, ана, төшөнөп ҡара! Бындай мәлдә иң ҡулайлыһы — йәшерәктәрҙе үҙ яғыңа ауҙарыу. Уларҙан үҙең теләгәнде һөйләтә алһаң, ҡарт та йыраҡ бара алмаҫ. Заманы уның инде үткән — бына шуны ла был алашаға аңларға күптән ваҡыт.

Аталарына оҡшап һерерәк, текәрәк булырҙар тип уйлаһа ла — яңылышҡан икән. Бәхеткә күрә, Йыһангир ҙә, Рәхимйән дә алсаҡ һәм күңелсәк кенә инеләр. Ярҙамға мохтаж ҡусты ҡиәфәте уларҙың күңеленә бик хуш килде. Күрәһең, үҙҙәренсә, Сәлимә һеңлеләренең рухы алдында бурыслы булып ҡалмау тип ҡабул иттеләр. Һәр хәлдә, Рәзимдең ағай тип өҙөлөп тороуы уларҙың икеһенә лә оҡшаны. Әле бына Йыһангир эргәһенә тиктомалдан ғына килмәне Рәзим. Инде хәрәкәт итә башларға ваҡыт еткәйне.

— Ағай, һиңә әйтәһе һүҙем бар ине. — Рәзим Йыһангирҙең ҡаршыһына йәтешләберәк ултырҙы. Үҙе табын хәстәрләү менән мәшғүл Зөһрәгә ғәйепле ҡараш ташлап алды. Тырышлығы бушҡа китмәне — Зөһрә лә ҡәйнешен хәстәрлекле йылмайыу менән бүләкләне.

— Тыңлайым, ҡустым.

— Нисегерәк башларға икән... Ҡыҫҡаһы, шул, Йыһангир ағай, миңә һеҙҙең эшҡыуарлыҡ бик оҡшай. — Рәзим йылп иттереп ағаһына текләп алды. Маҡтау һәм йылы һүҙ кемгә лә килешә — Йыһангирҙең йөҙөндә киң йылмайыу йәйелде. Шулай ҙа ул тиктомалдан ИРЕП төшмәне, уйынсалабыраҡ яуап ҡайтарҙы.

— Бәлки, "эшҡыуар" тигән һүҙелер, ә, ҡустым? Яңғырап тора бит. Күптәр уның тәүге өлөшөнә иғтибар итеп тә тормай. Эшҡыуар тиһәң, байлығын ҡайҙа ҡуйырға

белмәй, донъя артынан ҡыуыусы тип уйлай. Ә бына шул һүҙҙе ауыҙ тултырып әйтер өсөн, ай-һай, ҡустым, күпме елкә сейләндерергә кәрәк!

— Мин дә шулай уйлайым шул, ағай, — тип уны йөпләргә ашыҡты Рәзим. — Шуға һеҙгә берәй нисек файҙам теймәҫме икән тигәйнем дә...

— Һин? — Йыһангирҙең аптырауҙан бер ҡашы өҫкәрәк сөйөлдө.

— Әле бына Стәрлетамаҡта мин уҡыған станоктар төҙөү техникумының ауыл хужалығына бер ниндәй ҡыҫылышы юҡ. Шуға, мин уйлағайным... — Рәзим туҡтабыраҡ ҡалды, әйтәһе һүҙен нисегерәк үтемле итеп еткереү яйлы булыр икән тип эстән генә фекер төйнәне.

— Йә, йә!

— Шуға, мин әйтәм... әллә һеҙҙең эшмәкәрлеккә файҙа килтерерлек берәй уҡыу йортона күсергәме икән тигәйнем дә... Мәҫәлән, Өфө тирәһенә... Ағайҙар өсөн файҙалы һөнәр алаһым килә.

Быңдай һүҙҙе һис тә көтмәгән Йыһангир хатта ашауынан туҡтаны, үҙе йылп итеп Зөһрә яғына күҙ ташланы. Ҡатыны ла сәй яһауынан туҡтап, ҡәйнешенә төбәлгән. Ир менән ҡатын бер-береһенә ҡарашып алды. Йыһангир ҡулдарын ыуғылап хатта урынынан тороп уҡ китте.

— Һай, маладис, ҡустым! Һис тә көтмәгәйнем! — Ҡыуанысынан күҙҙәре баҙлап киткән ир уҙаманы бер аҙҙан хатта Рәзимде килеп яурындарынан ҡаҡҡыланы. — Ана бит ул, үҙебеҙҙең тоҡом шул! Ят ярлыҡамаҫ, үҙеңде ҡотҡармаҫ, тиһәләр ҙә, тағы кемдән ишетер инем ошо һүҙҙәрҙе, ә, Зөһрә?

Ҡатыны илгәҙәк йылмайып ҡәйнешенә ҡараны.

— Һин ҡустыңды баһалап еткермәгәнһең, ахыры, Йыһангир.

Туғанының тәҡдименә ифрат шатланған Йыһангир эште оҙон-оҙаҡҡа һуҙып тормаҫҡа булды. Иртәгәһенә үк Стәрлетамаҡҡа юлға сығырға хәл иттеләр. Ләкин бына әҙерләнеп бөткәс кенә, Рәзим кинәт сирләп китте.

— Ағай, ғәфү ит инде, — тип ғәйепле ҡиәфәттә Йыһангиргә ҡараны Рәзим. — Эште бер башлағас, хәл итергә ине лә... Уф... эсем... бәләкәй саҡта ҡартәсәй бикләп киткәндә ҡайһы ваҡытта аҙыҡ ҡалдырырға онота ине... Гел юлда булды бит... һатыу эше менән йөрөгәс... Шунан ҡалған гастрит инде...

— Әллә икенсе аҙнаға ҡалдырайыҡмы? — Йыһангир икеләнде.

— Үҙең сәсеү башланғансы тинең бит.

— Уныһы шулай ҙа... Хәҙер был килеш нисек юлға сығаһың?

Рәзим бөгәрләнеп кенә диванға барып ятты, шунан бер аҙҙан өмөтлө ҡарашын ағаһына төбәне.

— Ағай... әллә... уф... үҙең генә барып ҡайтаһыңмы? Оҙаҡҡа һуҙһаҡ, йә тағы берәй әкәмәте килеп сығыр.

Йыһангир икеләнде.

— Әллә тағы... Миңә бирерҙәрме икән һуң?

Ағаһының ыңғайға килә башлауын күргән Рәзимдең күҙендә ҡыуаныс осҡондары сағыла биреп ҡалды.

— Ҡағыҙ яҙырмын. Унан... бындағы фельдшерлыҡ пунктынан справка ла алһаҡ... Аҡса төртһәң, хатта уларының да кәрәге теймәҫ әле.

— Ысынлап та. — Ҡустыһының хәле насарайыуында үҙен ниңәлер ғәйепле һымаҡ тойоп ултырған Йыһангир йәнләнде. — Шулайтайыҡ, ҡустым. Бер ыңғайҙан Өфөгә барып та белешеп ҡайтайым. Барыбер алыҫ ҡалмай бит. Тегендә-бында әйләнгән һайын машина ҡыуғансы. Унан яҙғы эштәр башланһа, юл йөрөү ҡайғыһы ҡалмаҫ. — Йыһангир урынынан ҡалҡынды. — Өфөлә, тим, ҡустым, ниндәйерәк уҡыу йорто ҡыҙыҡһындыра һуң һине? Уныһына, кәнишне, бергәләберәк барғанда арыу булыр ине лә һымаҡ. Һиңә бит уҡырға.

— Ҡайҙа алырға ризалар бит әле. — Рәзим йәнә ыңғырашты.

— Уныһы шулай. Әллә ошо курсыңды Стәрлетамаҡта тамамлайһыңмы?

— Һуҙаһым килмәй, ағай. Унда ла мин аптырағандан ғына барып ингәйнем. Үҙегеҙ беләһегеҙ, атайыма кәрәкмәнем. Ҡарттай менән ҡартәсәйгә лә. Күңелгә ятмаған һөнәргә уҡып ваҡыт әрәм итеү булмаймы ни был?

— Дөрөҫтө һөйләйһең, ҡустым. — Йыһангир быны менән тиҙ килеште. — Ярай, хәл иттек. Үҙем барып алам документтарыңды. Өфөгә күсеү шарты менән, әлбиттә. Ыңғайға килерҙәй булмаһалар, уйлашырбыҙ. Хәл итмәҫтәй мәсьәләләр булмай был донъяла. Уҡыу йорто тигәндән, Өфөлә йөрөп сығырмын. Бик булмаһа, шылтыратып та кәңәшләшербеҙ.

— Булды, ағай! — Рәзим ҡыуанып йылмайҙы.

Ҡустыһының күңеле күтәрелеүенә ҡәнәғәт ҡалған Йыһангир ишеккә йүнәлде.

— Иҫән-имен генә йөрөп ҡайт, балам. — Рәхилә оло улын оҙатып, болдорға сыҡты. Рәзим бөгәрләнеп кенә диванда ятып ҡалды.

Аш бүлмәһе яғынан ҡулына һыулы стакан тотҡан Лира күренде. Иплә кенә баҫып диван эргәһенә яҡынлаша биргәс, ҡатынҡай икеләнгәндәй итеп, бер мәлгә туҡтап ҡалды. Рәзимдең күҙҙәре йомоҡ ине.

— Ҡәйнеш... Ҡәйнеш, тим!

Егет өндәшмәй ята бирҙе.

— Рәзим! Әллә хәлең бөтөнләй насарландымы?

Ыңғырашҡан сибек кенә ауаз ишетелде. Баҫып килгән күҙ ҡабаҡтарын көс-хәл менән яҙып, Рәзим әкрен генә күҙҙәрен асты. Уның ҡараштарындағы һыҙланыу ғазабын күргән Лирала был һөйкөмлө йәш кенә егетте әсәләрсә ҡурсалау һәм йыуатыу теләге уянды.

Әлеге мәлдә Рәзимдең башынан мең төрлө уйҙар арҡыс-торҡос йүгерешә ине. Шәп килеп сыҡты был гастрит тарихы менән! Тфү, тфү, ысынлап әләгә күрмәһен, әйттем — бөттө... Хәҙер аумаҡай ағай ишараты үҙен илаулап оҙатып ҡалған ҡарсыҡтың күҙҙәрендә күҙ йәштәрен ҡабат күрмәҫ өсөн, барыһын да эшләйәсәк. Стәрлетамаҡҡа башҡаса барып йөрөргә йыйынмай ине Рәзим. Ғүмере ике түгел дә баһа.

Ана шул оло баш аумаҡай әйҙә уны имен-аман ғына күсерһен шунда Өфө тирәһенә. Ҡеҫәһенән байлығын сығарып һалһа ла — йәлме ни? Рәзим тапҡан мал түгел әле.Үҙенә хеҙмәтсе уҡытып алырға уйлай инде, байғош. Әйҙә, өмөтләнә бирһен. Ҡем хеҙмәтсе лә кем хужа — ҡарап ҡарарбыҙ...

Шуға ла Рәзим Йыһангир юлға сығып, бер ярты сәғәттәй ваҡыт үткәс, ыңғыраша-ыңғыраша булһа ла тороп ултырырға иҫәп тотоп ята ине. Мәгәр бынау елбәҙәк күбәләктең дә шул уҡ ҡармаҡҡа ҡабырын һис тә көтмәй ине ул. Ҡиәфәте, күрәһең, ысынлап та, үтә йәлләткес булғандыр. Ана бит, хатта мышҡылдатып танауын да тартып ҡуйҙы. Рәзим эргәһендә ултырған һылыу бисәне кинәт ҡосаҡлап үбеп алырға уҡталыбыраҡ ҡуйғайны ла, кире уйланы. Утҡа осҡан күбәләк ише үҙе инеп килә икән — күҙ күрер. Ә әлегә...

— Һеҙ бик сибәрһегеҙ, Лира... еңгә.

Лираның йөҙөнә еңелсә ҡыҙыллыҡ һибелде. Ҡәйнешенең маңлайындағы ҡулын йәһәт кенә ситкә алды, шулай ҙа ситкә янтайманы, сүкәйеберәк ултырған урынында ҡала бирҙе.

— Ысынлап әйтәм. Һеҙҙең кеүек алиһә һымаҡ һылыуҙы ғүмерҙә лә осратҡаным юҡ ине.

— Был хаҡта миңә... йыш әйтәләр, — тине Лира, тотлоға биреберәк.

— Бөтә ошо йорт... юҡ, барса ауыл һеҙҙе ҡулдарында ғына күтәреп йөрөтөргә тейеш тә бит. Һеҙ ошо кешеләрҙе үҙегеҙҙең был донъяла булыуығыҙ менән генә лә бәхетле итәһегеҙ.

— Рәзим... Һеҙ бигерәк... — Лира ситкәрәк тайпылды.

Ә күңеленә шул тиклем рәхәт ине. Йәш егеттең матур һүҙҙәре йөрәгенә һары майҙай яғылды.

— Илсура ағай урынында мин һеҙҙе күтәреп кенә йөрөтөр инем... Эйе, күтәреп кенә йөрөтөр инем... Һеҙ бит ус төбөндә ҡәҙерләп йөрөтөр өсөн генә яратылғанһығыҙ... Илсура ағайым ниңә шуны аңламай икән? Подиумдарҙа балҡыу өсөн тыуғанһығыҙ бит. Ә һеҙҙе ана шул аш бүлмәһенә бикләгәндәр... Һеҙҙең бейеклекме ни ул? — Ҡатындың күңелендә ҡайнаған ҡойон-дауылды әллә ниндәй етенсе бер тойғо менән һиҙеп алған Рәзим күҙҙәрен түшәмгә төбәгән килеш уйсан ғына дауам итте. — Гүзәллек ул алтынға бәрәбәр байлыҡ. Ана шул байлыҡты хеҙмәтсе урынына тотҡандарына йәнем әсей. Байтаҡтан күҙәтеп йөрөйөм мин, Лира. Тәүге күргән көндә хатта хайран ҡалғайным... Һеҙҙең өсөн шәхси хеҙмәтсе яллаһалар ҙа, ҡулдарынан да, хәлдәренән дә килә бит инде... Ҡайҙа, күрһәтегеҙ әле ҡулдарығыҙҙы... — Лира тыңлаусан рәүештә уға ҡулдарын һуҙҙы. — Ана бит... Шулайҙыр тип уйлағайным да... Гелән табаҡ-һауыт йыуып, тупаҫланып бөткәндәр... Маникюр тигән нәмәнең инде эҙе лә ҡалмаған. — Егеттең һүҙҙәренән уңайһыҙлана төшкән Лира ҡулдарын тартып алмаҡ булғайны, Рәзим ебәрмәне. Ҙур устарында ҡатындың аҡ ҡына кескәй ҡулдарын йомоп, әкрен генә уларҙы һыйпаны. Үҙен йәлләгәнгә күңеле булған, бигерәк тә нисәмә йылдар йәнен һыҙландырған дөрөҫлөктө ҡапыл асып биргән егеткә ҡарата йылы хис уянған ҡатын ҡарышманы.

Рәзим дивандан бер аҙ ҡалҡына биргән, уңайһыҙланыуҙан биттәре алланып торған, күптән танһыҡлаған матур һүҙҙәр ишетеүҙән йөрәге дөпөлдәгән йәш ҡатындың һәр бер хәрәкәтен, һәр ағзаһын йоторҙай булып ҡапшай, рентген нуры аша үткәргәндәй итеп тикшерә. Ошо буйһондороусан ҡарашҡа бирешеп, Лира хәлһеҙләнә барғанын тойҙо. Башы әкрен генә егеттең яурынына һалынды.

Шул мәлдә ҡатын ҡапыл иҫенә килде. Рәзимдең эҫе тыны уның ҡолаҡ остарын көйҙөрөп үтте. Тағы бер генә минут — һәм араларындағы сик емереләсәк. Барыһы ла инде икенсе төҫ аласаҡ. Ә был кәрәкме? Кемгә был кәрәк? Лира кинәт урынынан һикереп торҙо һәм, биттәрен ике ҡулы менән ҡаплап, аш бүлмәһенә йүгерҙе.

Лираның күңеле бөтөнләй урынынан ҡупҡайны. Күҙ алдынан артабан булыуы бик тә мөмкин хәл-ваҡиғалар теҙмәһе бер-бер артлы теҙелеп үтте. Ғәжәп, тәүге мәлдәге ҡыйынһыныу, уңайһыҙланыу тойғоһо ла хәҙер инде ул тиклем яфаламаған һымаҡ. Бәй, ул тиклем ниндәй яманат ҡылды һуң әле? Ҡәйнеше сирләп китте. Лира уға дарыу илтте. Рәзим уның сибәрлеге менән һоҡланыуын белдерҙе. Бары шул ғына. Ябайыраҡ итеп ҡарарға кәрәк барыһына ла. Һәр нәмәне ҙурға олғаштыра башлаһаң, аҡылдан яҙмаҡ кәрәк тә баһа! Һыйыр тиҙәге араһында — бигерәк тә!

Ҡәйнешенең ҡарашында үҙе өйрәнгән һоҡланыуҙы түгел, ә йондоҙға ҡараған кеүек табыныуҙы күрҙе Лира. Бына нимә етмәгән икән уға ошо ҡараңғы төбәктә! Ҡара һин уны, бәхет өсөн әллә ни күп тә кәрәкмәй икән дә баһа! Лираға хатта был төпкөл ауыл да матур булып тойола башланы.

* * *

Аҙна-ун көн буйы ауыл халҡы яңыраҡ ҡына йөрәк сиренән үлеп ҡалған Сәлимәнең икенсе улының ҡапыл пәйҙә булыуын тикшереп бер булды. Әле лә бына Зәмзәгөл магазиндан сығыуға уны Мәхмүзә көтөп тора ине. Алаһы әйберен байтаҡтан алып сыҡһа ла, тағы берәй хәбәр ишетмәмме тип аҙапланыуылыр инде. Бер урамда тороп, күршерәк йәшәһәләр ҙә, ауылсаларға ятаҡҡан был ҡатынға артығын ысҡындырмаҫҡа тырыша ине Зәмзәгөл. Сөнки был хәбәр, ҡырҡҡа үҙгәреп, шул көндө үк Иҫәнсураның икенсе осонда танымаҫлыҡ хәлгә киләсәк.

— Ҡайнағанды әйтәм, әллә ҡоҙаларығыҙға киттеме? — тип төпсөндө Мәхмүзә.

— Юҡ, Мәхмүзә апай. Стәрлетамаҡҡа эш буйынса киткәйне, — тип яуапланы Зәмзәгөл.

— Шулайҙыр шул, — тип килеште Мәхмүзә, ләкин икенсе минутта уҡ үҙенең шикләнергә лә хоҡуғы барлығын күрһәтергә ашыҡты. — Ҡитер алдынан теге малай менән ыуараланып бик йөрөнөләр инде әйтәгүр. Медпунктҡа килеп, Сара килендән справка ла алғандар, ахыры.

— Әлләсе, униһы миңә билдәле түгел, — тип был төпсөнөүҙән ситкә китергә аҙапланды килен кеше.

— Мин әйтәм, Зәмзәгөл килен... әллә тим... ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарығыҙ менән берәр төрлө алыш-биреш итергә аҙапланаһығыҙмы? Ҡоҙағыйығыҙ бит һатыу эшендә яман байыған тип һөйләйҙәр ине... Әллә нисә универмагы бар, тиме, үҙенең. Был бала унда ла һыймағандыр инде. Етем йораты кемгә кәрәк... Әсәһенә лә бит... ана, кәрәкмәгән.

Зөһрә менән шыш-быш килгәндәрендә үҙе лә Сәлимә бикәсен шуға яҡынырак һүҙҙәр менән битәрләһә лә, быны сит кешенән ишетеүе бигерәк тә ауыр икән. Бәғерен телгеләгән аяуһыҙ һүҙҙәрҙән янтайғандай, Зәмзәгөл ҡайтаһы юлына ыңғайланы. Ләкин Мәхмүзә анһат ҡына бирешергә теләмәне.

— Ярар, униһы минең эш түгел. Үткәндә Стәрлегә барғанда күргәйнем мин ул бисәне. Баҙарҙа ҡыйҡыулап ларегында һатынып тора ине. Улай уҡ әллә нисә универмагы булған кешегә оҡшамаған да бит. Теге налугынан ҡотолоу өсөн генә ҡыланмаһа инде. Әле һеҙҙә йөрөгән малайҙың атаһының исемендә уның төп байлығы, ти.

— Ә һин уны ҡайҙан беләһең, Мәхмүзә апай? — тип аптыраны Зәмзәгөл.

— Мин дә белмәгәс инде... Эстәрле тулы ызнакум минең. Фәһим етемде лә... әлеге һеҙҙә йөрөгән малай менән икеһен тим... шуға бит бүлгеләгәндәр. Һеҙҙекеләр мал-тыуар бирмәҫ өсөн ҡырталашып, әлеге малайҙы тотторол ебәрһә... тегеләр ни... әлеге шул һатыныуҙан килгән малдан ҡолаҡ ҡаҡмаҫ өсөн аҙапланғандыр инде. Ауылда ятҡас та, Мәхмүзә апайыңды төптө наҙан тип уйлайһыңмы әллә...

Зәмзәгөл йәне үртәлеп аҙымдарын ҡыҙыулатты. Ҡайҙан тап булды был Мәхмүзәһе?! Мунса япрағылай йәбеште бит, ысҡынырға уйламай ҙа. Ләкин "мунса япрағы" төп һүҙенә яҡынлағайны ғына. Күршеһенең ҡиәфәте үҙгәреүенән тәм тапҡандай, хәбәрен артабан сурытты.

— Мин әйтәм... ай-һай, Йыһангир был баланы эйәртеп тигенгә йөрөмәйҙер... бер-бер уйы барҙыр башында... Был малай менән берегеп... бер төптән булып... Рәхимйәненде лә төп башына ултыртып китерҙәр әле. Йә әйтәм, ул етемәк тә гелән шул Зөһрә эргәһендә урала. Бер ҙә һиңә килеп сәй эсеп ултырғанын күргәнем юҡ әйтәгүр...

— Һуң, улар яҡын бит. Ҡаршыларында ғына йәшәйҙәр ҙә һә.

— Булһа һуң! — тип бот сапты Мәхмүзә, ҡулында өҫтөрәп килгән хужалыҡ сумкаһының эсенән тейәгән аҙыҡ-түлеген саҡ ауҙармай. — Ҡаф тауының арьяғындаһығыҙмы ни?! Ул урамға ни мин уны көнөнә биште барып урайым. Ҡайсаҡ юрамал эргәләренән үтәм. Юҡ, теге малай күҙенә керерҙәй булып әлеге шул Йыһангир эргәһендә урала. Йә килендәшеңдең эргәһендә сәй эсеп ултыра. Һиңә бер ҙә бит тамаҡ ялғарға тип килмәй.

— Етер, Мәхмүзә апай. Әҙерәк сама белергә кәрәк. Кемдең ҡайҙа сәй эскәнен ҡарап йөрөмәһәң, башҡа эшең юҡмы ни?

— Аһ-аһ, кеше уға яҡшылыҡ теләп, күҙ-ҡолаҡ булырға ҡуша. Ә ул, рәхмәт әйтәһе урынға, эт шикелле абалап тора! Йә әйтәм, шуға йортто ла ҡайның ҡартынан алыҫыраҡ һалғанһығыҙ. Тәйән инеп, ялҡытып йөрөмәһендәр, тигәнһегеҙҙер инде! — Мәхмүзә үҙенсә таснатып, сәсрәткәнсе дөрөҫлөктө әйтте лә, тырт-бырт атлап китеп тә барҙы.

Был тиклем хаяһыҙлыҡтан шаңҡый төшкән Зәмзәгөл йорттарының алдындағы матурлап эшләнгән эскәмйәгә сумкаһын ҡуйып, туҡтап ҡалды.

Мәхмүзәнең әлеге тупһыҙлығы инде хаттин ашҡайны. Зәмзәгөл, үҙенә үҙе йәне көйөп, ҡырылған кәйефенең асыуын кемдән алырға белмәй, дөбөр-шатыр килеп өйөнөң эсенә үтте, һатып алған әйберҙәрен нисек етте шулай бушатты ла ҡулын сайҡап эш бүлмәһенә үтте.

Фермерлыҡ хужалығының дебет-кредит балансын ул һәр көн төшкә тиклем тикшереп ҡуйырға ғәҙәтләнгән. Ҡайнағаһы индергән тәртип был. Рәхимйән ағаһынан "тарихсы" тип көләргә яратһа ла, был яҡтан Йыһангир етәксе булараҡ бик тә булдыҡлы ине. Бәғзе берҙә бухгалтер башы менән Зәмзәгөл буталып киткән һандарҙы ла тиҙ төшөнә. Күҙ һирпеп кенә ҡарап ала ла ҡабаттан тикшереүен һорай. Ҡилешеп эшләгәс, әлегәсә аңлашылмаусанлыҡтарҙың сыҡҡаны юҡ.

Зәмзәгөл компьютерын ҡабыҙҙы. Программа асылғансы тип, эш өҫтәлендә тегендә-бында һибелгән ҡағыҙҙарҙы йыйыштырҙы. Уй-фекерҙәрен тупларға тырышһа ла, күңеленән Мәхмүзәнең әйткән һүҙҙәре китмәй ыҙалата ине. Йәнәһе лә, ҡайнағаһы уларҙан йәшереп кенә элекке ҡоҙалары менән ниҙер әүеш-тәүеш итергә аҙаплана. Ә бынан һуң Йыһангиргә ниндәй файҙа? Үҙ туғанын намыҫ бүлешкәндә йоҡлап ҡалған алыпһатарҙарға алыштырырға йүләрме ни ул?

Мониторҙағы сыбар һандар бер аҙҙан уны үҙ ихтыярына буйһондорҙо. Иҫәпләүҙәренең осона бер аҙ сыҡҡас, компьютерын һүндерергә тип ынтылды ла кире уйланы. Бер ыңғай банктан үҙ иҫәптәренең торошон да тикшерергә кәрәк. Аҡса иҫәп ярата. Илтифатһыҙ ғына ҡарап ултырған Зәмзәгөл кинәт һиҫкәнде. Үҙ күҙҙәренә ышанмайынса, ҡабат-ҡабат уҡыны. Юҡ, аңлашылмай ине. Бөгөн генә улар иҫәбенән ҙур сумма аҡса алғандар! Йөҙ илле мең һум! Был бит бөтә булған запас! Ҡалғандары барыһы ла әйләнештә йөрөй!

Шаңҡып бер аҙ ултырғандан һуң, Зәмзәгөл йәнә экранға төбәлде. Юҡ, күҙҙәре алдамай ине. Бынан ике сәғәт элек кенә алғандар. Кем булырға мөмкин? Рәхимйән бит ауылда йөрөй, тракторҙары тирәһендә урала. Йыһангир! Әлбиттә, ул! Ә ниңә уларға бер нәмә лә әйтмәгән? Энеһенең дә, килененең дә был хаҡта белергә хаҡы юҡмы ни? Һәр осраҡта ла кәңәшләшеп эшләй торғайнылар бит. Иҫен бер аҙ йыя биргәс, Зәмзәгөл кеҫә телефонын эҙләй башланы. Ҡыуанысҡа күрә, телефонын табыу менән Рәхимйәндең номерына баҫҡайны, шундуҡ тиерлек таныш тауыш ишетелде.

— Йә, нимә булды тағы?

— Һин ҡасан ҡайтаһың?

— Әле генә түгел... Төшкәрәк.

— Тиҙ генә ҡайт әле. Әйтәһе һүҙем бар.

— Ул һүҙең, нимә, төшкә тиклем дә көтә алмаймы ни?

— Юҡ! Тиҙ бул!

Рәхимйәндең эштән бүлдергәне өсөн асыуланыбыраҡ ҡайтып инерен самалап, Зәмзәгөл тағы ла үҙҙәренең банк иҫәбенә инде, кәрәкле биттең күсермәһен принтерға баҫырға ебәрҙе, унан компьютерын һүндереп үк ҡуйҙы. Геүелдәп ултырыуы өҫтөнә, кинәт борсолоп киткәнгә күрә, йөрәге һуға, сикәһендәге ҡан тамырҙары тынысһыҙлай — әлеге мәлдә иһә уға тыныслыҡ кәрәк ине.

Ғаилә бизнесының үҙ этнәкәләре бар. Күп нәмә бында үҙ-ара ышанысҡа ҡоролған. Әгәр ҙә инде ошо ышаныс ҡаҡшаһа — сыҙап ҡына тор! Аяҡ аҫтындағы ҡаты һәм хәүефһеҙ ер киҫәгеп умырып алыу менән бер ул. Әле бына уларҙың гөрләп эшләп торған хужалыҡтарының терәү-таяныстары һелкенә башлағайны. Әгәр ҙә был терәү тигән нәмәләре бөтөнләй үк серегән булһа? Нишләргә? Ул йөҙ илле меңде Тимурҙы уҡытырға индергәндә кәрәк булыр тип, ҡара көнгә һаҡлағайнылар бит. Йыһангир үҙе тәҡдим итте быны. Билдәле, Рәхимйән менән Зәмзәгөл шатланып ризалашты. Ошо мәлдә лә туғандарға таянмаһаң, нисек йәшәмәк кәрәк был донъяла? Әле килеп...

...Рәхимйәндең ҡәнәғәтһеҙлеге йөҙөнә сыҡҡайны. Машина майына буялып бөткән ҡулдарын сепрәк киҫәге менән һөрткөләй-һөрткөләй, эштән бүлдергән өсөн ризаһыҙлығын белдерергә ауыҙын ғына асҡайны, өлгөрмәне — иренең холҡон белеп бөткән Зәмзәгөл уның ҡулына бая баҫтырып алған ҡағыҙ битен тотторҙо.

— Ҡара әле ошо һанға!

— Нимә был?

— Банктағы беҙҙең иҫәп.

— Ә ул иҫәпкә ни булған?

— Айыу майы һөрткәндәр. Вәт бына нимә булған!

Рәхимйән сепрәген шундуҡ ситкә бырғытты, ҡулдарына һеңгән май тамсыларының аҡ ҡағыҙ битендә шыяланып ҡалыуына ла иғтибар итмәй, арты менән шунда торған табуретҡа терәлде. Йөҙө үҙгәргән иренең ҡыҙып китеү мөмкинлеген самалаған Зәмзәгөл йәһәтерәк төҙәтергә ашыҡты.

— Бәлки, яңылышлыҡтыр ҙа. Әлегә асыҡлап өлгөрмәнем.

Был ни бары бәреләһе урынға йомшаҡ нәмә ҡыҫтырып ҡуйырға ашығыу ғына ине. Шулай ҙа ярҙамы тейҙе, ахыры — Рәхимйән кинәт бәрелеп һуғылманы, ҡараңғыланған сырайын яҙмайынса ҡатынына төбәлде.

— Шулай ҙа... нисек уйлайһың? Кемдең эше был?

— Уйлайһы юҡ. Ҡайнаға бит Стәрлетамаҡта йөрөй. Банк иҫәбенә унан башҡа кем инһен?

— Ағайыма мин үҙемә ышанған кеүек ышанам, Зәмзәгөл. Шуға аптырағандан ғына әйтәм инде.

— Гелән кәңәш ҡороп эш итә торғайныҡ бит. Шунһы аптырата.

— Хәҙер ҡайтҡанын көтәбеҙ инде. Үҙе аңлатыр.

— Ҡайнағаны әйтәм... Ҡасан ҡайта һуң?

— Иртәгәнән дә ҡалмаҫҡа тейеш. — Ағаһы өсөн бисәһе алдында уңайһыҙланыу кисергән Рәхимйәндең тауышы йомшарғайны, үҙен ғәйепле тойған ҡиәфәттә табуретынан ҡалҡынды. — Ярай, тракторҙарҙы ремонтлап бөтәһе бар. Бер-ике сәғәттән ҡайтып урармын.

Сығып барған Рәхимйән ишекте япмаҫ борон, Зәмзәгөл кинәт иҫенә килгәндәй урынынан ҡалҡынды.

— Әй... онота яҙҙым... киске ашҡа ҡәйнешеңде лә саҡыр әле.

— Унһы нимәгә тағы? — Былай ҙа күңелһеҙ һөйләшеүҙән һуң кәйефе килделе-киттелерәк Рәхимйәндә өҫтәүенә ҡунаҡ та һыйлап ултырырлыҡ һис бер ниндәй теләк юҡ ине.

— Былай ғына... Ҡеше алдында уңайһыҙ була башланы. Гелән Зөһрә тирәһендә урала. Барыһы ла бит күҙ алдында. Әллә нәмә һөйләй башларҙар.

— Ярай, мәйелең. Өндәшермен.

Рәхимйән майлы ҡулдары менән кепкаһын батыра кейеп, урамға йүнәлде. Ишекте асҡан ыңғайы тотҡала һәм матурлап буялған ишек яңаҡтарында таптар ҡалыуына ла иғтибар итмәне. Ҡайһы берҙә иренең ошо әрпешлеге өсөн ҡубып сығырҙай булып туҙынған Зәмзәгөл өндәшмәне.

Ишек яңағындағы тап нимә генә ул! Һөртөп тә алыр — эҙе лә ҡалмаҫ. Ә бына күңелендә ҡалған тапты нисек бөтөрөргә? Нисек ҡотолорға уларҙан? Һорауы яуапһыҙ ҡалды.

* * *

Үҙенсә бер уй-фекер төйнәгәйне Зәмзәгөл. Рәзимде ул үҙҙәренә кеше һүҙенән шикләнгәнгә генә саҡырманы. Уның ҡәйнеше менән аулаҡлап һөйләшергә теләүенең сәбәбе башҡа ине. Ул да булһа — күршеһенән ишетә биреп ҡалған яңылыҡтарҙың дөрөҫлөккә тап килеү-килмәүен асыҡлау. Етмәһә, был егеттең

атаһының ҡулында ла ниндәйҙер магазиндар бар, ти бит. Мәхмүзәгә, әлбиттә, бигүк ышанырға ярамай. Ләкин ҡәйнеше үҙенеке әле.

Әммә ҡәйнеше һағайып ҡалғайны инде. Рәхимйәндең күңелсәк кенә йөрөгән еренән һөмһөрө ҡойолоп урап килеүенән үк Рәзим быларҙың түңәрәк донъяһының ҡайһылыр бер өлөшө кителә биреүен самаланы. Эстән хатта үсәй биреп тә ҡуйҙы. Шул кәрәк был байғураларға! Уны, Рәзимде, кеше тупһаһында көн күрергә мәжбүр итеп, сереп байырға иҫәп тотҡайнылар түгелме һуң әле? Хәрәм бер килеп төртөргә тейеш. Шулай уйланы егет. Ләкин был уйын тышҡа сығарманы, шул уҡ илгәҙәклек, илтифатлылыҡ менән Рәхимйән эргәһендә уралды, уның кәйефенең кинәт боҙолоу сәбәбен төшөнөргә тырышты. Тегеһе, кинәт ҡырыҫланып киткән һере нәмә, бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Тик бер-ике сәғәттән һуң ғына бер аҙ яҙыла биргәс, еңгәһенең уны киске ашҡа көтөп ҡалыуын еткерҙе. Ҡыҙыҡһыныуы оторо көсәйҙе Рәзимдең. Ағаһының йәмерәйеүе менән был тиктомалға саҡырып ятыу араһында ниндәйҙер бәйләнеш бар һымаҡ ине.

Бәйләнеш оҙаҡ көттөрмәне. Ҡаҙ һурпаһын ҙур бер тәрилкәгә мул итеп һалғандан һуң, уны ҡәйнешенә этәрә биреберәк, Зәмзәгөл үҙе һүҙ башланы. Рәхимйән, башҡа ваҡыттарҙа һүҙ һорап кеҫәгә кермәһә лә, өндәшмәй генә һурпа шөрпөлдәтеүен белә. Ҡайһылыр аттары абынған быларҙың... Мәгәр Рәзим шиген һиҙҙермәне, еңгәһен рәхмәтле ҡараш менән бүләкләп, уның ҡулынан үҙенә һонолған ҡалаҡты алырға ашыҡты.

— Эй, һурпағыҙҙың хуш еҫе! — тигән булып маҡтап та ебәрҙе.

Күңеле булған Зәмзәгөлдөң йөҙө саҡ ҡына яҙыла төштө.

— Һин шулай тиһең дә, ҡәйнеш, донъяның рәте китеп тора бит әле...

Рәхимйән бисәһе яғына асыулы ҡараш атты. Уның күҙендәге уҡтар, күрәһең, Зәмзәгөлдөң теленә үк эләккәйне. Сөнки хужабикә тәүҙә телен йотҡандай шымып ҡалды, унан бөтөнләй бәйләнеше булмаған икенсе һүҙгә күсте лә китте.

— Эй, ҡәйнеш, — тигән булды Зәмзәгөл кинәт мөләйемгә һәм илгәҙәккә әйләнеп. — Һинең менән йәш ҡыҙҙар ҡыҙыҡһына башланы бит, әйкәйем!

— Кемдәр ул? — Рәзимдең күҙҙәре ялтырап китте.

— Ана, ана, ҡарашың теремекләнде лә. Әтеү ни, сирләйем тигән булып, бөгәрләнәһең дә ятаһың. Йәш кешегә улай килешәме ни ул? Үҙеңде ҡыҙ-ҡырҡын бөтөнләй яратмаҫ бит, — тип шелтәләне Зәмзәгөл.

— Эй, еңгәкәйем, һинең был һүҙҙәрең үҙе үк йәнгә дауа бит. Башҡа сирләргә лә йөрәк етмәҫтер. Үҙең бит ҡыҙҙар ҡарамаҫ тип ҡурҡытаһың. — Рәзим аш ашаған арала Зәмзәгөлгә күҙ ҡыҫып алды. Ниҙер әйтергә теле ҡысып ултыра был түтәйҙең, әммә иренән шөрләңкерәй. Нисек белергә быны? — Тик бына ағайымдың ғына кәйефе юғыраҡ. Әллә бер-бер хәл булдымы?

— Юҡсы, — тигән булды Зәмзәгөл, ҡырын-мырын ғына Рәхимйәнгә күҙ һирпеп. — Беҙҙең урамда бер Мәхмүзә тигән ҡатын йәшәй...

— Ә-ә, теге әйләнгән һайын урамды биш ураған ҡатынды әйтәһеңме, еңгә?

— Шулдыр инде, башҡа кем йөрөһөн... Ана шул ҡатын, ҡәйнеш, һинең ҡартәсәңде лә беләм, тип ысҡындырҙы әле.

Рәзимдең йөрәге "жыу" итеп китте. Әгәр ҙә... кемдер уның ҡартәсәһен белә икән... тимәк... беҙ бит ҡапсыҡта ятмай. Унан инде...

— Ҡайҙан белә ул уны? — Рәзим сәйнәгән икмәген йоторға ла, йотмаҫҡа ла белмәгәндәй албырғап ҡалды.

Ҡәйнешенең йөҙө үҙгәреүен Зәмзәгөл үҙенсә аңланы. Әҙәмсә балалыҡ та күрһәтмәгән кешеләрҙе хәтерләүе анһат түгелдер инде, тип уйланы ул.

— Былай ғына, — тип төҙәтергә ашыҡты хужабикә тупһыҙ хәбәрен. — Баҙарҙа һатынып торғанынан ғына сырамытҡан шикелле.

— Ә-ә, — тип ҡуйҙы Рәзим, сәйнәүен һүлпән генә артабан дауам итеп.

— Ә бына... — Зәмзәгөл ошо мәлде ысҡындырһа, ҡабат башлауы ауыр буласағын ҡапыл ғына аңлағайны, — Йыһангир ағайың һинең ҡартәсәңдең ҡайҙа йәшәгәнен беләме һуң?

— Нимәгә ул?

— Стәрлетамаҡҡа юл тотҡас, адрес-фәләнен һораманымы һуң ҡартәсәңдең?

— Әлләсе. Ундай һүҙ булманы.

Зәмзәгөл еңел тын алып ҡуйҙы, шулай ҙа төпсөнөүен дауам итте.

— Ә атайың, тим... Марсель ине бит әле исеме... ҡайҙа һуң хәҙер?

— Белмәйем. Уны минең күптән күргәнем юҡ.

— Ә теге... һатыу ларектары... уның исемендәгеләре...

— Еңгә, был хаҡта мин бер нәмә лә белмәйем. — Рәзимдең тауышында ҡырысलыҡ һиҙелде.

Тикшереү шуның менән тамам ине. Сөнки егет инде был хаҡта башҡа бер ни ҙә әйтмәйәсәк. Бына шуны аңланы Зәмзәгөл. Үҙ-үҙенә йәне лә көйөп ҡуйҙы. Күҙгә-күҙ генә сәй эсергә саҡырған булып, бөтә уй-фараздарын әкренләп һурып алаһы урынға турһайып ултырған кәйефһеҙ ире ҡаршыһында мәғәнәһеҙ тәфтиш ойоштороп ултыр әле. Тфү! Йылан аяғы киҫкән еңгә лә була белмәне! Зәмзәгөл өндәшмәй генә сәй яһай башланы.

Ә Рәзим инде эштең ҡайһы йүнәлештәрәк барыуын самаларға өлгөргәйне. Быларҙың Йыһангир менән борсаҡтары бешмәй башлаған! Һәм был Стәрлетамаҡ менән бәйле. Әлеге еңгә ишаратының унан төпсөнөп маташыуы ла, ағаһының тупайып ултырыуының да сәбәбе — тап ошо! Ә ниңә, уға йүнәлтелгән уҡты үҙҙәренә үк кире борғанда? Әйҙә талашһындар! Болғансыҡ һыуҙа балыҡ тотоуы ҡалай ҙа йәтеш ул! Ҡеҫкәй генә күләүектә ҡупҡан низағта табыштың ниндәйерәктәре эләгә әле!

— Рәхимйән ағайымдың кәйефе ниңәлер юҡ бит әле, — тип ағаһына ҡараны Рәзим, еңгәһенең ҡулынан сынаяҡ алып.

— Ағайың арыған, — тип хәйләләшеп маташты Зәмзәгөл.

— Һи, уның йәшендә ниндәй арыу ул тағы, — тип элеп алды Рәзим юрый көр тауыш менән. — Самый генерал була торған ваҡыты. Ҡырҡ йәш ул — эште ҡырып һала торған ваҡыт. Ил президенттарының да иң шәп ваҡыты — ҡырҡтың өҫтөндә булған мәлдәре. Шуға, мин әйтәм, Рәхимйән ағайымдың самый үҙ эшен башлап ебәрә торған ваҡыты. Ағайҙарҙың күләгәһендә оҙаҡ йөрөү файҙаға түгел инде ул. Үжәтлек баҫа башлай ул саҡта.

Рәхимйәндең күҙҙәре кинәт теремекләнде. Үҙе күптән уйлап йөрөгән был фекерҙе әле малайлыҡтан саҡ сығып килгән ҡустыһының әйтеүенә хатта оялғандай ҙа итте. Уның Йыһангирҙең итәгенә йәбешеп йөрөүен, тимәк, бар мир белә! Эстән генә мыҫҡыллап көлөп тә йөрөйҙәрҙер әле. Иренең ҡарашындағы мәғәнәне бик яҡшы аңлаған Зәмзәгөлдөң эсендә ниҙер өҙөлгән һымаҡ булды. Рәхимйән күберәк тышҡы ялтырауығын ғына күрә шул ул. Ә бына һандар, һалымдар, түләүҙәр менән күберәген Зәмзәгөл һәм Йыһангир булаша. Шуға күрә лә Зәмзәгөл хәбәр ҙурға олғашмаҫ элек тип, уны түңәрәкләп ҡуйырға ашыҡты.

— Һин, ҡәйнеш, юҡҡа өйрәтеп ултырма ағайыңды. Былай ҙа үҙ эштәрен асҡандар бит инде, тағы ни кәрәк? Ағаһы менән бына тигән итеп эшләйҙәр. Ҡемеһенең баш та кемеһенең ярҙамсы булыуы бында ниндәй әһәмиәткә эйә? Үҙ туғаны әле.

Рәхимйән кинәт асыуланды ла китте.

— Ә һин, бисә, шым ғына ултыр! Һиңә һөйләргә һүҙ бирмәгәндәр. Ана табаҡһауыттарыңды йый, эшең шул. Йүнле бухгалтер булһаң, ул йөҙ илле меңеңдең ҡайҙа булғанын белер инең. Ә ултыраһың аҡыллы бисәләй булып аҡыл һатып!

Зәмзәгөл ҡаршы өндәшмәне. Үпкәләгәйне ул иренә, ысынлап тороп үпкәләгәйне. Ҡара һин уны, хәҙер инде кәмһетә лә башланы. Ни хаҡы бар уның? Зәмзәгөл көндө төнгә ялғап, ире тип, балалары тип туҡтауһыҙ йүгерекләмәйме лә бөтә булған көсөн сарыф итмәйме? Ҡустыһы булған хәлдә лә, кеше алдында кәмһетергә хоҡуғы бармы? Элегерәк һүҙгә килешһәләр ҙә, былай уҡ түбәнһетеүгә тиклем төшөп етмәгән Рәхимйән тәүҙә үҙе лә аҙап ҡалды, унан Рәзимдең ҡыҙыҡһыныусан күҙҙәрен күргәс, сер бирмәҫкә булды.

— Ирҙәр һүҙенә ҡыҫылып ултырғансы, ана ҡашығаяғыңды йыу, — тип тә өҫтәне.

Зәмзәгөлдөң түҙемлеге шартланы.

— Табаҡ-һауытын йыуыр булһам, һинән һорамам, — тип туҙынып китте. — Эш башларға йыйына берәү! Тәүҙә кешеләр менән әҙәмсә һөйләшергә өйрән. Гелән ҡайнаға менән мин яйлағанға ғына һәүетемсә китеп ултыра барыһы ла. Һин тәүге ығы-зығыла уҡ барыһы менән дә дошманлашып бөтөр инең. Аҡылың булһа, донъя күрмәгән ҡустыңды тыңлап ултырғансы, тәүҙә ағайың менән кәңәшләшер инең.

— Ҡайнағам да ҡайнағам, имеш! Тәүҙә урлаған аҡсаларын кире ҡайтарһын!

— Бурҙарға енәйәтселек донъяһында иң ҙур яза бирелә. Үлем хөкөмөнә тиклем, — тип һүҙ ҡыҫтырҙы Рәзим эскерһеҙ һәм бер ҡатлы ҡараш менән.

— Ана шул-шул! Ә мин ул йөҙ илле мең өсөн күпме елкә сейләндергән! Майға ҡатып һин йөрөмәйһең бит, мин йөрөйөм.

— Компьютер артында ултырыу көнө-төнө баҫыуҙа саң-туҙан йотоу менән бер иш түгел инде ул, — тип йәнә ҡыҫылды Рәзим.

— Бына ҡустым мине, йәш булһа ла, аңлап тора.

— Ана шул ҡустың менән йәшә, улай бик аҡыллы булғас.

— Һин минең туғанды улай рәнйетмә! — тип тауышын күтәрә төштө Рәхимйән.

Зәмзәгөл инде түҙмәйенсә илап ебәрҙе.

— Рәхимйән... һин нисек... шулай... кеше алдында... мыҫҡыл итәһең? Оят түгелме ни... саҡ ҡына.

Иренең иҫе китмәне. Ҡустыһы алдында кире сигеп, үҙен бер сепрәк баш итеп күрһәтәһе килеп тормай әле. Ана бит, Рәзим уға һоҡланып ҡарап ултыра. Ағаларына ҡарап йәшәргә өйрәнмәй, тағы ҡайҙан фәһем алһын ул?

— Етер, шым! — тип тауышын тағы ла күтәрә бирҙе Рәхимйән. — Һинең ана шул шәмәреп илағаныңды ғына ҡарап ултыраһым ҡалғайны.

Зәмзәгөл йыйыштырып йөрөгән һауыттарын урынына ҡабат ултыртты ла икенсе бүлмәгә сығып китте.

— Ғаиләгеҙҙә баш, ағай, һин икән, — тип һығымта яһаны Рәзим, Зәмзәгөл артынан ишек ябылыу менән.

Рәхимйән ҡәнәғәт йылмайҙы.

— Әтеү! Бисә халҡын уны шулайыраҡ тотмаһаң... өҫтөңә менеп ултырырға ла күп һорамаҫтар.

— Дөрөҫ әйтәһең, ағай. Йыбытҡы ир-атты енем һөймәй. Минең ҡартәсәй, ана, һуңынан ҡарттайҙы әҙәмгә лә һанамай башланы. Үҙе ғәйепле. Бисәһенең һәр һүҙен тыңлап ултырмаҫ ине.

— Эш сығасаҡ һинән, ҡустым.

— Һиңә ҡарап йәшәргә өйрәнергә кәрәк инде, — тип уны тағы ныҡыраҡ ҡупайтты Рәзим. — Әтеү бит Йыһангир ағай ҙа "Зөһрә ни әйтер?" тигән була ла тора. Шул да булдымы һүҙ! Ир булғас ир була белһен.

— Әйтерең бармы...

— Әйткәндәй, ағай, дөрөҫ һөйләйһең һин. Ысынлап та, хужалыҡты үҙ ҡулыңа алырға бик тә ваҡыт һиңә. Белемең бар. Уҡытыусылыҡҡа уҡып сыҡҡан башы

менән Йыһангир ағай нисек оялмай һинең өҫтән етәкселек иткән булалыр — шуны бер ҙә генә аңламайым.

— Бына быныһы миңә лә оҡшамай шул, — тип ҡустыһын ҡеүәтләне Рәхимйән. — Һәр кем үҙ шөғөлө менән булырға тейеш. Ауыл хужалығының ни икәнен беләме һуң әле ул?!

— Мәктәптә генә йөрөй бирмәй, — тип утҡа майҙы йәнә өҫтәне Рәзим. — Әйткәндәй, бик ҡулай сәбәбе лә сығып тора түгелме һуң?

— Нимәне әйтәһең, ҡустым? — тип Рәзимгә күтәрелеп ҡараны ир кеше. Ул әле генә егет әйткән һүҙҙәрҙән, ысынлап та, һиҫкәнгәйне. Ҡара һин уны, был малайҙа баш та бар икән дәһә! Хужалыҡты ниңә бүлгеләп маташырға, ти?! Ярты донъя — ярты донъя инде ул. Бөтөнөнә етмәй. Әллә ысынлап та тәүәккәлләргәме? Бындай уңай осраҡ һәр ваҡытта ла булып тормаҫ бит.

— Һуң, үҙең әйттең бит... бурлыҡта ғәйепләп инде. Йөҙ илле мең арыу ғына аҡса бит. Ҡәҙәләнә башлаһа,суды бар уның. Ниңә аптырап торорға, ти?

— Ҡитсе, улай килешерме икән һуң... — Рәхимйән икеләнде. — Ҡеше алдында яманатлы булыуҙан ни файҙа?

— Ә уны һуң кем белә? Үҙенә генә әйтерһең. Урлашҡаным өсөн суд менән ҡурҡыталар, тип үҙе һөйләп йөрөмәҫ бит инде.

Рәхимйән уйға ҡалды. Хужалыҡтарында ысын хужа ла булғыһы килә, ләкин был тиклем үк... Шуның өсөн генә ағай менән дошманлашып йөрөү эшме ни ул? Ә Йыһангир һуң үҙ теләге менән дилбегәне уға тапшырасаҡмы? Юҡ бит. Аҡылы булһа, уға, белемлерәк кешегә, әллә ҡасан уҡ бирәһе ине лә бит... Икенсенән... был ҡустыһы нишләп әле Йыһангиргә ҡаршы ҡотортҡан һымаҡ булып ултыра? Үҙе бит шулар йортонан сыҡмай түгелме һуң әле?..

— Туҡта әле, ҡустым... — Рәхимйән Рәзимгә һынап ҡараны. — Ә һиңә нимә бирә был? Ағайым менән бик тә килешеп киткәйнегеҙ бит.

Рәзим уфтанған һымаҡ итте.

— Йыһангир ағай хужалыҡ алып барыу йәһәтенән йомшаҡ ул, ағай. Ялланған эшселәре менән дә сөсөлдәгән булып һөйләшә, шуға, ана, илке-һалҡы йөрөйҙәр.

— Аңланым, ҡустым. Уйлармын, — тип һүҙҙе түңәрәкләргә ашыҡты Рәхимйән. Сөнки Зәмзәгөл, күрше бүлмәнән сығып, өҫтәл өҫтөндәге ашантыларҙы йыйыштыра башлағайны.

Күҙҙәре ҡыҙарып бөткән ҡатын иренә лә, ҡәйнешенә лә күтәрелеп ҡараманы. Рәхимйән ниңәлер уны элеккесә мәҙәк һүҙ ысҡындырған булып, ыҙғышты ҙурға ебәрмәү өсөн барыһын да яйларға тырышыр, ярашыуҙы үҙе башлар, тип көтөбөрәк ултыра ине. Бисәһенең ҡыланышына йәне көйөп (ул бит ғаиләһен байытыу өсөн ана, ниндәй пландар менән йәшәй, аңламайҙар ҙа бит, исмаһам!), Рәхимйән урынынан ҡалҡынды.

— Әйҙә, ҡустым, сыҡтыҡ бынан. Һыңҡылдап илаған бисәләрҙе енем һөймәй. Үҙ ғәйебен танымағандарын инде — бигерәк тә, — тип ларҫ-лорҫ баҫып тышҡа йүнәлде. Рәзим бер һүҙ ҙә өндәшмәй, уның артынан эйәрҙе.

* * *

Йыһангирҙең кәйефе һәйбәт ине. Ике тәүлек буйына юлда йөрөүенең йонсоуы ла әллә ни һиҙелмәгән һымаҡ хатта. Нисек итһә-итте, юлын уңдырҙы. Хәҙер Рәзимгә килеп йөрөүҙең дә кәрәге ҡалманы. Кәрәкле билдәләрҙе ҡуясаҡтар — быныһы иң мөһиме. Өфөгә күсеүҙе лә эмәлләнеләр. Хәҙер яңы уҡыу йылының башында барып, парта артына ултыраһы ғына ҡалды. Автотранспорт колледжы тигәс, Рәзим телефон аша ике лә уйламай ризалашты. Тик бына аҡсаны күберәк һыпырҙылар, шикелле. Йә булмаһа Рәхимйән менән алданыраҡ кәңәшләшмәне. Ундай уҡ ҙур суммаға олғашыр тип башына ла инеп сыҡманы шул. Башҡа ваҡытта

ҡырҡ тапҡыр үлсәгәндән һуң ғына киҫергә батырсылыҡ иткән Йыһангиргә әллә нимә булғайны. Диванда бөгәрләнеп ятып ҡалған Рәзимде үҙенсә шатландырыу ине уның уйы. Сәлимә һеңлеһенең рухы алдында йөҙө яҡты булыр тип тә өмөтләнде кеүек. Ҡалай булһа ла булды — күҙҙәренә мөлдөрәп ҡарап торған етем ҡустыһының теләгеn үтәне. Хәҙер бына Рәхимйән менән аңлашырға кәрәк. Туғанын ул тиклем ғауға ҡуптарыр тип уйламай Йыһангир. Рәзим уның да ҡустыһы бит әле.

Ҡисләтеп кенә ҡайтып төшкән Йыһангир иртән тороу менән үк ауылдың икенсе осондағы ҡустыһы йортона барырға ниәтләне. Төн йөҙөндә былдай йомош менән йөрөү килешмәгән һымаҡ ине. Ләкин юлдан ҡайтып табын артына ултырырға ла өлгөрмәне, Рәзим үҙе килеп инде. Йыһангир шаулап урынынан ҡалҡынды.

— Һай, ҡустым! Бик ваҡытлы йөрөйһөң, хатта маҡтап йөрөйһөң! Табын артына ғына ултырып тора инем. Әйҙә, әйҙә, түргә. Зөһрә, сынаяҡ ҡуй.

Рәзим һис тә инәлтмәй ағаһының эргәһенән урын алды.

— Һине, ағай, көтөп түҙемлегем бөттө. Ысынлап та булдырҙыңмы?

Йыһангир көр тауыш менән геүләп көлдө.

— Һин, ҡустым, улай икенсе юлы ағайыңдан шикләнмә. Беҙ ҡулдан килмәҫтәй эшкә тотонмайбыҙ. Ә тотонһаҡ — бөрөп кенә һалабыҙ.

Рәзим ихлас ҡыуанды.

— Рәхмәт, ағай. Көтмәгәйнем. Юрый ғына йөрөп ҡайтырһың тип уйлағайным. Шуның өсөн хәҙер хатта үҙемә лә оят.

— Оялма, ҡустым. — Йыһангир Рәзимдең арҡаһынан дөпөлдәтеп яратты. — Бирешмәбеҙ. Бер төптән тотонһаҡ, беҙме ни әле ул... әллә ниндәй үрҙәрҙе лә яуларбыҙ. Бына күрерһең. Һине механикка ла уҡытып алһаҡмы! Унан сельхоздың өсөнсө курсына тыпылдатып алып барып ултыртырбыҙ. Мехфакта дәдәндең үҙ кешеләре бар. Тәк што, төшөп ҡалғандарҙан түгелбеҙ.

— Һин оялма тиһең дә ул, ағай. — Рәзим ниңәлер ҡыйынһынды. Унан Зөһрәнең икенсе бүлмәгә сыҡҡан ваҡытын самалап, тауышын баҫа биреберәк өндәште. — Хәҙер бит бер ниҙе лә бушҡа эшләмәйҙәр, ағай. Аҡса ла сығарырға тура килгәндер әле?

— Уныһы хаҡында баш ватма, ҡустым. — Йыһангир тамсы ла үкенмәгән ҡиәфәт менән яуап бирҙе. — Ул тиклем кеше көнлө түгелбеҙ, бер ҡустыны ғына урынлаштырырға хәлебеҙҙән килә. Үҙ ҡаныбыҙ бит. Аҡса ул — бөгөн бар ҙа иртәгә юҡ. Ә белем кешелә ҡала!

— Дөрөҫ әйтәһең инде ул һин, ағай, — тип йөпләгән булды Рәзим. — Шулай ҙа ағай-эне алдында уңайһыҙ бит әле. Килеп етмәгән, ана, ағаларының тир түгеп тапҡан аҡсаларын елгә осора ла башланы, тиәсәктәр.

Йыһангир өйҙө яңғыратып көлдө.

— Һы, ҡустым, уны ауылда кем белһен? Һин нимә, урамға сығып, Рәзимде уҡырға урынлаштырыу өсөн шунса аҡса түктем тип һөйләп йөрөрмөн тип уйлайһыңмы? Ну, ҡустым, килештерәһең!

— Юҡ та... Рәхимйән ағай менән еңгә алдында оят миңә. Һеҙ мине аңлайһығыҙ ҙа ул, улар килешерме икән? Зәмзәгөл еңгә былай ҙа ҡырынырaҡ ҡараған кеүек күренә. Мине яратып бөтмәгән һымаҡ.

Йыһангир уйға ҡалды.

— Дә-ә, — тине ул, елкәһен ҡашый биреп. — Мәсьәләнең был яғы ла бар бит әле... Тимурҙың да быйыл уҡырға инә торған йылы. Әгәр ҙә аҡса йүнәтергә өлгөрмәһәк, нишләргә?

— Мин дә шуға хафаланам, ағай. — Рәзим ысынлап ҡайғырған ҡиәфәткә инде. — Үҙемдең бик уҡыйһым килә. Ул автотранспорт колледжы хаҡында электән үк хыяллана инем бит мин. Һин шылтыратып һорағас, нисек шатланғанымды күрһәң!

Йыһангир ҡәнәғәт йылмайҙы.

— Әтеү! Ағайың йүләр түгел әле, эшкинерҙәйҙәрҙе күрә беләм мин.

— Хәҙер Зәмзәгөл еңгә генә шул әрәмтамаҡ етем ҡустығыҙ өсөн күпме аҡса түккәнһегеҙ тип тормаһа инде... — Рәзим аҫтан ғына ағаһына ҡарап алды. — Оят шул миңә, ағай... Етмәһә, үҙең әйтәң бит, Тимурҙы ла уҡырға индерергә кәрәк ине, тип.

Йыһангир бер аҙ уйланып алды.

— Ярай, ҡустым, уйлашырбыҙ. Бәлки, аҡсаны һинең өсөн алғанды әлегә әйтмәй ҙә торормон.

Үҙенә кәрәкле һүҙҙе ишеткәс, Рәзим шатланып йылмайҙы.

— Бик һәйбәт булыр ине, ағай. Әтеү миңә уларҙың күҙҙәренә ҡарауы ҡыйын булыр. Күпһенә башлаһалар, нишләрмен? Ҡайҙа барырмын? Өфөгә уҡырға күскәнде ишетһә, ҡартәсәй бөтөнләй өйөнә индермәй бит мине, — тине ул, күҙҙәрен йәнә мөлдөрәтеп.

Йыһангиргә ҡустыһы йәл булып китте.

— Онот был хаҡта, ҡустым. Һине кәмһетергә, ҡыйырһытырға бирмәбеҙ. Ул аҡса хаҡында ла өндәшмәй торорбоҙ. Үҙ туғаным бит әле Рәхимйән ағайың. Килешербеҙ.

Ләкин Йыһангирҙең иҫәбе хисапҡа тура килмәне. Ағаһының ҡайтҡанын ишетеү менән Рәхимйән иртә таңдан Йыһангирҙең йортона үҙе килеп етте.

— Шунан, ағай, нисек йөрөп ҡайттың? — тине ул, ниңәлер һаулыҡ һорашырға ла онотоп.

— Хәлдәр ни, арыу инде, — тигән булды Йыһангир, ни әйтергә лә белмәй.

— Тантана итәһең инде, ә? Ә хәҙер, әйт, ҡайҙа ҡуйҙың аҡсаны? Нишләп был хаҡта бухгалтер бер нәмә лә белмәй? — тип үҙ бисәһен бер ыңғай рәсми дәрәжә менән дә ҙурлап ташланы Рәхимйән. Күрәһең, был үҙенсә ағай-энелекте ситкә ҡуйып, рәсми отчет тыңлау кеүек булырға тейеш ине.

— Шулай тура килде, ҡустым, — тигән булды Йыһангир.

— Нисек инде "шулай тура килде"? Ниткән һүҙ ул?

— Аңлатырмын, Рәхимйән, сабыр ит саҡ ҡына. Ләкин бына хәҙер тота килеп ысын сәбәбен әйтә алмам. Һүҙ бирҙем.

— Кемгә?

— Әйтә алмайым, тим бит.

— Ә ниңә уртаҡ малды тотонор алдынан кәңәшләшмәнең? Беҙҙең нимә, уға хаҡыбыҙ юҡмы ни?

— Бар, ҡустым, бар.

— "Бар, ҡустым..." — тип Йыһангирҙе әләкләне Рәхимйән. — Тик бына ул "бар, ҡустым"ды эштә, ғөмүмән, күрмәйем бит әле. Әйтерһең дә, һин барин, ә беҙ — һинең ялсыларың. Кәңәшләшеп тороуҙы ла түбәнлек һанаһаң, тағы нисек баһаларға быны?

— Ғәйеп миндә, ҡустым, — тине Йыһангир тауышын баҫыбыраҡ. — Мин алдым аҡсаны.

— Тә-әк, тәк!.. Ни өсөн инде, ә? Беҙҙең ише ялсылар кимәленә төшөп булһа ла, әйтмәҫһеңме?

— Улай тимә, Рәхимйән. Ҡайтарырмын. Тиненә тиклем.

Өйҙә бер аҙға ғына тынлыҡ урынлашты. Ә, бәлки, һуң булмаҫ борон, был хатаны төҙәтеп ҡалырға кәрәктер? Әле бит барыһы ла емерелмәгән. Ана бит, Рәхимйән юҡҡа сығарыу уйы менән килмәгән уға. Аңлашыу, ағаһын ошо аҙымға этәргән сәбәпте аңларға теләү килтергән уны бында. Нисәмә йылдар хәләл көстәре менән төҙөгән, гөрләп торған дөйөм эштәренең киләсәге борсой ҡустыһын. Күҙҙәрендәге асыу уттары ла аңлашыла — Йыһангиргә элекке кеүек ышанырға теләй. Бына нимәлә бар эш! Йыһангир үҙен ошо аҙымға этәргән төп сәбәпте ҡустыһына әйтеп һалырға тип ауыҙын асты ла — теле тағы тотлоҡто. Күҙ алдына

йәнә Рәзимдең үтенесле ҡарашы килеп баҫҡайны. Һәм Йыһангир был осраҡта күптәр аптыраҒандан ҡулланҒан һуңҒы һаламҒа йәбеште — үҙе һөжүмгә күсте.

— Нимә әле һин, Рәхимйән туҒан, таң һарыһынан килеп ҒауҒа ҡуптарып йөрөйһөң? Үҙе килмәҫ тип ҡурҡтыңмы? Һеҙгә барырҒа йыйынып ҡына тора инем. Шунда барыһын да аңлатыр инем.

Рәхимйән мыҫҡыллы йылмайҙы.

— Аңлатыуыңдың инде, аҒай, хәжәте юҡ. Аҡсаларҙы кире ҡайтар — һәм бөттө-китте! Башҡа бер ниндәй ҙә сәбәбен ишетергә лә теләмәйем.

— Рәхимйән, сабыр ит. Ҡайтарырмын тип әйттем бит инде.

— Һин дөйөм килемгә иҫәп тотма, аҒай. Барып сыҡмаҫ.

— Юҡ, үҙ иҫәбемә күтәрермен.

Рәхимйән сигенә башлауын һиҙеп ҡалды. Ә иртән ниндәй тәүәккәллек менән сыҡҡайны бит! Хатта ошо йортҡа ингәндә үҙен беренсе хужа итеп тә иҫәпләй башлаҒайны түгелме һуң? Рәзим ҡустыһы мыҫҡыллы йылмайыр инде. Һи, һинән ниндәй генерал сыҡһын, мәүеш, тиер. Ана шул машина майына батып йөрөүҙән башҡаҒа эшкинмәйһең дә, тип әйтәсәк.

— Юҡ инде, аҒай, һин улай анһат ҡына ҡотолорҒа уйлама әле, — тип тағы ла ниҙер әйтергә уҡталҒан Йыһангирҙе бүлдерҙе Рәхимйән. — Яманлыҡ ҡылҒас, яуабын да бирә бел. Беҙҙе, нимә, әллә иҫәргә һанайһыңмы? Хужалыҡтың дөйөм иҫәбендәге аҡсаны уңлы-һуллы туҙҙыр ҙа — бер нәмә лә булмаҒандай һыуҙан ҡоро сыҡ?

Йыһангир тағы ла ниҙер әйтергә уҡталды. АҒаһына ҡарата һаман да һаҡланҒан ихтирамҒа бирешеп, йәнә уның ыңҒайына төшөп китмәҫ өсөн, Рәхимйән уҒа инде һүҙ әйтергә лә ирек бирмәне.

— Йә бөгөн үк ҡайтараһың, йә судлашырҒа тура киләсәк. Һайла!

АҒаһы яңылыш ишетмәйемме тигәндәй, туҒанына аптырап ҡараны.

— Рәхимйән, һин нимә? Үҙ аҡылыңдаһыңмы?

— Нисегерәк үҙ аҡылымда әле! Ә бына һине — белмәйем!

— Ҡит инде, шайтан ҡоторҡандыр һине! Нимә булды һиңә? Уйлап ҡара — атайҙың күҙҙәренә нисек ҡарарбыҙ бынан һуң? Ә әсәйгә ни әйтербеҙ? Тереләй утҡа һалырҒа итәһеңме ни уларҙы?

— Һин, аҒай, атай менән әсәйҙең артына йәшеренмә. Ирлек түгел был, — тип аҒаһының намыҫынан ныҒыраҡ эләктерергә тырышты Рәхимйән. — Һүҙ бында беҙҙең хаҡта бара. Атабыраҡ әйткәндә, һинең бурлыҒың хаҡында.

— Рәхимйән, был ҒауҒаның ояты хаҡында уйламаныңмы һуң? — тип ҡыҙҒан ҡустыһын тынысландырырҒа маташты Йыһангир. — Ҡеше ни уйлар? Бер ауылда йәшәйбеҙ ҙә баһа. Ниңә улай ҙур ҒауҒаҒа әйләндерәһең?

— АҒай, ни өсөн икәнен һин бик һәйбәт беләһең, — тип баҫыла төштө Рәхимйән. Сөнки Йыһангирҙең атай-әсәйҙе бөтә кеше алдында оятлы итеү хәүефе хаҡында әйтеүе уны бер аҙ һыуындырҒайны. Ләкин... Рәзимдең мыҫҡыллы йылмайыуы саҒылып киткәндәй булды. "Һи, бешмәгән, тораһың инде шунда машина майына ҡатып", — тигән кеүек... Рәхимйәндең тауышына электр ҡоролоҒо ҡабат әйләнеп ҡайтты. — Мин һиңә башҡа ышанмайым! Бына шул! Һәм һинең менән бергә эшләргә лә йыйынмайым. Партнер булараҡ һин ышаныстан сыҡтың, аҒай!

Йыһангир аптырап ҡалды.

— Нисек инде, ҡустым... Күпме көс түгеп, был эшебеҙҙе яйҒа һалдыҡ та... Хәҙер бүлгеләргәме?

— Ҡем һиңә бүлгеләргә ти әле, — тип мыҫҡыллы йылмайҙы Рәхимйән. — Эште мин етәкләйәсәкмен. Һәм һинең инде бында кәрәгең юҡ! Ана, тарихсы дипломыңды тот та мәктәбеңә бар! Мал араһында уның кәрәге юҡ. Һәм иген иккәндә лә һинең ул һәр тиҫтә йыл һайын өр-яңынан яҙылҒан тарих тигән нәҫтәкәйеңдең кәрәге юҡ! Иген илдең тарихын белмәһә лә бик һәйбәт үҫә.

Йортта бер аҙға ғына тынлыҡ урынлашты. Йыһангир ҡустыһының инде аҙаҡҡаса барасағын аңланы. Әле уның менән һүҙ көрәштереү бер ниндәй ҙә һөҙөмтә бирмәйәсәк — бына шуны төшөндө ул. Ә, бәлки, Рәхимйәндең тынысланғанын көтөп, һуңынараҡ һәүетемсә хәл итергә кәрәктер? Ҡустыһы бит төптө йүләр түгел. Нимәнең яҡшы, нимәнең яман булыуын ул да аңлай ҙа баһа! Һәр хәлдә, элегерәк аңлай торғайны. Бөгөн уға нимә булған — бына быныһы сер ине. Хәүефле бер сер.

— Ярай, туғаным, — тине Йыһангир, һуңғы һүҙенә нығыраҡ баҫым яһап. Рәхимйәндең йөҙө сытырайып ҡуйҙы. Күҙ алдында атаһының шелтәле ҡарашы килеп баҫты, ләкин ул унан йәһәтерәк ҡотолорға ашыҡты. — Быңдай мыҫҡыллауҙар менән бер-беребеҙҙе аңлай алмабыҙ. Һөйләшеүҙе һуңғараҡҡа ҡалдырайыҡ. Бәлки, атай ҡарт менән дә кәңәшләшеү урынлы булыр...

Йыһангир әйтеп бөтөрмәне. Уның ҡайһы яҡҡа ҡайырғанын аңлаған Рәхимйән ағаһын ярты һүҙендә тиерлек бүлдерҙе.

— Һин тағы ла шул атай ҡарт итәге артына йәшеренмә, Йыһангир. — Юрый “ағай” тигәнен төшөрөп ҡалдырҙы. Йыһангирҙең бит мускулдары тартышып ҡуйҙы, ләкин ул үҙен ҡулға алды һәм өндәшмәне. — Үҙ башым менән дә миңә йәшәргә ваҡыт. Һеҙҙең күләгәлә йөрөү ялҡытты.

— Ярай, Рәхимйән, артабан да һүҙ көрәштереүҙең мәғәнәһен күрмәйем. Тәүҙә, бар, тыныслан, һуңынараҡ айыҡ аҡыл менән хәл итербеҙ. Әле һинең асыуың алдан йөрөй. Етәксе лә булырға ынтылған кеше өсөн был ҡулай түгел.

— Һин минең етәкселек һәләтенә шик белдереп аҙапланма! Хатта артығыраҡ, яҡшыраҡ эшләрмен! — Рәхимйән әлеге лә баяғы төҫөн юғалтҡан кепкаһын батырыбыраҡ кейеп, ишекте шарт ябып сығып китте.

Йыһангир нисәмә йыл иңгә-иң terәшеп эшләп, улай ғына ла түгел, сабый саҡтарынан уҡ бик дуҫ булған ҡустыһы менән ни булғанын аңламай, аптырап ултырып ҡалды. Уға бик ауыр ине. Суйын кеүек ауыртайған башын ике ҡулы менән ҡыҫып, әкрен генә урындыҡҡа сүгәләне. Нисек ҡотолорға был ауырлыҡтан? Үҙенә ауҙарылған шик-шөбһәләрҙән нисек арынырға? Йыһангир күңелендәге Рәхимйән ҡустыһына ҡарата булған ризаһыҙлыҡтың әкренләп йән көйөүгә, асыуға әүерелә башлағанын тойҙо. Һәм һиҫкәнде.

...Ә был мәлдә иһә Исәнсура урамы буйлап уңып бөткән кепкаһын батыра кейгән Рәхимйән атлай ине. Уның уйында — сүллек ашаһындағы мираж кеүек ымһындырып торған хыял донъяһы. Ләкин бының өсөн Рәхимйәндең ниндәй хаҡ түләгәнен бер кем дә белмәй. Әлегә...

* * *

Ауыл эргәһенән генә үткән трассала автобустан төшкәс, Фәһим ыҡсым ғына юл сумкаһын өйрәнелгән хәрәкәт менән иңбашына аҫты. Унан еңел аҙымдар менән үҙәк урамдың урта тирәһендәрәк ултырған йорттары яғына йүнәлде. Май байрамында тыуған ауылына ҡайтып килә ул. Күңелендә — моңһоулыҡ. Ошо уҙған бер ай ғына ваҡыт эсендә Фәһимдең донъяһы ни тиклем үҙгәрҙе...

Әсәһе инде юҡ уның. Һәм ул бер ҡасан да кире ҡайтмаясаҡ. Элек ишетеп кенә белгән туғаны пәйҙә булды. Был туғаны хаҡындағы һүҙҙәр ниңәлер һәр ваҡыт сер йомғағы менән уратылғайны. Фәһимдең һорауҙары күп осраҡта яуапһыҙ ҡалды. Ауыл ҡатындары юрый уның күҙ алдында “ҡайҙалыр тилмереп ятҡан” ҡустыһын йәлләнеләр. Һәм “байлыҡтарын ҡайҙа ҡуйырға белмәгән кулактар” хаҡында йәнә йәмһеҙ һүҙҙәр һөйләнеләр. Был малайға бик ауыр тәьҫир итте.

Байтаҡ ҡына әсәһе менән һөйләшмәй ҙә йөрөнө Фәһим. Башҡа балаларҙы гелән яҡшылыҡҡа өйрәткән әсәһенең туғаны менән шундай бәғерһеҙ мөнәсәбәте башына һыймай ине. Улының томһайып йөрөүенең сәбәбен белергә тырышҡан Сәлимә, ниһайәт, уны ҡаршыһына ултыртып, күҙҙәренә туп-тура ҡарап һораны.

— Йә, улым, һөйлә. Нимәгә кәзәң төкөнө?

Фәһим ҡарашын йәшерҙе. Үҙе өндәшмәй тупайып ултырыуын белде.

— Әйт инде, улым. Берәйһе кәмһеттеме ни?

— Юҡ, — тине Фәһим өҙөп. Бөтөнләй өндәшмәҫкә лә иткәйне, әсәһенең яғымлы ҡарашына биреште.

— Ниңә һуң һөйләшмәйһең беҙҙең менән? Ана бит, олатайың менән өләсәйең дә борсола. Уларға ла еңел түгел.

Үҙенең ун бер генә йәше өсөн бик зирәк булған Фәһим әсәһенең ниңә олатай менән өләсәйҙе хәтергә төшөрөүен бик аңлай. Бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәйҙәр ҙә баһа. Ә ғаилә эсендәге күңелһеҙлек һәр кемгә ҡағыла. Бер ҡыйыш ҡараш та бит өй эсендәге һәммәһенең йөрәген яралай ала.

— Һуң, үҙегеҙ бит... — тип аҫтан ғына мөңкөлдәне Фәһим, үҙенең һөйләшмәҫкә тигән һүҙен үҙе үк боҙоуына йәне көйөп. — Ана ауылдағы апайҙар беҙҙән көләләр... Теге... ҡустымды... артыҡ тамаҡ тип әйтәләр... Уҡытыусы башы менән, тиҙәр... Үҙ балаһын кеше ҡулына тоттороп ебәргән... тиҙәр.

— Ҡем шулай ти һуң? — тип тауышын йомшарта төшөп һораны йөҙө үҙгәргән Сәлимә.

Фәһим әйтергә тип ауыҙын асты ла кире уйланы. Олатаһының ҡырыҫ ҡарашы күҙ алдына килеп баҫҡайны. Ғәйбәт ташып йөрөмәҫ бит инде. Улының ни өсөн өндәшмәгәнен аңлаған Сәлимә ныҡышманы.

— Ярай, улым. Ҡасан да булһа бер һиңә әйтергә кәрәк ине. Бәләкәйерәк инең, шуға күрә барыбер аңламаҫһың тип өндәшмәгәйнем... Ә хәҙер тыңла... — Сәлимә ғәрләнеүенән юлаҡ-юлаҡ булып күҙ йәштәре аҡҡан улының битендәге тоҙло тамсыларҙы йомшаҡ бармаҡтары менән ипләп кенә һыпырҙы ла яурынынан ҡосаҡланы. — Һеҙ игеҙәк булып тыуҙығыҙ был донъяға. Ҡустыңдың кескәй генә саҡтағы һүрәттәрен дә күргәнең бар. Был һиңә яңылыҡ түгел. Ләкин, балам, шуны һин бер ҡасан да онотма: һеҙ миңә икегеҙ ҙә ғәзиз. Туғаныңдың ситтә үҫкәне өсөн мин үҙемде һәр саҡ ғәйепле һананым. Ләкин уны үҙ теләгем менән бер ҡасан да бирмәҫ инем. Мәжбүр булдым мин. Донъяла бит бар нәмә лә һинең теләгеңдән генә тормай. Ә бына ауылдағы апайҙарыңдың “күпһенделәр” тигәненә ышанма. Аҡсаның аҙы ла бөтә, күбе лә бөтә. Күңел киң булһа, тере йән һыя ул.

— Туғаным эргәмдә булһа... мин уның менән уйнар инем, — тип һүҙ ҡыҫтырҙы Фәһим, әсәһенә инәлеп ҡарап.

Сәлимә көрһөндө. Их, күңелендәге дауылды кемгә генә аңлата ала ине ул? Сөнки Ағинәй бит шулай ҡушты. Был Фәһимде һәләк итмәҫ өсөн кәрәк булды. Бәлки, ул һәләк тә булмаҫ ине. Ләкин уның нығынмаҫ борон тормош бөккән һәм рухын һындырған әҙәмдәр һанын арттырыуы бик мөмкин ине. Сөнки Изгелектең исеме лә Изгелек. Ул кешеләрҙең һәйбәт күңелле булыуҙарына ышана. Ә Яуызлыҡ агрессив. Ул барыһын да тапап, һындырып, яулап ала...

Фәһим хәсрәтле башын ихатаға арт яҡтан инә торған ҡапҡа бағанаһына терәгән дә уйға ҡалған. Ул ҡайтҡанда йылмайып килеп сыҡҡан әсәһенең ҡаршы алмаҫын белә ул. Их, был донъя...

— Ағай! Фәһим ағай!

Ҡемдер кескәй ҡулдары менән уға ҡағылды. Фәһим тертләп башын күтәрҙе. Эргәһендә муйылдай күҙҙәре менән аҫтан өҫкә ҡарап, Айрат баҫып тора ине. Күңеле боларған Фәһим ошо гонаһһыҙ сабыйҙы күргәненә ниңәлер ҡыуанғандай итте. Әйтерһең дә, ошо кескәй сабый шатлыҡ-ҡыуаныста үткән бала сағына уны ҡабаттан етәкләп алып инергә маташа. Ай-һай, көсөң етерме һуң, сабый?

Фәһим ҡустыһын күтәреп алды.

— Һаумы, Айрат туғаным! Шул тиклем һағындым мин һине, егет!

— Мин дә! — тип ҡыуанып һөйләнде Айрат. — Улайһа мин һине башҡа ҡайтмаҫ тип ҡурҡҡайным.

— Ниңә? — тип аптыраны Фәһим.

— Һуң, теге ағай... Яман ағай...

— Ниңә улай тип әйтәһең, Айрат? — тип ғәжәпләнде Фәһим.

— Белмәйем. — Айрат томһайҙы. — Мин унан ҡурҡам.

— Ҡыйырһытамы ни?

— Юҡ та... — Малай ян-яғына ҡаранып алды ла бышылдауға күсте. — Әллә ниндәй ҡара нәмәкәй эйәреп йөрөй уға. Үҙем күрҙем.

— Ҡитсе! Булмаҫ...

Айрат үпкәләне.

— Һин дә миңә ышанмайһың. Әсәйем дә... Хатта әрләп ташланы. Ы-ы...

— Ярай инде, тыныслан. — Фәһим һытыла башлаған ҡустыһының шыуып төшкән кепкаһын рәтләп кейҙерҙе. — Ышанам, ышанам! Күрһәтерһең миңә лә. Ләкин был хаҡта башҡа бер кемгә лә әйтмә. Килештекме?

— Егет һүҙе! — Күңеле булған Айрат Фәһимдең усына шапылдатып һуҡты ла ихата эсенә йүгерҙе. — Әсәй! Әсәй...

Ҡескәй ҡустыһы менән булған сәйер әңгәмәгә ғәжәпләнгән Фәһим бер аҙ аптырап тора бирҙе лә ихатаға үтте һәм яу һалып болдорға табан йүгергән малай артынан йортҡа йүнәлде.

— Әсәй! Әсә-әй! Өләсәй! Фәһим ағайым ҡайтып килә!

Рәхилә йылдар өҫтәлеү менән хәтһеҙ ауырайған кәүҙәһен ҡалҡытып тышҡа ыңғайлауға Фәһим үҙе лә ишектән килеп инде.

— Һаумы, өләсәй? — тип күтәренке тауыш менән өндәште егет, өләсәһен ҡосаҡлап алып.

— И-и, бәбекәйемде! — Ейәнен күреү менән өтәләнеп киткән Рәхиләнең күңеле йомшарҙы. — Иҫән-имен генә ҡайттыңмы, балам? Әллә ниңә уйҙарым да боларып тора. Хәүеф-хәтәргә генә тарый күрмә.

— Борсолма, өләсәй! — Фәһим яурынындағы сумкаһын ишек төбөнә ҡуйҙы. — Ни булһын беҙҙең менән?

— Улай тимә, улым. Күфөр һүҙен һөйләмә. Тәүбә, тиген! — Рәхилә Айрат йүгереп инеп киткән бүлмәгә ҡарап өндәште. — Лира балам, Фәһим ҡайтты бит. Юлдан сарсап килгәндер бәбекәйем. Сәй эсерә һалып алайыҡ...

Фәһим ниндәйҙер бер тойғо менән үҙендә сәйер быраулаусы ҡарашты тойҙо. Был ҡараштан килгән көс һәм энергия һәр ағзаһын ҡапшап-тикшереп, үтәнән-үтә рентген нурҙары сағылышына солғаған кеүек. Юл сумкаһынан өләсәһенә тип алған күстәнәстәрен бушатып маташҡан еренән ул эске бер тауышҡа буйһоноп ҡалҡынды... һәм күҙҙәре үҙенә тишә яҙып төбәлеп торған таныш түгел егеттең ҡарашы менән осрашты. Ләкин был ҡараш шунда уҡ яғымлыға әйләнде, күҙ алмаларында ҡыҙыҡһыныусан нурҙар уйнап алды.

— Ошо буламы ни минең туғаным? — тип киң йылмайып Фәһимгә ҡаршы атланы ул, ҡулдарын күрешергә һуҙып.

Ейәне ҡайтыу шатлығынан албырғап ҡалған Рәхилә ҡыуанып һөйләнде.

— Ай Аллам! Ана бит ҡарт тинтәкте... үҙемде әйтәм инде, улым. Мин йүләр йыйын юҡ-бар һөйләп, әүрәп алып тик торамсы... Фәһим улым, бына ошо була инде ағайың. Рәзим ағайың, Фәһим улым. Күреш, таныш... Ана бит ул, Аллаға шөкөр, шатлыҡ ҡушарлап йөрөй. Яңғыҙмын тип күмһеп тә китә инең бала сағыңда, хәҙер, Алла бирһә, бергә-бергә йәшәрбеҙ, — тип һөйләнде ул, ҡыуанысынан ни торорға, ни алырға белә алмай.

Был быраулаусы ҡараштың кинәт яғымлыға әйләнгәненә бер аҙ аптыраған Фәһим шулай ҙа үҙен тиҙ ҡулға алды. Ләкин арҡаһы буйлап йүгергән әҫеле-

һыуыҡлы тулҡын бер ни тиклем ваҡыт һаҡланды әле. Ҡаршы атлаған Рәзимгә ҡулын биргәндә лә ул үтеп бөтмәгәйне.

“Күрәһең, көтөлмәгәндә булғанға шулайҙыр, — тип уйланы Фәһим. — Һуң, нисәмә йылдар үҙеңдең игеҙ һыңарыңдың донъяла бар икәнлеген белеп йәшә лә, уны бер тапҡыр ҙа күрмә. Һәйбәт түгелдер был...”

“Һинме әле был, Алланың ҡашҡа тәкәһе? Танауы ла кипмәгән малай аҡтығы? Миңә лә тейеш өлөштө бер үҙең ашап, май эсендәге бөйөр кеүек ирәүәнләп йәшәгән әсәй малайы... Шул итәккә тотоноп йөрөүең һаман үтмәгәндер, күрәһең... Ана бит, бынау мышҡылдаҡ ҡарсыҡтың ҡосағына инеп киләһең. Танауыңды уның итәгенә лә һөртөп ал, шартына килһен...”

“Былай үҙе итәғәтлегә генә оҡшап тора... Тик, аңламайым, ни өсөн йылмайғанда ла күҙҙәре һалҡын килеш ҡала? Күрәһең, тегендәге олатай менән өләсәйҙән бигүк яҡлау эләкмәгәндер инде. Шуны онота алмай микән? Илсура ағайым да әйтә ине бит... Хәҙер барыһы ла һәйбәт булыр. Иҫәнсуриндарҙың күңеле киң һәм йомарт... Үҙ ҡанатыбыҙ аҫтына алырбыҙ һине, туған...”

“Үҙен хужа итеп тойоп та маташалыр әле был емтек. Хәҙер инде һинең заманың үтте... Урыныңды бушатырға тура килер... Етер, байлыҡтың артына тибеп, ирәүәнләнеп оҙаҡ йәшәнең. Күп сыпрандаһаң, Стәрлетамаҡҡа оҙатырмын үҙеңде. Минең тирелә йәшәп ҡара унда, был тәтәйлегең күпкә барырмы икән?.. Элекке әшнәләргә етмәһә ҡорбан да кәрәк... Уйларға кәрәк булыр был хаҡта...”

“Нимә әле мин ситһенгән кеүек торам? Ағайға ярҙам итергә кәрәк тә инде... Бында бит ул өйрәнеп бөтмәгән... Ятһыныуы ла үтмәгәндер. Уға мин яурынымды ҡуймаһам, тағы кемгә таяна ала ул? Беҙҙә бит бер үк ҡан аға...”

Фәһим киң йылмайып килеүсе Рәзимгә ҡаршы атланы. Ҡулын һуҙғайны, ҡаршы килеүсе ағаһы уны ҡосаҡлап уҡ алды. Бер нисә секунд эсендә баштарынан мең төрлө уй йүгереп үткән ике игеҙ туған ҡосаҡлашып бер мәлгә тын ҡалдылар.

— Һай, үҙемдең ҡусты! — тип Рәзим Фәһимдең яурынынан ҡосаҡланы. — “Ҡусты” тигәнгә үпкәләмә. Ярты сәғәткә булһа ла ағай бит әле мин һиңә. Беҙ бында барыһын да инде асыҡлап өлгөрҙөк. Шулай бит, өләсәй? — Рәзим мышҡылдап күҙ йәштәрен һөрткән, туҡтауһыҙ сөсөлдәүҙәре менән зитына тейеп бөткән ҡарсыҡҡа ҡараны.

— Эйе, эйе, балам, дөрөҫтө һөйләйһең, — тип йөпләргә ашыҡты Рәхилә. — Һин саҡ ҡына иртәрәк күренгәнһең. Шуға ла сабый сағыңда теремегерәк булдың.

— Минең ул теремеклекте әллә ни күреп тә өлгөрмәгәнһегеҙҙер инде... Бер аҙналай ваҡытта уҡ ҡустымды ғына алып ҡалғанһығыҙ түгелме һуң? — тип Рәзим һүҙ араһында сәнсеп алды.

— Шулай тура килде инде. Нишләйһең, яҙмыштыр инде. — Рәхилә кинәт шиңеп, ғәйепле ҡиәфәттә йылмайған булды.

Өләсәһенең йөҙөнә ятҡан күләгә өсөн үҙен ғәйепле һымаҡ һиҙгән Фәһим уның күңелен күтәреү өсөн ниндәй ҙә булһа яғымлы һүҙ ҡыҫтырырға уйлағайны, тағы өлгөрмәне. Рәзим шаулауы менән иркен бүлмәне бер үҙе тултырып, туғанын яурынынан тотоп бүлмәләренә әйҙәне.

— Әйҙә, ҡустым, танышайыҡ, иркенләп һөйләшәйек. Беҙгә бит хәҙер бер-беребеҙҙе һәйбәтләп белергә кәрәк. Һинең һымаҡ туғанлы булыу, беләһең килһә, минең хыялым. Ә һин, Лирочка, — Рәзим ишек төбөндә уларҙың зыр-зыу килгәндәрен һаман да күҙәтеп, ни керерен, ни сығырын белмәгәндәй торған еңгәһенә өндәште, — беҙгә табын хәстәрлә. Йә инде, бар, торма. Фәһим ҡәйнешеңде тәүләп күрәһеңме ни?

— Ҡәйнешкәйем, өҫтәлдең хәҙер бына тигәнен әҙерләйбеҙ беҙ уның. Уй, ҡалай ҡыҙыҡ! Зөһрә быны күрһәме! — Лира үҙенә һис тә килешмәгәнсә ҡыланып, ҡулдарын сәбәкәйләп алды ла аш бүлмәһенә инеп китте. Айрат та ағайҙары яғына ҡарана-ҡарана уның артынан эйәрҙе.

Фәһим иһә игеҙ туғанының ихтыярына буйһонған һымаҡ, унының артынан бүлмәләренә көндәм генә эйәреп инде. Танышып та өлгөрмәгәндәр, ошо тупһаға яңы аяҡ баҫҡан кешене уңайһыҙ хәлгә ҡуйып, үҙ туҡһанын туҡһанлай алмай бит инде. Өләсәһе менән олатаһының, ағай-еңгәләренең хәлен бик тә белешәһе килгәйне лә бит. Ярай инде, һуңыраҡ та өлгөрөр әле. Өләсәһенең күҙҙәрендәге юғалып ҡалғанлыҡ ғәләмәтен күреп кенә йөрәге сәнсеп алған һымаҡ булды. Ни булды икән? Әллә Фәһимдең әсәһен гүр ҡуйынына биреүҙе күңеле һаман да ҡабул итмәйме? Тағы шуныһы аңлашылмай — ошо йортта ун ете йыл ғүмерен үткәргән Фәһим Рәзимде үҙ ҡанаты аҫтына алыу, уға терәк булыу хаҡында хыялланған була. Ә унының быға ихтыяжы бармы икән һуң? Һәр хәлдә әлеге мәлдә үҙен тотошона ҡарағанда бының һис тә хәжәте юҡ һымаҡ тойола. Фәһимгә хатта бер генә мәлгә тап киреһенсә кеүек тойолоп китте. Сөнки Рәзим үҙен уға баш кеүегерәк итеп тота ине. Еңгәләренә “Лирочка” тип өндәшеүе лә сәйер, хатта әҙәпһеҙлек һымаҡ күренде. Ә унының “ҡәйнешкәйем” тип йылмаңдап тороуын нисек аңларға?

— Йә, шунан, ҡустым, һөйлә хәлдәреңде! — тип өндәште Рәзим, Фәһимде хәҙер үҙенең, элекке Фәһимдең бүлмәһендәге диванда эргәһенә йәнәш ултыртып.

Унының бариндарсараҡ мөнәсәбәтенән бер аҙ баҙап ҡалған Фәһим үҙен инде ҡулға алғайны.

— Шунан, нисек, оҡшаймы минең бүлмә? — тип һорауға һорау менән яуап бирҙе ул, әгәр ҙә ярты сәғәтлек ағаһының һәр һорауына малайҙарса яуап биреп ултырһа, үҙен бик түбән ҡуясағын самалап.

— Шәп бүлмә, әлбиттә! — тип ҡәнәғәт көлдө Рәзим. — Ләкин ул хәҙер минеке!

— Күрәм. — Был ҡәнәғәтлектән Фәһимдең күңеленә аңлайышһыҙ һалҡынлыҡ йүгерҙе. Шулай ҙа ул ҡабаланып өҫтәне. — Ҡире тартып алырға аҙаплана тип уйлама. Барыбер түгелме ни? Бер өйҙә бит йәшәргә. Етмәһә, туғандарбыҙ. Әгәр ҙә әле залда йәшәп тә, мин ҡайтыу менән ошо хаҡта һүҙ ҡуҙғатһаң да, һис ниндәй ҡаршылығым булмаҫ ине. Һиңә бында оҡшағанға мин ҡыуанам ғына.

Рәзим ҡысҡырып көлдө.

— Әлбиттә, ҡустым! Һиңә әҙерәк саҡ ҡына теләктәреңде самалағанда ла мишайтламаҫ ине. Нисәмә йыл балда-майҙа йөҙөп, рәхәтләнеп донъяның артына тибеп йәшәгәнһең, ә мин тегендә...

Фәһимдең йөҙөндәге йылмайыу юҡҡа сыҡты. Ул эргәһендә ултырып, көр тауыш менән гөрөлдәп һөйләнгән Рәзимгә ҡараны.

— Рәзим! Әйҙә, килешәйек. Тыңла һәм бүлдермәҫкә тырыш. Мин һинең табылғаныңа, улай ғына ла түгел, беҙҙе үҙең килеп табыуыңа бик шатланам. Ысынлап әйтәм. Һин нисек бар, мин быны шул килеш ҡабул итергә әҙер. Башҡалар өсөн яуап бирә алмайым. Ләкин беҙҙең ғаиләлә йылдар буйына гәзел һаҡланып килгән ғөрөф-ғәҙәттәр бар. Уртаҡ тел табып, матур итеп йәшәргә уйың булһа, шуларға иғтибар итһәң ине. Шуларҙың тәүгеһе — үҙеңдән өлкәнерәктәрҙе ихтирам итеү.Икенсеһе — кеселәргә кеселекле булыу. Ә бына мин тегеһенә лә, быныһына ла ҡарамайым. Шуға минут һайын “ҡустым” тигәнсе исемем менән генә өндәш. Урынлыраҡ булыр. Килештекме?

Рәзим йәнә бүлмә тултырып һаһылдап көлдө.

— Ныу, ҡустым... әй... Фәһим... һуҡтың хәбәрҙе! Зерә лә тел бисҭәләре әҙерләй торған факультетта уҡымайһың икән дә!.. Әлбиттә, үтәйбеҙ беҙ уны! Моңмо ни ул беҙгә, ҡустым... әй, Фәһим, — тип зыуылданы ул, ҡапыл илгәҙәккә әйләнеп. Ә уйҙары бөтөнләй икенсе йүнәлештә тәгәрәне.

“Оҡшамай инде һиңә, ә?.. Ярай, барыбер бөгөрбөҙ һине... Йылан арбауына эләккән ҡуян кеүек ҡалтыранып торасаҡһың ҡаршымда...”

Ишек ҡырыйында Рәхиләнең ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына ҡараған йөҙө күренде.

— Фәһим балам! Рәзим улым... — Унан әбей ниңәлер йәһәтләп, — Рәзим балам, — тип төҙәтте. — Әйҙәгеҙ. Килен өҫтәл әҙерләгән. Тамағығыҙ ҙа сарсап

киткәндер. — Ул ейәндәренең һүҙен бүлдергәнгә үҙен ғәйепле һанағандай, ауыр ҡуҙғалып аш бүлмәһе яғына йүнәлде.

— Әйҙә, ҡустым! Лирочка көтә беҙҙе! — тип йәнә һаһылданы Рәзим, бер биш минут элек йөҙөндә хасил булған мөләйемлелекте бөтөнләй онотоп. — Ух, малай, нисегерәк телеңде йоторлоҡ итеп әҙерләй! Бисә түгел, ә хазина! Ҡашыҡҡа һал да йот инде бына. Күҙгә лә инеп килә ишшеү! — Рәзим йәнә үҙен ҡулға алды, Фәһимдең аптыраған йөҙөн күрҙе, ахыры. — Илсура ағайымды әйтәм, маладис. Еңгәне һайлай белгән...

Фәһим уның һүҙҙәренән дә бигерәк өләсәһенең әллә ниндәй баҙнатһыҙ, ҡурҡаҡ йән эйәһенә оҡшап ҡалыуына аптырап ултыра ине. Һуңғы арала ишелгән ҡайғы-хәсрәт бөккәнме уны? Ләкин был тиклем үк... Шуға күрә лә ул Рәзимдең "Лирочка" тураһында тағы ла ниҙәр татылдағанын тыңлап торманы, туғаны эргәһендә әҙәп һаҡлап та маташманы, әле күргән һәм үҙен шомландырған күренештән йөрәге һыҙлап, өләсәһе эргәһенә ашыҡты.

— Өләсәкәйем, эй һағындым һинең тәмле бәлештәреңде! — тип аш бүлмәһендә нимәлер эшләп маташҡан Рәхиләне барып яурынынан ҡосаҡланы. Быны күреп сырайы һытылған Рәзимгә лә, туғаны менән еңгәһенең бер-береһенә мәғәнәле ҡараш ташлап алыуҙарына ла иғтибар итмәне. Рәхилә шатланып китте.

— Эй, улыҡайым... Миңә ни, ҡарт кешегә, бер йылы һүҙ ҙә етә.

— Улай тимә, өләсәкәйем... Һине түр башында ғына ултыртып, йылы һүҙҙәрҙең береһен дә йәлләмәйбеҙ.

— Әбейҙәргә лә бит нимәгәлер ҡыуанырға кәрәк, — тип һүҙ ҡыҫтырҙы Рәзим.

— Эйе, ҡәйнәкәйем, — тип өтәләнеп китте Лира ла. — Юҡҡа аяҡһып йөрөмәсе. Ошонда ғына ултырып тор. Сәйҙе лә үҙем яһармын.

— Йә, — тигән булды Рәхилә, күрәһең, был хәстәрлектәрҙә ниндәйҙер яһалмалылыҡ тойоп.

Фәһим күңелһеҙ һығымталарынан арыныу өсөн өләсәһенә өндәште.

— Өләсәй, ә олатайым ҡайҙа һуң? Илсура ағайым да күренмәй.

— Эй-й, ҡуй инде, балам. — Рәхиләнең йөҙөнә инде ысын хәсрәт һыҙаттары ятты. — Әллә ниндәй йыл булды быйыл. Әсәйең үлеп китте... Уның хәсрәтенән саҡ айныҡып килә инек, хәҙер быныһы...

Фәһимдең йөрәге "жыу" итеп китте.

— Нимә булды? Өләсәй, нимә булды? Ниңә башта уҡ әйтмәнегеҙ?

Рәхилә яулығының осо менән күҙҙәрен һыпырып алды. Фәһимдең ысынлап ҡурҡҡанлығын күргәс, уйламай ысҡындырғаны өсөн үкенгәндәй итте.

— Юҡ, балам, ҡотоң осмаһын. Улай уҡ ҙур бәлә-ҡаза түгел дә... Барыбер бер йөрәккә бит... өйөлә әкренләп... Рәхимйән менән Йыһангир ағайҙарың низағлашып китте бит.

— Нисек? — Фәһим көтөлмәгән хәбәргә аптырап, ашай башлаған ризығын да сәйнәргә онотоп, берсә өләсәһенә, берсә еңгәһе менән туғанына ҡараны. — Ҡит, булмаҫты! Элек-электән уларҙан да татыу ағай-эне бөтә Иҫәнсурала юҡ ине бит. Нимәне бүлә алмағандар һуң?

— Әллә инде, улым, белмәйем бер ҙә генә. Көн дә янъял, көн дә тауыш. Инде күршеләр алдында оят. Йыһангир һәүетемсә хәл итергә тырыша ла бит, Рәхимйәнде һәр көн иртән эт талап уята, тиерһең... Хәҙер инде кешенән дә оялмай, иртә һайын килеп Йыһангир ағайыңдарҙа тауышлана ла йөрөй. Аҡылға килерме тип көтөңкөрәп тә ҡарағайныҡ, юҡ бит, булмай, оторо насарая аралары. Нимә менән бөтөр инде...

— Ә тауыш, тим, нимәнән сыҡҡан һуң? — тып ҡыҙыҡһынды Фәһим, үҙенсә бер фекер төйнәп.

— Белмәйем, балам. Рәхимйән ағайың Йыһангирҙе бурлыҡта ғәйепләй. Ул аҡсаны кире ҡайтарам ти ҙә бит, юҡ, теге тиҫкәре ыңғайға килмәй.

— Дә-ә, — тип һуҙҙы Фәһим.

— Шулай, улым. Һуңғы арала гелән кире яҡтан иҫә башланы ел. Хәйерлегә булһын.

Ҡасандыр нур балҡып торған, йәшәү шатлығы урғылған йорттарының ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ошо рәүешкә ингәненә шаңҡыған Фәһим бер килке бер һүҙ ҙә өндәшмәй ултырҙы. Ул үҙенсә фекер төйнәй ине. Быларҙан төпсөнөүҙән хәҙер фәтеүә юҡ. Өләсәһенән башҡаса һорағыһы килмәй. Былай ҙа бошаланып ултырған оло кешенең яраһын ҡуҙғатыуҙан мәғәнә сыҡмаҫ. Рәзим менән Лира еңгәһенең, ғөмүмән, бер кемдә лә эштәре юҡҡа оҡшаған. Ана бит, еңгәһе Айраттың юҡлығына ла иғтибар итмәне. Уларҙың үҙ-ара йылмайышып ултырыуҙарында әлегәсә затнәҫелдә булмаған инабатһыҙлыҡты аңғарып, Фәһимдең күңеле болоҡһоно. Бөтәһе алдында ла шулай ҡыланамы былар, әллә уны һынап маташыуҙарымы? Һәм ни өсөн? Бына шуныһы аңлашылмай ине.

Ләкин төп мәсьәлә әлегә был түгел. Олатаһы менән Илсура ағаһы өйҙә булмағас, өләсәһе әйткән әлеге янъялды рәтләргә тырышып йөрөүҙәрелер. Туғанлыҡ ептәре өҙөлөп тора ине, ни бит ҡулы һыҙлай. Һәм йортҡа көтөлмәгәндә килгән бәләне лә бергә күтәрергә тейештәр. Әлегә уның урыны — ағайҙары янында. Бәлә-ҡаза бит бүлешкәндә еңелерәк күтәрелә. Тимәк, Фәһим дә ағайҙарына ошо янъял-низағты иҫән-имен үткәреп ебәрергә ярҙам итергә тейеш. Бөтөнләй аңһыҙ түгелдәр бит, аңлашырҙар. Икеһен дә ихтирам иткән һәм яратҡан өсөнсө яҡтың килеп инбашын ҡуйыуы насармы ни?

Фәһим урынынан ҡуҙғалды.

— Өләсәй, мин йөрөштөрөп киләм, — тине ул, Рәхиләгә ҡарап.

— Ярай, ярай, улым. — Рәхилә ауыр ҡуҙғалып урынынан ҡалҡынды.

Фәһим башҡа бер һүҙ ҙә өндәшмәй ишеккә йүнәлде. Уның юл сумкаһы ғына ҡайҙа инеп урынлашырға белмәгәндәй, ишек төбөндә ултырып ҡалды.

* * *

— Ниндәй бурлыҡта һине ғәйепләй һуң Рәхимйән? Ниңә асыҡлап әйтмәйһең? Бына, мәҫәлән, минең дә бик беләһем килә.

— Әйтә алмайым, атай. Һүҙ биргәнмен.

— Бына һиңә кәрәк булһа! — Рыҫҡужа бот сапты. Үҙенә хас булмағанса хатта урынынан тороп китте. — Һүҙ биргән берәү! Кемгә бирҙең ул ҡәҙерле һүҙеңде?

— Әйтмәйем, тинем бит.

Йәнә шымып ҡалдылар. Фәһимдең Йыһангир ағаһы йортона олатаһы һәм ағалары эргәһенә кергәненә ярты сәғәттәй ваҡыт үткәндер. Барыһы ла бындалар. Рәхимйәндән башҡа.

— Алғас, шуны ҡайтарырға мөмкинлегең юҡмы әллә, ағай? — тип баҙнатһыҙ ғына һораны Фәһим.

— Бик булмаһа, мин биреп торайым. — Илсура бының ниңә элегерәк башына килмәүенә ғәжәпләнеп, йәнләнеп ағаһына ҡараны. — Табырмын, ағай. Янъял, ысынлап та, бигерәк йәмһеҙгә әйләнеп бара бит. Иртән булһа, әсәй тәҙрәнән күҙен алмай башлай. Күршеләренән уңайһыҙлана. Низағлашыу былай ҙа һәйбәт түгел инде ул.

— Уныһы шулай ҙа... — Йыһангир көрһөндө. — Эш хәҙер аҡсала ла түгел шул.

— Ә ниҙә һуң? — тине Рыҫҡужа, аптырап.

Әйтергәме-юҡмы тигәндәй бер аҙ икеләнеп ултырғандан һуң, Йыһангир артабан да тураһын әйтмәй һуҙып ултырыуҙың мәғәнәһеҙлеген аңланы.

— Рәхимйәнгә инде аҡса кәрәкмәй, — тине ул атаһына ҡарап. — Уға минең хужалыҡты тулыһынса уның ҡулына тапшырыуым мөһим хәҙер.

Ирҙәр бер-береһенә ҡарашты.

— Нисек, улым, аңламайым... ул һине ҡыуамы ни?

— Ағай, көтөп тор, аңлатыбыраҡ әйт... Ә һин ҡайҙа китергә тейешһең? Бергәләп төҙөгән уртаҡ донъяғыҙ ҙа баһа! Күпме көс түккәндән һуңмы?

— Уны, Илсура, бар, һин Рәхимйән ағайыңа аңлатып ҡара. — Йыһангир әсе көлөмһөрәне. — Хәҙер ул бөтөнләй ишетергә лә теләмәй, әйтерһең дә, ғүмер баҡый иңгә-иң терәшеп, иң ауыр мәлдәрҙе бергә үткәрмәгәнбеҙ.

Рыҫҡужа оло улы әйткәнде ысынға алырға ла, алмаҫҡа ла белә алмай аптырап ултыра ине. Ышанырғамы ошо хәбәргә, әллә юҡмы? Бәлки, Йыһангир асыуы ҡабарғанға ла бер аҙ шыттыралыр? Бынан һуң кем Рыҫҡужа был ер йөҙөндә? Ғүмер баҡый нәҫел-ырыуым, ғаиләм өсөн көсөмдө лә, ваҡытымды ла йәлләмәнем, тип ғорурланды. Бер-береһе өсөн утҡа ла инергә әҙер өрлөктәй улдар үҫтерҙем, тип ҡыуанды. Уларға тейешле тәрбиә бирҙем, тип һөйөндө. Ейән-ейәнсәрҙәремде үҙ ҡанатым аҫтына алдым, тип шатланды.

Һәм былар барыһы ла — буш ҡыуыҡ? Атаһының маңлайындағы йыйырсыҡтарҙың тәрәнәйеүен, йөҙөндәге әлегәсә һаҡланып килгән нурҙың һүнеүен күреп, Йыһангир ҡабаланып өҫтәне.

— Атай, һин күңелеңә ул тиклем ауыр алма. Үҙем дә был хаҡта күптәнән бирле уйлап йөрөй инем. Уның бит белеме лә тап ана шул ауыл хужалығы буйынса... Ниңә... эшләп ҡараһын. Өйрәнгән бит инде. Тәжрибәне лә етерлек тупланыҡ. Белеп етмәһә, үҙем дә ситтән тороп ярҙам итермен.

— Ә һин ни эшләргә уйлайһың? — тип тупаҫ ҡына тауыш менән һораны Рыҫҡужа.

Атаһының тауышында улар өйрәнгән йылылыҡтың, үҙ итеүҙең эҙе лә ҡалмауын һиҙгән Йыһангир Илсураға күҙ һирпеп алды.

— Уның өсөн борсолма, атай. Мәктәпкә булһа ла барырмын, — тип өҫтәне ышаныслы тауыш менән.

— Мәйелең, — тине Рыҫҡужа һалҡын ғына. — Ярай, уйлашырбыҙ. Әллә ниңә башым шаулап китте... Мин ҡуҙғалайым бик булмаһа. — Рыҫҡужа урынынан ҡалҡынды һәм сығырға йүнәлде. Ишеккә етәрәк туҡтап, әле урындарынан ҡуҙғалмаған улдарына һынаусан ҡараш ташланы. — Әлегә һүҙ бөтмәгән. Иртәгә барыһын да уртаға һалып һөйләшербеҙ. Был хәлдән сығыу юлдары хаҡында уйлаша торорғоҙ.

Ишек ябылды. Атаһынан һирпелгән һалҡынлыҡтан баҙап ҡалған Илсура ла бер аҙҙан урынынан ҡалҡынды.

— Мин дә ҡуҙғалайым инде, ағай, — тине ул ниңәлер ситкә ҡарап. Унан, күрәһең, улы иҫенә төштө. — Айрат, әйҙә!

Атаһынан башҡа урынынан ҡымшанырға ла иҫәбе булмаған малай шунда уҡ йүгереп килеп етте, ескәй ҡулы менән уның устарына йәбеште. Шулай итеп аталы-уллы етәкләшеп урамға сығып киттеләр. Мәгәр Айрат ҡына ишектән юғалғансы Фәһим ағаһына боролоп ҡарай-ҡарай атланы. Уның ни эшләп ҡаҙаҡланған шикелле ултырыуының сәбәбен аңларға маташты, ахыры. Ә Фәһимдең иһә тиҙ генә китергә иҫәбе юҡ ине.

— Йә, ағай, — тине ул тегеләр артынан ишек ябылыу менән. — Хәҙер инде миңә әйт. Элек бер ҙә йәшермәй торғайның.

Ағаһы һин кем әле ул тиклем тигән һымағыраҡ ҡарап ҡуйҙы. Фәһим был мәғәнәне аңлаһа ла, шылт та итмәне.

— Ағай, йәшермә... Бәлки, ярҙамым тейер.

— Ни рәүешле? — Йыһангирҙең тауышында саҡ ҡына мыҫҡыл һиҙелеп ҡалды. Үҙе лә һиҙҙе, ахыры, тауышы йомшара төштө. — Күкрәгеңде амбразураға ҡуйырға итәһеңме әллә, ҡустым? Һуғыш ваҡыты түгел бит әле. Мин Рәхимйәнгә иртәгә бөтә документтарҙы тапшырырмындыр ахыры, туғаным. Бигерәк йәмһеҙгә олғашты бит, — тип көрһөндө Йыһангир.

— Һине шулай сығарып ырғытҡанын күмәкләп ҡарап торайыҡмы инде?

— Үҙ теләгем менән баш тарттым, тип иҫәпләрбеҙ, — тип ҡуйҙы Йыһангир, ике ҡулын ике яҡҡа йәйеп.

— Туҡтап тор әле, ағай. — Фәһим бая уҡ башына килгән фекерҙе нисегерәк үтемле итеп еткереү хаҡында уйлап алды. — Әйҙә, былай итәйек... Күпме аҡса ул? Ҡуләмен әйтәм.

— Йөҙ илле мең, — тине Йыһангир теләр-теләмәҫ кенә. Ошо сумманы банктан алған мәлдә үҙе сумған яҡты уйҙарын хәтерләп, сырайы һытылды.

— О-һо! Нимәгә кәрәк булды тип инде һорап та тормайым, ағай, уныһы һинең эш. Тыңла әле мине, бәлки, был тәҡдимем Рәхимйән ағайҙы бер аҙ һыуындырыр. Унан, бер аҙ уйланһа, төптө юҡҡа ғауға ҡуптарып йөрөгәненә лә, бәлки, ояла төшөр.

Йыһангирҙең йөҙөндә ҡыҙыҡһыныу күренде, әлегә саҡлы бала-саға һымағыраҡ күренгән ҡустыһының ғүмерҙә булмағанса етди ҡиәфәтен күреп, хатта һағая төштө.

— Йә?

— Мин шулай уйлайым, ағай. Әгәр ҙә... ул аҡсаларҙы... мәҫәлән, минең өсөн алдыҡ, тиһәк... Уҡыуҙа ниндәйҙер проблема булып киткән дә шулай тура килде, тиербеҙ. Үткәндә һин Өфөгә лә килеп киткәнһең дә инде. Күрешмәнек, әлбиттә... Беҙҙең дәрес ваҡыты ине бит... Ләкин Рәхимйән ағай уныһын уҡ тикшереп йөрөмәҫ бит инде.

Йыһангир уйға ҡалды.

— Әлләсе, килешерме икән? Унан һиңә ябырылһа? Ул хәҙер элекке Рәхимйән түгел, ағайыңдың күҙе тонған.

Фәһим, ағаһының ыңғайға килә биреүен күреп, һөйөнөп китте.

— Әйҙә, ағай, ризалаш. Бынан да ҡулай һылтау ҙа, сәбәп тә таба алмаясаҡбыҙ. Рәхимйән ағай миңә һәйбәт мөнәсәбәттә лә инде, моғайын, йөҙ йыртып тормаҫ.

— Белмәйем шул, ҡустым. Уйлашырбыҙ.

— Бик булмаһа, үҙем әйтермен. Элек минең һүҙгә ҡолаҡ һала торғайны.

Йыһангир ниңәлер сырайын һытып ҡуйҙы.

— Ул элек ине шул.

— Башы, моғайын, шул уҡтыр әле.

Ағаһы өндәшмәне. Унан ҡапыл бер ҡарарға килгән ҡиәфәттә Фәһимгә күтәрелеп ҡарап ҡуйҙы.

— Ни, ҡустым... — тине ул ниңәлер тотлоғоборaҡ. — Әйтһәм әйтәйем инде... Барыбер дөрөҫлөккә бер аҙ яҡын килдек һымаҡ. Мин ул аҡсаларҙы... Рәзим ҡусты өсөн алғайным.

— Нисек? — Көтөлмәгән был хәбәрҙән Фәһим аптырап китте, ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәй, ағаһына текәлде. Юҡ, шаяртҡанға оҡшамаған.

— Шулай тура килде, — тигән булды Йыһангир ғәйепле ҡиәфәттә. — Ул уҡырға урынлаштырыуымды һорағайны... Өфөгә лә бит... шуның өсөн барып йөрөнөм...

— Нисек һуң, килеп сыҡтымы?

— Әлбиттә! — Йыһангирҙең һөрөм баҫҡан йөҙө бер мәлгә генә яҡтырып алды. — Урынлаштырҙым ҡустыны уҡыуға. Һәм ниндәйенә әле! Үҙебеҙҙең фермер хужалығына самый кәрәк һөнәргә!

— Ҡайһы уҡыу йорто һуң? — тип ҡыҙыҡһынды көтөлмәгән хәбәрҙе һаман да ысынға ала алмай ултырған Фәһим.

— Автотранспортныйға! — тип Йыһангир малайҙарса ғорурлыҡ менән яуап бирҙе. — Әйтәм бит беҙҙең хужалыҡҡа бик кәрәкле белгеслек был.

“Шуның өсөн дә ул “беҙҙең хужалыҡ” тигәненән хәҙер ҡолаҡ ҡағырға тура киләсәкме инде? Их, ағай...” — тип эстән генә уйлап алды Фәһим.

— Ә ниңә һуң Рәхимйән ағайға был хаҡта әйтмәнең? Был да уның файҙаһына ла баһа? — тип аптыраны егет.

— Әллә нисек... ҡыйынһындыҡ шул... — тип йәнә тотлоҡто ағаһы. — Дөрөҫөрәге, Рәзим һорағайны. Рәхимйән ағай ҙа, Зәмзәгөл еңгә лә мине яратып бөтмәйҙәр, дөрөҫ аңламаҫтар, тигәс... Нисек итеп шул етемдең һүҙен йығаһың, — тип аҡланды Йыһангир.

— Дә-ә, — тип һуҙҙы Фәһим. Күҙ алдына игеҙ туғанының диванда хужаларса ирәйеп ултырыуы, еңгәһе менән бер-береһенә күҙ атышыуҙары килде. Һәм бына килеп...

— Ағай, ә һин уға ышанаһыңмы? — тип, ахырҙа, һаҡ ҡына үҙ шиген белдерҙе ул.

— Нисек инде? — тип аптыраны Йыһангир. — Һуң, ул да минең ҡусты ла баһа! Беҙ ярҙам итмәһәк, кемгә һуң ул барып морон төртә ала? Япа-яңғыҙ бит ул был донъяла! Юҡ, ҡустым, улай тимә... Әсәйегеҙҙең рухы алдында оятлы булырбыҙ, — тип теҙҙе ул көр тауыш менән.

— Мин дә шулай уйлайым да ул, — тип ышаныслыҙ тауыш менән ағаһын йөпләгән булды Фәһим. — Тик...

— Нимә тик...

— Әллә нисек күренде ул миңә...

— Оҡшаманымы ни?

— Юҡ та... Лира еңгәм менән дә уртаҡ тел тапҡандар, ахыры? — Фәһим ағаһына һынап ҡараны.

Йыһангир киң йөҙөнә балаларса йылмайыу йәйеп, ихласлап яуап бирҙе.

— Маладис егет ул. Барыһы менән дә уртаҡ тел таба белә. Үҙе килеп тороп илгәҙәк. Зөһрә еңгәң генә унда һуңғы арала әллә ниндәй аҫтыртынлыҡ соҡоп сығарған. Зәмзәгөл еңгәң дә, ысынлап та, яратмаҫ булып киткән... Шуның өҫтәүенә нисек итеп ысын сәбәбен әйтеп тораһың инде, ҡустым, ә? Терелдәй ашаясаҡтар бит егетте. Ә уның, әйтәм бит, башҡа ышаныр кешеһе юҡ. Ә Лира килен башҡа апһындары шикелле йөҙ сырылдырып тормай, ҡәйнешенә яҡты йөҙ күрһәтә. Күңеле киң икән килендең. Ҡала ҡыҙымын тип үҙен бик эре тоталыр тиһәм, юҡсы, етем бала-сағаны йәлләй белә икән, — тип кесе киленен маҡтап бөтә алманы Йыһангир.

"Яңылыштым, ахыры", — тигән уй йүгерҙе Фәһимдең башынан. Ярай ҙа, шиген тура әйтеп ысҡындырманы. Шунан был оятты ғүмер буйына ла йыуып бөтөрә алмаҫһың.

Олатаһы йортона ҡайтҡас, уның был уйы тағы ла нығынды. Еңгәһе Айрат туғаны менән мәж килә, ара-тирә Илсураға ла матур итеп ҡарап ала. Ә Рәзимдең иһә уларҙа бөтөнләй эше юҡ. Былай ҙа тап-таҙа ишек алдын тырыша-тырыша һепереп йөрөй. Башында игеҙ туғаны хаҡында бер мәлгә генә насар уйҙар тыуғанына үҙен ниңәлер ғәйепле һанаған Фәһим уға хатта ярҙамлашырға булып китте. Икәүләп ихатаны йәһәт кенә таҙартып ҡуйҙылар.

Ләкин Рыҫҡужа менән Рәхиләнең йөҙөндәге болот ҡына таралманы.

* * *

— Инде һин миңә аҡыл һатырға килдеңме ни? — тип Фәһимде Рәхимйән ағаһы ҡырыҫ ҡына ҡаршыланы. — Бала-сағаның етлекмәгән аҡылына һис тә хәжәтем юҡ, ундай уй менән йөрөһәң, ҡустым, бар, ана, юлыңда бул.

— Ҡеше кереп өлгөрмәгән, эт шикелле абалай ҙа башланың. — Зәмзәгөл иренә асыулы ҡараш атты, унан ошо ғәйепте юйырға маташҡандай, ҡәйнешенә ҡарап йылмайған булды. Ләкин уның йылмайыуы әллә нисек яһалма килеп сыҡты. — Әйҙә, әйҙә, ҡәйнеш. Үт түргә. Бына йәшәп ятабыҙ әле абалашып. Нисек ҡайтып еттең?

— Арыумы, ағай? Һаумы, еңгә? — тип улар менән күрешеп сыҡты Фәһим. Ағаһының тупаҫыраҡ ҡыланышына үҙен эстән әҙерләберәк килһә лә, был тиклемде ул барыбер ҙә көтмәй ине.

Рәхимйәндең иһә бисәһенең мыжыуына һис тә иҫе китмәне. Күрәһең, тәүләп кенә һүҙгә килешмәйҙәрҙер. Сөнки әҙәм балаһы ығы-зығы араһында оҙаҡ тереклек

итһә, был уға йәшәү рәүеше шикелле тойола башлай, хатта ҡайҙалыр тыныс һәм һил тормоштоң барлығын да онота төшә бит.

— Һин, бисә, телеңә һалышма. Үҙеңә һүҙ биргәс, һөйләрһең.

— Һинең һүҙ биргәнеңде көтөп ултырһаң, ярыҡ ялғашҡа ҡапланаһы ғына ҡала инде.

— Етер, тинем!

Зәмзәгөл өндәшмәне. Рәхимйәнгә яман итеп ҡарап алды ла күршеләге бүлмәгә инеп китте.

Фәһим шунда торған ултырғысҡа ултырҙы. Рәхимйән ишек төбөндә табуретты әйләндереп һалып, ыхылдай-пыхылдай ҡайыш үреп маташа. Егет ҡыҙыҡһынып бер аҙ ваҡыт ағаһының шөғөлөн ҡарап ултырҙы. Рәхимйән маңлайынан аҡҡан тирен еңе менән һөртөп ала ла артабан дауам итә. Ҡайыш өбөрһәләренең маңлайына, битенә йәбешеүенә лә иғтибар итмәй.

— Нимә эшләйһең?

— Күрмәйһеңме ни? — Рәхимйән “һеҙҙең берегеҙҙе лә мәңге кисерәсәгем юҡ” тигән ҡиәфәттә ултырһа ла, тауышы йомшарыбыраҡ сыҡты. “Әһә! — тип уйлап алды Фәһим, эстән генә ҡыуанып. — Был сер бирмәҫкә, үҙенең дә мөһим ҡарарҙар ҡабул итергә хоҡуғы барлығын иҫбатларға маташалыр. Уның менән килешмәй эшләгәнгә лә асыуы килеп, ғауғаны ҙурға олғаштырған. Ә хәҙер сигенеүе ауыр. Ана, һин барыбер шул бер Рәхимйән инде, тип көлөрҙәр тип ҡурҡа. Ә үҙенең дә бит әҙәмсә аралашаһы килә...”

— Күрәм дә... Быңдай әйберҙәр бит хәҙер аҙым һайын... һәр хужалыҡ магазинында һатыла, — тип ашығып төҙәтте Фәһим, ағаһы йәнә үҙенсә аңлап ҡуймаһын тип.

— Ҡрәҫтиән ғәҙәте инде. Унан һәр бер бау өсөн дә ҡалаға саба башлаһаң, юл расходың әлеге шул көнө-төнө бөксәндәп йөрөп тапҡан малыңдан артығыраҡ буласаҡ.

— Уныһы шулай инде, — тип килеште Фәһим.

— Йә, шунан, үҙең ниндәй эштәр бөтөрәһең? — тип ул эш араһында Фәһимгә күҙ һирпеп алды.

Ағаһының тауышы һәүетемсәгә әйләнеүенән эсенә йылы йүгергән егет урындығына иркенләберәк урынлашты. Юғиһә һаман да тырҫ та бырҫ торһа, көсләшеп ултыра алмай ине бит инде. Әле дауыл саҡ ҡына баҫылған һымағыраҡ.

— Былай сыҙарлыҡ... Хәҙер инде сыҙарлыҡ, — тип ашығып төҙәтте ул.

— Нимә булды һуң? — Рәхимйәндең күҙендә ҡыҙыҡһыныу сағыла биреп ҡалды.

— Эй, булды инде шунда. — Фәһим ҡул һелтәне. — Күрәһең, мәшәҡәтһеҙ булмайҙыр инде ул.

— Йә, йә! Әйтеп бөтөр. Һиндә лә ул мәшәҡәт тигән нәмәкәй булғылаймы ни ул? — тип әүәлгесә эсе телләнеп төрттөрҙө Рәхимйән. — Ул уйын-көлкөнө ҡайҙан соҡоп сығараһыңдыр — быны шуныһын ғына аңламайым.

— Эй, ағай, күрмәгәнде күрһәттеләр. Ҡаныҡты бит бер әрәм тамаҡ. Юҡ ҡына сәбәп тапҡан булып ришүәт таптыра башланы. Улайһа йәйге сессияға тиклем дә барып етмәйәсәкһең, ти...

— Ҡитсе, булмаҫты! — Рәхимйән ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәне. — Семестр уртаһында ниндәй бәйләнеү, ти? Имтихандар мәле түгел дә һуң.

— Ҡышҡы сессиянан ҡалғайны шул, — тип өҫтәне Фәһим, күҙен дә йоммай.

— Ҡит, ҡустым, һин шулай елғыуармы ни ул? — Ағаһы ысынлап тороп аптыраны.

Йөҙөнә тимгел-тимгел ҡыҙыллыҡ бәреп сыҡҡан Фәһим аҡланған булды.

— Шулай тура килде инде, ағай. Әйтәм бит, доцент менән килешә алманыҡ. Тәүҙән үк миңә кире мөнәсәбәттә ине ул. Әле килеп... май байрамына тиклем хәл

итмәһәң, университеттан ҡыуыу хаҡында приказ була тигәс... Уҡып бөтәһе килә бит, ағай... Аптырағандан Йыһангир ағайға шылтыраттым. — Унан ҡапыл ҡабаланып, — Һинеке гелән һүндереүле тора ине... кеҫә телефонынды әйтәм, — тип өҫтәне.

— Тәйән маҙаһыҙлаһалар, ҡайһы берҙә һүндергеләйем шул, — тигән булды Рәхимйән. Ул инде ҡайышын бөтөнләй үк ситкә һалып ҡуйғайны. Күҙҙәре лә сәйер генә ялтырай. — Йә, йә...

Ағаһының быраулаусы ҡарашы аҫтында йылан быуған ҡуяндай тегендә-бында борғоланған Фәһим, ниһайәт, тәүәккәлләне.

— Ағайҙы әйтәм... Йыһангир ағай... Ярай ҙа шунда уҡ минең эргәгә килеп етте... Өфөгә, тием... унан хәл иттек инде... Теге ҡомһоҙҙоң телефонын бирҙем дә... Нисек килешкәндәрҙер... Ул Аллаһыҙ бәндә бик күп һорай, тип ишеткәйнем... Йыһангир ағайҙан һорағайным да ул... ҡул ғына һелтәне. Күп булғандыр, ахыры, юғиһә әйтер ине... — Фәһим шыбыр тиргә батты. Ҡайһылыр бер мәл Зәмзәгөл еңгәһененң дә күрше бүлмә ишегенең яңағына һөйәлеп, уларҙы тыңлап торғанын күрә биреп ҡалды.

Әйҙә, теләһә нәмә уйлаһындар! Сигенергә инде һуң. Тик күңелендә яралған еңеллек хисе бер аҙҙан әлегәсә таныш булмаған керләнеү тойғоһо менән аралашты, һәм һуңғыһы күмеп тә киткән кеүек булды.

Рәхимйән ағаһы уйға ҡалып ултыра. Йыһангирҙең унан һорап та тормайынса быңдай аҙымға барыуынан да бигерәк әлегәсә аҡыллы тип һанап йөрөгән Фәһим ҡустыһының шундай низағтың сәбәпсеһе булыуы аптыратты шикелле уны. Ана бит, хатта йөҙөндәге күңел ҡайтыу ишаратын да йәшерә алмай ултыра.

— Һы... ҡустым... Кемдән-кемдән, ләкин һинән мин быны көтмәгәйнем.

— Ғәйеп миндә шул, ағай... — Фәһим башын эйҙе.

— Ярай, ҡустым, бар, юлыңда бул! — Рәхимйән инде туғанына күтәрелеп тә ҡарамай, тупаҫ ҡына итеп өндәште лә иҙәнгә ишелеп төшкән ҡайышына йәнә үрелде. Бар булған ҡиәфәте әңгәмәне артабан дауам итергә һис кенә лә теләге булмағанлығын күрһәтә. Фәһим ултырғыстан торҙо. Исмаһам, Зәмзәгөл еңгәм берәй йылы һүҙ әйтмәҫме икән, тигән шикелле, әле генә еңгәһе күренә биреп торған ишек яғына күҙ атты. Ләкин унда бер кем дә юҡ ине инде. Егеткә сығып китеүҙән башҡа әмәл ҡалманы. Уның артынан ишек ябылырға ла өлгөрмәне, ҡәйнешенең китеүен көтөп саҡ сыҙап торған Зәмзәгөл сәсрәп килеп сыҡты.

— Елғыуар! Эшкинмәгән! — тип теҙҙе ул, күҙендә уҫал уттар уйнатып. — Етем быҙау аҫраһаң, ауыҙың-мороноң май булыр, етем бала аҫраһаң, ауыҙың-мороноң ҡан булыр. Бик белеп әйткәндәр! Етемәк! Аҙғын! Әпелдәтеп тә йөпөлдәтеп кенә торғас ни, ана бит, хәҙер бөтәһенә лә төкөрөп ҡарай. Сәсрәп китмәйҙәрме икән! Йөҙ илле мең! Сәсе менән ер һеперә булһа ла түләһен! Көнө-төнө һин бында тегендә сабаһың да бында йүгерәһең, ә ул унда тырай тибә! Әҙергә хәҙер булып, атайһыҙ-әсәйһеҙ килеш уҡып йөрөгәне етмәгән... беҙҙең аҡсаны ла инде уңлы-һуллы туҙҙыра башланы!

— Дә-ә, көтмәгәйнем мин унан...

— Шуныһына асыуым килә, — тип иренә яҡыныраҡ шыуып ултырҙы Зәмзәгөл. Юғиһә йорт эсендәге талаштан икеһе лә ялҡҡайны. Ыҙғыштың сәбәпсеһе табылғас, барыһын да уға ауҙарып, инде ярашырға ла мөмкин дә баһа. — Тимурымдың бит киләсәге лә ошо мөлкәткә бәйле. Инеүен инеп китһә, тырышып-тырмашып булһа ла уҡыр ине әле. Ләкин бер тин аҡсаһыҙ хәҙер нисек итеп баланы уҡырға индерәбеҙ инде? Ҡулыңа мал тотмайса, бар, берәй ергә барып төртөлөп ҡара! Туп шикелле ҡаҡлыҡҡаныңды һиҙмәй ҙә ҡалырһың! Нисек индерәбеҙ хәҙер Тимурҙы уҡырға, ә, Рәхимйән?

— Белмәйем, — тип мөңкөлдәне Рәхимйән танау аҫтынан. Биғәйбә, ул ысынлап та быны юлын белмәй ине.

Зәмзәгөл инде башҡа йәүкелдәмәүҙе хуп күрҙе. Әйтерен әйтте, асыуҙы бер аҙ баҫты — әлегә шуныһы ла етер. Артабан да дауам итһә, янъял инде яңы көс

менән башланасаҡ. Фәһиме килеп йәтеш булды әле — аҙна тигәндә тәүге тапҡыр әҙәмсә һөйләшәләр. Артабан да һуҙыу — инде донъя туҙыу тигән һүҙ. Был инде Рәхимйәнгә лә, Зәмзәгөлгә лә кәрәкмәй. Бынан ары нисек тә булһа йәшәргә лә кәрәк тә баһа.

* * *

Улдары менән кәңәшләшеүҙе Рыҫҡужа үҙенең өйөндә үткәрергә булды.

Йыһангирҙә йыйылмаясаҡтар. Өлкән ул була тороп, кәңәшләшеп эшләй белмәне. Янъялға, низағлашыуға юл ҡуйҙы һәм бының менән үҙенең абруйын аяҡ аҫтына һалып тапаны, дәрәжәһен төшөрҙө. Күмәкләшеп, теҙелешеп Рәхимйәнгә китеп ултырыу — инде бөтөнләй ҙә башҡа һыймаҫлыҡ хәл. Ҡырҡтың өҫтөнә сығып, ҡырылмаһа ҡырҡ яҡта өйөлөп ятҡан эш-көш менән булаһы урынға бисәләрҙән арттырып тәмһеҙләшеп йөрөгән уртансы улына баш һалып бараһы эштәре юҡ. Гәрсә уның дәғүәләре урынлы булған хәлдә лә. Шуға күрә Рыҫҡужа ҡарт иртән тороу менән Айрат аша Йыһангирҙең кесе улы Таһирҙы саҡыртып алды. Алтынсы класты тамамлап килгән йылғыр ғына был малай атаһына һәм Рәхимйән ағаһына ҡарттың әмерен еткерҙе. Таһир килеп иҫкәртеү менән, Рәхимйән инде әсе телләнеп, төрттөрөп алыуҙан да тыйыла алманы.

— Ә, әйҙүк түргә, колхоздың йомошсо малайы килгән дә баһа!

Таһир ағаһына аптырап ҡараны.

— Мин бер ниндәй ҙә йомошсо түгел, олатайым иҫкәртергә ҡушҡанға ғына килдем.

— Бына бит, үҙеңдең вазифаңды ла белмәй йөрөйһөң. Икенсе юлы колхозыбыҙҙың рәйесенән жалыуание һора. Әтеү буштың атаһы үлгән, тиҙәр. Хәйер, банкротҡа һуғылдыҡ бит әле. Банктан аҡса — тү-тү! Осҡан!

Атаһы менән ағаһы араһындағы низағтың ауылдағы иң йолҡош тауыҡҡа тиклем билдәле булыуын белгән Таһир өндәшмәй генә сығырға йүнәлде. Намыҫланыуы ла һиҙелә ине.

— Мә, йомошсо малай, перәник булһа ла бирәйем. Уларҙан хеҙмәт хаҡын барыбер ала алмаҫһың.

— Кәрәкмәй! — Малай ҡырт киҫте. — Үҙемдең өйҙә лә етерлек.

— Һа-һа, ғорур берәү! — Рәхимйән өй яңғыратып көлөп ултырып ҡалды.

Ире менән аралары рәтләнгәнгә күңеле бөтәйеп йөрөгән Зәмзәгөлгә Рәхимйәндең ҡыланышы барыбер оҡшаманы.

— Ниңә бәйләнәһең балаға? Уның ни ғәйебе?

— Үҙҙәре килеп әйтһендәр ине, — тип моңкөлдәне ҡыҙарынып-бүртенеп ултырған Рәхимйән. — Бер малайҙы оҙатҡандар ҙа, имеш, көтөп ултыралар! Күмәкләшеп, ғәфү һорап минең йортҡа килергә тейештәр ине. Атай ҡартлас һаман баринлығын ҡыуа. Колхоз идараһын йыя берәү! Төкөрәйем мин уның рәйеслегенә! Заманы инде әллә ҡасан үткән, ә ул шуны һаман аңламай.

— Һуң, улдары араһындағы янъялға ситтән ҡарап тора алмай ҙа инде, — тип һаҡ ҡына һүҙ ҡыҫтырҙы Зәмзәгөл.

— Быныһы инде беҙҙең эш! — тип ҡырт киҫте Рәхимйән, киреләнеп. — Үҙенең пенсионер икәнлеген белергә тейеш ул ҡартлас та. Әтеү ғүмер буйы аҡыл өйрәтеүҙән башы сыҡмай. Уның алтын аҡылынан да башҡа инде йәшәрбеҙ. Ана, мейес башында ултырһын!

Зәмзәгөл иренә аптырабыраҡ ҡарап ҡуйҙы. Ни булған быға? Әллә аҡыл яғы, ысынлап та, самалана башланымы? Ағаһына үпкәләгән хәлдә лә, ҡарттың ни ғәйебе? Ә Рәхимйән үҙенсә кәңәшкә әҙерләнә ине. Атаһының һәр һүҙен үлсәп һөйләгәнен дә, әйткән һүҙҙәренең урынлы булғанлығын да белә. Һәм бына ошоға — ҡарттың тәрән аҡылына үҙендә элек-электән һаҡланып килгән һоҡланыуға би-

решеп, уйынан кире ҡайтып ҡуйыуҙан ҡурҡа. Сөнки бөгөн барыһы ла хәл ителәсәк. Йә — пан, йә пропал... Инде лә был ғауға шул тиклемгә олғашҡас, Рәхимйәндең кире сигергә һис ниндәй иҫәбе юҡ ине. Әле лә ул шартына килтереп яңы костюм-салбарын алып кейгән булды. Бисәһенән йылдар буйы кәрәге сыҡмағанға күрә шкафтың иң төбөндә элеүле торған аҡ күлдәген һорап алды. Зәмзәгөл сәйерһенеп ҡарап торһа ла, табып бирҙе. Юғиһә иренең керләнеп бөткән тельняшкаларын йыуыр өсөн систереп ала алмай йөҙәй торғайны. Ә Рәхимйән үҙенсә түрә булырға әҙерләнә ине.

Зәмзәгөл, өҫтөнә кейгән кейемдәре арыу ғына булһа ла, иренең туйға барғандағылай һыланып-һыйпаныуын күргәс, аптыраған көндән күлдәген алмаштырып кейҙе. Уның эргәһендә әйбере юҡ кешеләй көн һайын йөрөгән нәмәләрендә китеп ултыра алмай бит инде. Бына шул булалыр инде силәгенә күрә ҡапҡасы. Бисәһенең сыҙамлығы бөтә башлағанын күргәс, Рәхимйән шалтор-шолтор килтереп гаражының йоҙағын асҡан булды.

— Һин нимә? Анау торған ергә ни... Ҡеше көлдөрөп... Әллә ни уйларҙар... — тигән булып Зәмзәгөл йәүкелдәй башлағайны, уның ауыҙын да тиҙ япты.

— Һөйләнмә, бисә! Бында мин хәл итәм. Күҙеңде тупайтып торғансы, бар, ана, ҡапҡаны ас!

Шулай итеп, "Жигули"ға фырт ҡына инеп ултырған булып, ауылдың урта урамына төшөп киттеләр. Рәхимйән менән Зәмзәгөлдөң фыртауайланып ҡапҡа төбөнә килеп туҡтағанын күреп ҡалған Рәзим һыҙғырып ҡуйҙы.

— Тә-тә-тә! Ана, буласаҡ батша килеп тә етте. Ҡаршы алырға кәрәк. Юғиһә батшаларса булмаҫ бит.

Рыҫҡужа ейәненә асыулы ҡараш атты. Нимәһенә һөйөнә был тинтәк? Ғөмүмән, һуңғы көндәрҙә аңлай алмай был ейәнен Рыҫҡужа. Ҡилгән мәлдәге илгәҙәклеге, яғымлылығы ҡояш ҡалҡҡас һыпырылып төшкән рәшә кеүек юҡҡа сыҡты. Йорттағы былай ҙа хаттин ашҡан көсөргәнешлекте арттырып, иһаһайлап ултырыуы инде бөтөнләй ҙә килешкән эш түгел.

— Етте, Рәзим! Ололарҙан уҙып, баһа биреп ултырырға әле йәшең етмәгән! — тип киҫә генә өндәште ул.

— Әссәләмәғәләйкүм! — тип юрый шаулап килеп инде Рәхимйән. Үҙе сынъяһау костюм-салбары менән һис тә ярашмаған башындағы таушалған кәпәсен күтәреп үк ҡуйған кеше булды.

— Уҙ, ултыр, улым, — тип тыныс ҡына өндәште Рыҫҡужа. — Ҡилен, һин дә үт.

— Нимә, колхоз идараһының ултырышын һаман да башламанығыҙмы ни әле? — Рәхимйән түргә уҙып, дивандың ҡап уртаһына йәйелде. Зәмзәгөл ишек төбөндәге ултырғысҡа ҡунаҡланы. Үҙҙәренең яһанышып-һыйпанышып йөрөүҙәре өсөн уңайһыҙланғаны ла һиҙелә биреп ҡалды. — Инде ҡарар сығарып, мин килмәҫ элек тауышҡа ла ҡуйырға өлгөргәнһегеҙҙер, тигәйнем. Ҡуй әле, мәйтәм, ҡамасауламайым. Рәхимйәндең бигерәк яман булыуын, әйҙәле, мәйтәм, туйғансы, ялҡҡансы тикшерһендәр. Ҡамасауламау...

— Тыныслан, улым, — тип йәнә өндәште Рыҫҡужа, һалҡын ҡанлылығын һаҡлап.

— Мин тыныс, атай, ишшеү ҙә нисегерәк тыныс әле! — Уртансы улдың күҙҙәрендә уҫал уттар ялтырашып алды. — Мин тыныс булмаһам, атай, беләһеңме, нишләйем? Ошо ҡулдарымды йомарлайым да берҙе генә елгәрәм! — Рәхимйән уң ҡулын йоҙроҡҡа йомарлап күрһәтте. Уны һуҙған ыңғайы ҡулындағы беләҙеге тирәһендәге ҡара тапты күреп, йоҙроғон шулай ҙа йәһәтерәк төшөрә һалды.

— Шул ғына етмәгәйне! — Рыҫҡужаның тауышында ҡорос сыңы ишетелә биреп ҡалды. Бала сағынан ҡанына һеңгән аҡыл — былдай мәлдең бик һирәк һәм айырым осраҡтарҙа ғына булыуын иҫләгән Рәхимйән ҡайтауылланы. Маймылланып ултырыуы ла кәмей төштө. — Мин һеҙҙе кәңәшкә йыйҙым, ә игәрешеп ултырырға

түгел. Элек-электән бергә йыйылып, тыныс юл менән хәл итә инек. Был юлы, күрәһең, елгә ҡаршы төкөрөргә булдығыҙ һәм үҙегеҙ үк бысрандығыҙ. Хәҙер ошо бысраҡтан ҡотолоу юлын табырға кәрәк. Һәм бында инде, — ҡарт уртансы улына күҙ атты, — ыҙғышҡа юл ҡуйылырға тейеш түгел.

Рәхимйән ниҙер әйтергә уҡталды ла баҫылды. Күрәһең, әлеге ҡорос сыңын хәтеренә төшөрҙө.

— Тәүге һорауым — ниҙән башланды? Һәм кем башланы был низағты?

Йыһангир тамаҡ ҡырғылап алды. Әллә атаһына оҡшатырға маташҡан була инде, байғош? Түлке атыҙдың ябағаһы ҡойолорға тора, ағай... Рәхимйән мыҫҡыллы көлөмһөрәп, бисәһенә күҙ атты. Унының бисә исеме күтәреп йөрөүен әйтер инем — былдай мәлдәрҙә уртаҡ оборона нығытмаһы хасил итеп, ошо бешмәгән етәксене бөрөп алаһы урынға, Зәмзәгөл башын аҫҡа эйеп ултыра. Фу, йүнһеҙ бисә! Бына Рәзим, исмаһам, ҡусты тиһәң дә ҡусты! Башҡалар күрмәгәндә генә ағаһына дәртләндергес ым-ишара ташларға өлгөрҙө. Тимәк, ул яңғыҙ түгел! Уның да хаҡлылығын күреүселәр бар был донъяла. Йә, Хоҙай! Рәхимйән иркен тын алып ҡуйҙы, яурындары ла яҙыла төштө. Хәҙер күрербеҙ: кем — кемде? Үҙеңде гелән әллә кемгә һанап маташма әле һин, ағай кеше. Саҡ ҡына юл бирергә лә өйрән!

— Минән башланды был низағ. Ғәйеп миндә... — тине Йыһангир, атаһына ҡарап.

— Аңлатыбыраҡ һөйлә, улым.

— Аҡса кәрәк булды. Шуға дөйөм иҫәптән йөҙ илле мең һумды алырға тура килде. Ҡире ҡайтарырға вәғәҙә бирәм. Ошо арала уҡ. Үҙ исемемә кредит булһа ла алырмын.

Рәхимйәндең атаһы йортондағы түшәмгә ҡарата булған ҡыҙыҡһыныуы шул минутта уҡ юҡҡа сыҡты.

— Ә ышаныс кредиты хаҡында ни әйтерһегеҙ, Йыһангир Рыҫҡужович? — Һуңғы һүҙҙәренә баҫым хатта ныҡыраҡ төштө шикелле әле, ҡарттың йөҙөндәге мускулдары тартыша бирел ҡуйҙы, ләкин ул тыныслығын юғалтманы.

— Башҡа былдай хәл ҡабатланмаҫ, ҡустым. Әлегәсә килешеп эшләнек. Мин һине мөнәсәбәттәрҙе ҡатмарлаштырмаҫҡа саҡырам. Шуны ғына әйтә алам — ул аҡса минең үҙ маҡсатым өсөн түгел ине.

— Ә кем өсөн һуң? — тип ныҡышты Рәхимйән.

Әлегәсә ағаларының әләгешеүен ҡыҫылмай ғына тыңлаған Илсура уларға алмаш-тилмәш ҡарап алды ла өлкән ағаһына ҡараны.

— Йыһангир ағай, былай ҙа йәмһеҙләшеп бөттөгөҙ бит инде, тағы ла ныҡыраҡ ҡатмарлаштырма. Әйт тә ҡуй. Бер кем дә ауыҙыңа һуҡмаҫ. Ниңә үҙ өҫтөңә кәрәкһеҙгә сүп өйҙөрөп ултыраһың?

— Ағай, моғайын да, ир кеше булып ҡалырға теләйҙер, — тип һаҡ ҡына һүҙ ҡыҫтырҙы Рәзим. — Ниңә уны биргән һүҙенән ваз кистереп, кәмһетергә маташаһығыҙ?

Йыһангир Рәзим ҡустыһына рәхмәтле ҡарашын һирпеп алды. Үҙеңдең һүҙеңдә тора белгәнеңде аңлауы һәм уны баһалауы кешеләр булғанда йәнгә рәхәт икән ул. Хатта ошоғаса ишеткән әрләү-битәр һүҙҙәренең дә әселеге баҫыла төшкәндәй була.

— Кәрәк булһа, иртәгә үк табып бирәм шул сумманы! Етер талашырға! — тип асыуланып уҡ китте Илсура.

— Һеҙ аңламанығыҙ! — тип инде Рәхимйән тауышын күтәрә төштө. — Бында инде һүҙ аҡса хаҡында бармай. Эш икенсе нәмәлә — мин уға хәҙер ышанмайым!

— Улым! — Рыҫҡужаның тауышы йомшарҙы. — Был бит һеҙҙең дөйөм эшегеҙ. Ағайың һинһеҙ эшләй алмаған кеүек, һин дә Йыһангирҙән башҡа бер ни ҡыла алмайһың. Һуңғы сиккә барып етеү кәрәкмәҫ...

— Ә ниңә ҡыла алмай, ти? Ҡәнсә лә кәнис, минең белемем бар! Ә уның нимәһе?

— Ә унда — ойоштороу һәләте. Кешеләр менән уртаҡ тел таба белеү. Һәм тәү ҡарашҡа күҙгә бигүк бәрелмәгән бик күп нәмәләр, улым, — тип тыныс ҡына

дауам итте Рыҫҡужа. — Етәкселек эшендә мин бик күп йылдар йөрөнөм. Уның һәр ваҡ-төйәген һөйләп бөтөп тә булмай. Ҡеше үҙ тәбиғәте һәм тәжрибәһенә таянып башҡарған нәмәләре бихисап бит уның.

— Һин, атай, мине шулай йүнһеҙгә һанайһың инде?

— Мин улай тимәнем.

— Тура әйтмәһәң дә, һәр ике һүҙең араһында ошо фекерең тағылып йөрөй. Ә беләһеңме, был аҡыллы улың ул аҡсаларҙы ҡайҙа осорған?

Рәзим тертләне. Йыһангир менән Фәһим бер-береһенә ҡараштты. Рыҫҡужа менән Илсура Рәхимйәнгә төбәлде. Был көтөлмәгәнлектән ҡәнәғәт ҡалған Рәхимйән туранан бәрҙе.

— Тәбиғәте менән етәкселек һәләте ташып торған был аҡыллы улың икенсе бер тәтәй ейәненеңдең уҡымайынса тырай тибеп йөрөгәндән барлыҡҡа килгән гонаһтарын ямап йөрөгән!

Йыһангир Фәһимгә шелтәле ҡараш ташланы. Тегеһе башын түбән эйҙе.

— Атай... — тип өлкән ул һүҙ башлап ҡарағайны ла, Рыҫҡужа уны ҡул ымы менән генә туҡтатты.

— Йә, дауам ит, улым.

Рәхимйән иһә Йыһангир яғына көйҙөргөс ҡараш ташланы ла, унан ерәнгәндәй, атаһы яғына боролоп уҡ ултырҙы. Күрәһең, Рыҫҡужаның тауышы үҙгәреүе һәм өлкән улының ауыҙын баҫып уҡ ҡуйыуы күңеленә бик тә хуш килде.

— Бына ошо ейәнең, атай... — Рәхимйән Фәһимгә эйәгенең осо менән ымланы. — Бөтөнләй уҡымай, имеш. Ҡойроҡтары һыу буйындай йыйылған. Һәм ҡасандан бирле әле! Ҡышҡы сессияһын һаман да япмай, шәләй-вәләй йөрөп тик ята. Етмәһә, беҙҙе алдай. Ә беҙ уның өсөн ҡайғырышҡан булып йөрөйбөҙ. Ҡәҙеребеҙҙе беләме һуң ул беҙҙең? Ә?

— Дөрөҫмө был, улым? — Рыҫҡужа Фәһимгә ҡараны.

Фәһим башын эйҙе. Йыһангир ниҙер әйтергә уҡталғайны, үҙенә мөлдөрәп ҡарап ултырған Рәзимдең күҙҙәрен күреп, ҡапыл һыуынды. "Һүҙ бирҙем бит әле... Фәһимде барыһы ла ярата... кисерерҙәр... Ә Рәзим... бында өйрәнеп тә бөтмәгән. Бөтөнләй ҡабул итмәйәсәктәр бит... Нишләргә? Их, мин..."

— Ә уның нимәһенә шикләнәһегеҙ? — Әлегәсә өндәшмәгән Зәмзәгөл ҡапыл Тимурын иҫләгәйне. — Үҙе килеп һөйләне беҙгә. Мин уны шул тиклем оятһыҙҙыр тип уйламағайным. Йә инде, яуаплылыҡ өсөн йөҙәр меңләп түлә! Ә үҙенең ошоғаса һуҡыр тин эшләп алғаны юҡ. Оят түгелме һиңә, ә, ҡәйнеш?

Фәһим өндәшмәне.

— Асыуың килмәҫ ерҙән килер, — тип теҙҙе бер ярһып алған Зәмзәгөл. — Тимурымды нисек кенә итеп уҡырға индерербеҙ хәҙер? Быйыл улым уҡырға инә алмаһа, һин ғәйепле буласаҡһың, ҡәйнеш!

— Туҡтап тор әле, еңгә! — Илсура урынынан тороп уҡ китте. — Эш аҡсала булһа, биреп торормон тип әйттем түгелме һуң? Ниңә шул балаға ҡаныҡтығыҙ?

— Ул бала түгел инде, ә еткән егет. Ишшеү ҡыҙҙар менән йөрөп булашалыр әле. — Еңгәләре бөтөнләй боролоп уҡ ултырҙы.

— Бына нимә, балалар. — Рыҫҡужа тауыш биргәс, барыһы ла шымды. Рәхимйән менән Йыһангир бер-береһенә асыулы ҡараш ташланы, ҡалҡына башлаған ерҙәренән ҡабат урындарына ултырҙылар. — Мәсьәлә асыҡ. Йыһангир, һин Фәһимде ҡотҡарырға маташҡанһың. Дөрөҫ аңланыммы?

— Эйе, — тине Йыһангир ышанысһыҙ тауыш менән.

— Ә һин, Фәһим, тимәк, беҙҙең ышанысты аҡламаның. Уҡыйһы урынға елғыуарланып, аҡса туҙҙырып йөрөйһөң. Дөрөҫмө?

— Шулай тура килде...

— “Шулай тура килде...” — Рыҫҡужа ҡарт, үҙенә хас булмағанса, ейәненең артынан ҡабатлап, уны әләкләп алды. — Нимә, һинең елкәңдән төрткөләп, түшәмгә төкөрөп ятырға мәжбүр иттеләрме?

Егет өндәшмәне.

— Мин һине бик аҡыллыға һанай инем, улым, — тип инде арыған тауыш менән дауам итте Рыҫҡужа. — Ә хәҙер һинең ошо йүнһеҙлегең арҡаһында ағайҙарың дошманлашып бөтә яҙҙы. Бәлки, ярашырҙар ҙа, һәүетемсә эшләрҙәр ҙә. Ләкин йөйө ҡаласаҡ, һәм уны инде мәңге бөтөрөп булмаç. Сөнки үҙегеҙ күрҙегеҙ, бик күп йәмһеҙ һүҙҙәр әйтешеп бөттөгөҙ. Ҡалған хәтер — ул инде ҡалған хәтер. Уны инде ямап ҡына ҡотолоп булмай. Онотолһа, бик хуп та бит...

— Ә ул нишләп онотолорға тейеш әле... — Рәхимйән урынынан ҡалҡына биргәйне, ҡабат ултырырға мәжбүр булды.

— Әйтһәм әйтәйем инде, улым. — Рыҫҡужа Рәхимйәнгә һынап ҡараны. — Бына бөгөнгө кәңәштә һин үҙеңдең етәксе булараҡ бөтә мөмкинлектәреңде күрһәттең. Юрый саҡырҙым мин һеҙҙе кәңәшкә. Колхоз идараһының ултырышы тип мыҫҡылларыңды белһәм дә саҡырҙым. Сөнки кеше билдәле бер йәшкә етһә, уға олпатлыҡ һәм аҡыл инергә тейеш! Бәғзе берҙә ул егермелә инә, ҡырҡта ла әҙәм балаһы ул мөмкинлектәрен ҡыуып етә. Ғүмер буйы ла ул кимәлгә етә алмаусылар бар. Һиндә мин ана шул олпатлыҡты һәм аҡылды күрергә теләгәйнем. Кейенеүен кейенгәнһең, ә бына сабырлыҡ тигән нәмәне өйөңдә онотоп ҡалдырғанһың. Ә бит, улым, өс кешегә генә етәксе булырға теләһәң дә, ана шул сабырлыҡһыҙ булмай.

— Һин улай мине бик бөтөрөп ташлама әле, атай.

— Мин һеҙҙе, уландар, бер ҡасан да бөтөрөп ташларға ынтылманым. Сөнки был үҙ бармаҡтарыңды үҙең киҫеү менән бер. Тик бына һеҙ үҙегеҙҙе үҙегеҙ бөтөрмәгеҙ. Һуңғы һүҙем шул.

Бер мәлгә тынлыҡ урынлашты.

— Йә, шунан, нишләйбеҙ? — Илсура ағаларына ҡараны. — Был ғауғаға сик ҡуйырға кәрәк бит инде. Артабан да былай йәшәп булмай. Етер, ағайҙар, килешегеҙ давай.

— Мин бөгөндән килешергә әҙер. — Йыһангир урынынан ҡалҡына биреп ҡуйҙы.

Рәхимйән өндәшмәне. Атаһының үҙәгенә үткәргәнсе әйтеүе уны бер аҙ һыуындырғайны. Тәүәккәллеге лә кәмей төштө. Барыһының да асыуына тейергә тырышып, “мин — мин, мин — кем?” тип маймылланып ултырыуы инде әллә ҡайҙа булды. Ләкин бит... бөгөн иртән генә күңелен наҙлап торған хыял донъяһын ҡайҙа ҡуяһың? Һоҡланыулы ҡараштар... Байлыҡ... Муллыҡ... Барыһының да ихтирамы... Ул эргәләренән үткәндә, күҙенә салынып булһа ла ҡалырға тырышып, эйелеүҙәр, бөгөлөүҙәр... Яп-ялтыр ҡара “Тойота”... Етмәһә, кемдер ҡолаҡ төбөндә уны инде генерал булырға өндәп тора... Тик бына кем булды икән... Хәтеренә генә төшөрә алмай шул... “Генерал булырға ынтылмаған һалдат — насар һалдат” тигән әйтем дә бар бит. Гелән уға аяҡ салалар... Йәш сағында хәрби булаһы килде... Ебәрмәнеләр... Бына хәҙер тағы...

— Рәхимйән, — тип һүҙ ҡатты йөҙө үҙгәрә төшкән Зәмзәгөл. — Әле һуң түгел бит. Килеш ағайың менән. Бергә-бергә ышаныслыраҡ булыр.

— Ә һин, бисә, тик ултыр! Сыпрандама! — Рәхимйән Зәмзәгөлгә екереп үк ҡуйҙы.

— Етте! — Йыһангир урынынан ҡалҡынды. — Бына документтар! Бына мисәт! Ошо көндәрҙә үк һинең исемеңә яҙҙырырбыҙ. Хәҙер инде үҙең инәлеп килһәң дә, мин һеҙҙең менән бергә эшләмәйәсәкмен!

— Улым, тыныслан.

— Мин бик тынысмын, атай. — Йыһангир Рыҫҡужаға ҡарап алды. — Ул бит инәлгән һайын кәзәләнә, күрмәйһегеҙме ни? Тегендә-бында сабып, барыһын да яйлап йөрөүҙе үҙенсә бик анһат тип уйлай торғандыр. Әйҙә, эшләп ҡараһын!

— Эшләрмен дә! Һәм бына тигән итеп эшләрмен!

— Ҡулыңдан килһә — рәхим ит. Ә минән бурыс төштө. — Йыһангир ишекте ябып сығып китте.

Бер аҙға тынлыҡ урынлашты.

— Емереү — төҙөү түгел инде ул, — тип ҡуйҙы Илсура. Ул һуңғы сиккәсә ағаларының килешеренә өмөтөн өҙмәгәйне.

— Ҡайттыҡ, бисә. — Рәхимйән документтарҙы һәм мисәтте йыйып алып ишеккә ыңғайланы. — Әйҙә, тим!

Йөҙөнә күләгә ятҡан Зәмзәгөл бүлмәләгеләргә ғәйепле ҡиәфәттә ҡарап алды ла ире артынан эйәрҙе. Рәзим үҙ бүлмәһенә инеп китте. Һуларға һауа етмәй башлауын тойған Фәһим йәһәтерәк тышҡа сыҡты. Уның бик-бик алыҫтарға, бынан бөтөнләй күренмәгән яҡтарға китеп юғалғыһы килә ине.

* * *

Фәһим артҡы кәртә эргәһенә ауҙарылған бүрәнә өйөмө өҫтөндә ултыра.

Башы түбән эйелгән. Күңеле болоҡһоу. Ағалары араһындағы аңлашылмаусанлыҡты бөтөрөү хаҡына үҙ намыҫын бысратыуға юл ҡуйҙы. Юл ҡуйҙы ғына түгел, үҙе теләп ҡорбанға килтерҙе ул уны. Ҡорбанын ҡабул итмәнеләр. Ә ул бысранған килеш ҡалды. Бер мәл хатта тороп үҙенең ғәйепһеҙлеген әйтергә лә уҡталып ҡуйғайны ла бит... Кешелеклелеге өҫкә ҡалҡып сыҡты. Хәҙер бына өҫтөнә мөмкин булған бөтә бысраҡты өйөп, ҡыйырһытылған, ситләтелгән бер бала хәлендә артҡы ихатала ултыра.

Күрәһең, бер кемгә лә инде ул кәрәкмәй. Уның тамағына төйөр тығылды. Еләҫ ел иҫте. Бер мәлгә генә ул ойоно, онотолдо...

— Бына һин ҡайҙа йәшеренгәнһең икән, матур егет!

— Мин йәшенмәнем... — Фәһим күҙҙәрен ергә төбәне.

— Ә мин күпме ваҡыт инде һине эҙләйем. Өйөгөҙҙә юҡһың. — Зөһрә яғымлы итеп йылмайҙы. — Әйҙә, ҡәйнеш, әллә ниҙә бер генә ҡайтаһың. Һинең өсөн генә тип бәлеш бешерҙем. Һыуынып та өлгөрмәгән, һине көтөп өҫтәл артына ла ултыра алмайбыҙ. Ағайың асыҡҡан, түҙер генә хәле ҡалмаған. — Еңгәһе йәнә матур итеп йылмайҙы.

— Әллә, килешерме икән...

— Ҡитсәле, ҡәйнеш! Тәүге тапҡырмы ни? Әллә минең бәлештәрҙең тәмен оноттоңмо?

— Юҡ та, — тигән булды Фәһим. Ә үҙенең күңеленә йылы йүгерҙе. Ул тиклем артыҡ баш түгел икән дә баһа ул был донъяла. Ана бит, еңгәһе ихласлап тороп саҡыра. Уны эҙләп табыуы ла йәненә яҡын. Хатта күңелен күмеп килгән хәсрәте лә баҫыла төшкәндәй булды.

Улар барып ингәндә Йыһангир иркен зал буйлап арлы-бирле йөрөнә ине. Түҙемһеҙлеге йөҙөнә сыҡҡан. Ҡустыһы инеү менән, уға шелтәле ҡараш ташланы. Юҡ, сыҙамлығы бөтөүе, күрәһең, төшкө аш мәленең инде үтеп барыуынан ғына ла түгел.

— Ну, ҡустым, иштең ишәк сумарын! — тип ҡаршыланы ул Фәһимде.

— Ниңә улай тиһең, ағай?

— Ул етмәһә ғәжәпләнә! Әйт әле, һиңә ошо туҡмаҡ кәрәк инеме?

— Белмәйем шул, ағай, — тине егет, уфтанып. — Һеҙҙе араштыраһым килгәйне бит. Ә ул, ана, ҡайһылайға олғашып китте.

— Хәҙер, ҡустым, беҙгә был хәлдән ипләп кенә сығыу әмәлен күрергә кәрәк. Бер аҙ тауыш баҫылғас, олатаң менән үҙем һөйләшермен. Рәхимйәнгә лә еткерергә тура килер.

— Ниңә, Рәзим өсөн алдым тип әйтергә уйлайһыңмы ни? Йәл бит әле ул.

— Бына кеше! — Йыһангир бөгөнгө көндә тәүге тапҡыр тигәндәй рәхәтләнеп көлдө. — Үҙенә уңлы ла, һуллы ла эләгә, бөтә булған гонаһтарҙа ғәйепләйҙәр, ә ул башҡаларҙы ҡайғырта!

— Хатта, әйтер инем, самаһыҙ ҡайғырта, — тип һүҙ ҡыҫтырҙы Зөһрә эше менән булған арала.

— Ниңә улай тиһең, кәләш?

— Ә һеҙ уйлап ҡарағыҙ.

— Әйҙәле, бисәкәйем, тураһын ғына әйт тә ҡуй! Һин йомаҡ ҡоя башлаһаң, осона-ҡырыйына сығып булмай торған. Йә инде, кәләшкәйем...

Зөһрә иренә сәйер генә итеп ҡарап ҡуйҙы.

— Ә һеҙ, әлбиттә, бер нәмәне лә белмәйһегеҙ ҙә, күрмәйһегеҙ ҙә?

— Нимәне күрәйек тә нимәне беләйек?

Фәһим дә һағая төштө. Өҫтәл эргәһенә килеп ултырған Зөһрәнән яуапты һурып алырҙай булып, икәүләшеп уға төбәлделәр.

— Рәзим ҡәйнеште әйтәм... Һеҙ уның ихласлығына ышанаһығыҙмы?

— Һы, бисәкәй... Әйтә торған һүҙең шул инеме ни? — Йыһангир ҡул һелтәне. Унан өҫтәлгә күҙ һирпеп алғас, ҡәнәғәтләнеп ҡулдарын ыуғыланы. — Еңгәң һине эҙләгәндә, ҡустым, духовканың эргәһенә ултырып, ошо бәлеш еҫен еҫкәп ултырҙым. Хатта, мин һиңә әйтәйем, яртылаш туйҙым да шикелле. Шулай ҙа беҙ уны ашап ҡарайыҡ әле. Еҫе тәменә тура киләме-юҡмы икәнен белер өсөн булһа ла... Их, үҙемдең кәләштең уңғанлығы! — Ул түҙмәй бәлештең бәләкәй киҫәген ауыҙына оҙатты ла тамшанып ҡуйҙы. — Телемде генә йотоп ебәрмәһәм ярай ҙа...

— Мин ысынлап әйтәм, Йыһангир. Мөнәсәбәттәрегеҙ былай ҙа ҡырҡыулашып бөттө. Тағы ла ҙурға китмәгәйе. Ләкин был юлы инде икенсе яҡтан.

— Их, бәлеше лә бәлеше, — тип үҙенекен һөйләне Йыһангир.

— Рәзим ҡәйнеш аҫтан киҫкәнгә оҡшаған. Әле бына һеҙ Рәхимйән менән, дөрөҫөн әйткәндә, уның арҡаһында тас та тос килеп ғауғалашаһығыҙ. Сиратта Илсура ҡәйнеш түгелме икән, тим.

— Ә Илсураға ни булһын? — тип вайымһыҙ ғына һораны Йыһангир, тәмләп сәйнәй-сәйнәй.

— Лира килен менән аралары бигүк оҡшап етмәй миңә. Илсура ҡара һөрөм кеүек йөрөй, ә килен йылмаяҡланыуҙан бушамай. Һине был һағайтмаймы? — Зөһрә ниңәлер Фәһимгә күҙ атып алды. Уның күҙ алдында әйткәне өсөн үкенгән һымаҡ та күренде.

“Еңгә ниҙер белә”, — тип уйлап алды Фәһим.

— Юҡсы, ауылға ҡайны-ҡәйнәһе эргәһенә ҡайтып та томһайып йөрөмәҫ бит инде, — тип үҙенекен һөйләне Йыһангир.

Зөһрә Фәһимгә һирпелеп ҡарап алды ла һүҙҙе икенсегә борҙо.

— Әйҙә, әйҙә, етешегеҙ. Балаларға алып ҡалғанмын... Ана, тағы береһе бешеп килә. Берәйһе килеп керһә, етмәй тормаһын тип артығыраҡ ҡуйғайным.

Ләкин килеүсе булманы. Байрам мәлдәрендә өйҙән өйгә йөрөп бәлеш менән һыйланыуҙы, шул һылтау менән әкренләп донъя хәлдәре менән дә танышыуҙы ҙур һәм күркәм ғөрөф-ғәҙәткә әүерелдергән Иҫәнсуриндар нәҫеле был көндә һәр береһе үҙ мөйөшөндә ҡалыуҙы хуп күрҙе. Саҡ ҡына бергә йыйылышһалар, һүҙҙең йәнә күңелһеҙ юҫыҡҡа төшөп китәсәген барыһы ла беләләр ине.

Ағаларынан сыҡҡас та әле, өйгә тиҙ генә керәһе килмәй, урамда оҙаҡ йөрөнө Фәһим. Байтаҡтан күрмәгән дуҫтары эргәһенә һуғылды. Улар менән гәпләшеп бөтөүгә көн күптән тамамланып, күк йөҙөндә йондоҙҙар ҡалҡып бөткәйне инде. Ауыл йорттарындағы уттар ҙа күбеһе һүнгән, унда-һанда ғына күренгеләй. Олатаһы йортоноң тәҙрәләрендә лә ут булмауын күргән Фәһим еңел тын алып ҡуйҙы. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, әлеге мәлдә бер кем менән дә һөйләшкеһе килмәй. Ғәйепләүсән

ҡараштарҙан уңайһыҙланып, башын ситкә бороуҙан да ялҡты. Күңеленден таҙа булыуы ғына ғәйептең ауырлығын еңеләйтә алмай икән шул.

Фәһим шым ғына баҫып, залда үҙе йоҡлаған диван эргәһенә үтте. Сисенеп ятайым ғына тигәйне, уның элекке бүлмәһе ишегендә Рәзим күренде.

— Ҡустым, — тине ул бышылдап. — Әйҙә ин әле, әйтәһе һүҙем бар.

Һөйләшергә бер теләге булмаһа ла, Фәһим ирекһеҙҙән урынынан ҡабат ҡалҡынды. Бөгөнгө көн Рәзим өсөн дә еңелдән булманы бит. Анау тиклем тауыштың үҙе арҡаһында ҡупҡанын аңлағанға һаман да йәненә урын таба алмай уңайһыҙланалыр инде тип, уны йәлләп ҡуйҙы. Тап шул мәлдә игеҙ тыуған булараҡ уға терәк булмаһа, аҙаҡтан ағаһының күҙҙәренә нисек ҡарар?

Икенсенән, моғайын, Рәзим уның өсөн ҡустыһын ғәйепләгәнгә ҡыйынһыналыр. Әллә иртәгә иртән тороу менән барыһына ла дөрөҫлөктө асып һалырға йыйындымы? Моғайын, шулайҙыр. Йыһангир ағайҙы ла өҫтәмә мәшәҡәттән ҡотҡара бит был! Бәлки, Рәхимйән ағай уңайһыҙланып, өлкән ағаһынан ғәфү ҙә үтенер. Ҡалай ҙа һәйбәт булыр ине!

Төшөнкө генә ҡиәфәттә йоҡларға йыйынып бөткән Фәһим теремекләнеп китте. Күңеле тулышып, хатта Рәзимде ҡосаҡлап алырҙай уҡ булды.

Бына улар бүлмәгә үтеп ултырҙылар. Ана бит, Рәзим уға ниҙер әйтмәк була. Тик, күрәһең, нисек башларға белә алмай.

— Һин миңә ниҙер әйтергә итәһең, ахыры, Рәзим? — тип уға һораулы ҡарашын төбәне егет, ағаһына бер аҙ ярҙам итеү йөҙөнән.

— Эйе лә, — тине тегеһе, ҡулында фирүзә ҡашлы йөҙөктө әйләндергеләп. — Ни... ҡусты... һин бөгөн, әлбиттә, ҙур эш эшләнең. Хуплайым... Так держать! Бирешмә!.. Нығ тор!

— Ә ниңә... — Фәһим аптырай төштө. — Һин... олатайға... барыһын да әйтергә йыйынмайһыңмы ни? Мин уйлағайным...

— Кәрәкмәй! — Тегеһе ҡулын ғына һелтәне. — Нимәгә ул, Фәһим, әйт әле? Һин бысрандың, хәҙер компания өсөн мин дә шул тиҙәккә ятып аунайыммы инде? Һәм нимә өсөн бит әле? Ниндәйҙер йөҙ илле тәңкә аҡса өсөн! Быңдай милек банкта ла ятып яна ул. Ә Рәхимйән тинтәк шул аҡсалары өсөн һәр береһенең күҙен соҡоп алырҙай булып ултыра. Дүрәк тек дүрәк инде. Хәҙер улар барыбер дошман. Инде минең дә исемде ҡыҫтырып, улар буғына буяуҙан мәғәнә юҡ, ҡустым. Үҙҙәренең батҡаҡтары үҙҙәренә үк булһын. Вот шул!

— Ниңә, миңә әлеге ғәйепте ғүмере буйы үҙемә тағып йөрөтөргәме ни?

— Ә кем һиңә уны ҡушҡан? Мин һораныммы һинән үҙ өҫтөңә ал, тип? — Рәзим тауышын күтәрә төштө. Фәһим башын эйҙе — ағаһы хаҡлы ине. Ҡустыһының өндәшмәүенән ҡәнәғәт ҡалды ағай кеше — тимәк, был тинтәкте тауышты күтәрә төшөп тә еңеп була. Хәтергә һалып ҡуйырға кәрәк, аҙаҡтан бик кәрәге тейәсәк. — Ҡолағыңа киртеп ҡуй, ҡустыҡайым, һәм онотма бер ҡасан да: үҙең барғанһың, үҙең әйткәнһең һәм... Йыһангир ағай, бәлки, ысынлап та, һинең өсөн алғандыр әле, ә? — Фәһимдең йөҙөндә сикһеҙ ғәжәпләнеү сағылды, ә Рәзим тантана итә ине. — Әлбиттә, шулай! Ҡалай тәүҙән үк башыма килмәгән? Тап шулай! Минең аҙна-ун көн буйы ҡартластың өйө эргәһендә йыйылған сүп-сарҙан башҡа бер ни күргәнем юҡ... шуны һепереүҙән бит бушап булмай... Һәм, күрәһегеҙме, әллә ниндәй аҡсаларын да миңә япһарырға итәләр! Аҡылығыҙ алтын икән! Килеп сыҡмаҫ! — Рәзим эргәһендәге Фәһимгә зәһәрле ҡараш ташланы. — Йыһангир һинең эргәгә барып йөрөгән бит. Тимәк, бергәләп әүеш-тәүеш иткәнһегеҙ. Һөйлә, ҡайҙа ҡуйҙығыҙ? — тип һөжүмгә үк күсте ул.

Фәһим иҫен йыя алмай ултыра ине. Был ни булды һуң әле? Һәм, ғөмүмән, был ул тыуып-үҫкән йортмо? Бәлки, ул йоҡлап киткән дә яман төш күреп һаташалыр? Юҡ, барыһы ла ысынбарлыҡта ине. Дивандың бер осонда уны ашарҙай булып

ҡарап Рәзим ултыра. Күҙҙәрендә шул тиклем күрә алмау һәм нәфрәт, яңылыш ҡараһаң, тотлоғоп ҡалырһың.

— Һин нимә, Рәзим... ысынды һөйләйһеңме? — тине, ахырҙа, Фәһим тотлоғоп.

— Әлбиттә! — тине тегеһе, иҫе лә китмәй. — Мин ул аҡсаларҙы күрмәгән! Һәм минең өсөн алынған тип, ана, Йыһангир ағайың иҫбатлап ҡараһын! Ҡулында бармы яҙыуы?

— Һуң... ундай саҡта бит... ҡулға бер ниндәй ҙә яҙыу бирмәйҙәр... — тип тағы аңлатырға маташты Фәһим, инде ағаһы өсөн хафаланып.

— Бына шул-шул. Ә хәҙер инде иҫбатлап ҡарағыҙ... Йәғни мәҫәлән, минең өсөн алынған булыуын иҫбатлап ҡарағыҙ!

Фәһим шул мәлдә үҙен ҡулға алды. Рәзим унан ни бары метр-метр ярым араларыҡта ултыра. Ә күҙҙәрендәге яһиллыҡ! Һәм ул күҙҙәре бер ниндәй ҙә миһырбанлыҡ вәғәҙә итмәй ине. Һаман да шулай ыҡ-мыҡ килеп ултырһа, инде Рәзим яңы ғәйепләүҙәр уйлап табасаҡ. Был бысраҡтан инде мәңге таҙарынып бөтөп булмаҫ.

— Туҡта, Рәзим! — тине ул ҡатынҡы тауыш менән. — Мин һине был тиклем үк оятһыҙҙыр тип уйламағайным. Килеүеңә күпме генә, ә инде ағайҙарҙы дошманлаштырырға ла өлгөрҙөң. Йыһангир ағай һинең өсөн тырышып йөрөп, ниндәй хәлгә тарыны, ә һин уның йөҙөнән көләһең! Нимәгә кәрәк һиңә былар бөтәһе лә, әйт әле?

Рәзимдең йөҙө бер мәлгә генә һис ниндәй мәғәнә аңлатмаған рәүештә ҡатып ҡалды, унан һис көтмәгәндә уның йөҙөнә киң йылмайыу йәйелде.

— Ну, туған, килештерәһең! Адвокат булырға кәрәк булған да бит һиңә! Ә һин шул тел биҫтәләрен әҙерләй торған факультетта әрәм булып йөрөйһөң... Һин, нимә, әллә шаяртыуҙы аңламайһыңмы? — Рәзим Фәһимдең яурынынан дуҫтарса ҡаҡҡылап алды. — Мин бит һине һынап ҡарарға уйлағайным. Туҡтәле, мәйтәм, игеҙ ағаһы өсөн утҡа ла, һыуға ла керергә әҙерме икән был ҡусты? Ә һин маладис, ҡустым, тоғролоғоңдо ысынлап тороп иҫбатланың. Үҙ өҫтөнә ғәйеп алыуҙы уны һәр кем дә булдыра алмай. Бының өсөн ҙур йөрәкле булырға кәрәк. Бер-беребеҙ өсөн бына шулайтып утҡа ла, һыуға ла керәйек, ҡустым. — Рәзим аптырап ҡалған Фәһимде хатта ҡосаҡлап алды. — Һинең кеүек ҡустым булыуына мин шул тиклем ҡыуанам. Күпме генә ваҡыт үтте, ә һин үҙеңдең тоғролоғоңдо инде иҫбатларға ла өлгөрҙөң. Рәхмәт, ҡустым! — Рәзим Фәһимде йәнә бер ҡосаҡлап алды ла уның усына фирүзә ҡашлы йөҙөктө һалды. — Бына, ҡустым, һиңә минән. Рәхмәт йөҙөнән. Баш тартма, әтеү үпкәләйем. Минең иң яҡты туғанлыҡ хистәремде аяҡ аҫтына һалып тапама. Ҡабул ит, зинһар!

— Мин был йөҙөктө нишләтәйем? — тип аптыраны Фәһим. — Ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡы ла баһа!

— Булһа һуң. Ҡыҙыңа бүләк итерһең. — Рәзим ҡустыһына һынап ҡараны. — Йөрөгән ҡыҙың бармы?

— Бар.

— Ярай, танышырбыҙ. Үҙем барып танышырмын буласаҡ килен менән.

Уның был һүҙҙәрен ишеткән Фәһимдең ниңәлер арҡаһы эҫеле-һыуыҡлы булып китте, һәм ул ҡулындағы йөҙөктө йәһәтерәк ситкә алып һалды.

— Юҡ, кәрәкмәй. Бүләк итер булһам, үҙем һайлап һатып алырмын.

— Ал, ал!

— Юҡ!

— Ярашыу йөҙөнән ҡабул ит. Нимә, минең менән татыу булырға теләмәйһеңме ни?

— Теләйем.

— Шулай булғас.

— Юлы был түгел, Рәзим.

Рәзимдең йөҙөндә кинәт сәйер бер йылмайыу хасил булды. Тирә-яғына алан-йолан ҡаранып, ул бышылдауға уҡ күсте.

— Беләһеңме, Фәһим ҡустым... Дуҫлыҡты нығытыу өсөн беҙҙең уртаҡ бер сер булырға тейеш. Икебеҙҙеке генә. Һәм уны бер кем дә белергә тейеш түгел. Әйтәйемме, нишләйбеҙ... Мәҫәлән... уртаҡ һөйәркә.

— Нимә? — Фәһимде күҙҙәре ҙур булып асылды. Ағаһы тағы ла шаярта, ахыры. Юҡ... Шаяртыуға оҡшамаған һымаҡ...

Рәзим һаһылдап көлдө.

— Һин, нимә, балалар баҡсаһындағы малайҙар шикелле ултыраһың?

Фәһим өндәшмәне. Рәзимдең нимәгә һуҡтырыуын аңлай ҙа бит, шул кимәлдә үк боҙоҡ микән ни? Уртаҡ һөйәркә, тисе... Ә бында уны ҡайҙан алырға йыйына икән был аҡыллы баш?.. Әллә тағы ла берәй этлек уйлап сығарырға аҙапланамы? Иҫәр шикелле ауыҙҙы асып ултырғансы, асыҡларға кәрәк. Көтөлмәгән ерҙән эләккән һөжүмдәр артыҡ күбәйеп китте. Һәм күбеһе ана шул “бер нәмә лә белмәйем” дә “бер нәмә лә күрмәйем” тип ултырғандан да... Фәһим, һәр һүҙен үлсәп, ҡәнәғәт ҡиәфәттә йәйелеп ултырған ағаһына һүҙ ҡушты.

— Ә ризалашһам? Шунан ҡайҙан табабыҙ?

Рәзимдең йөҙөндә иләмһеҙ йылмайыу йәйелде.

— Ныу, брат!.. Көтмәгәйнем... Тфү, һин дә аҙғын икәнһең дә... Тфү, ташҡа үлсәйем... Фу, ерәнәм хатта һинән! — Фәһим, ытырғаныу хисенән көс-хәлгә арынып, ағаһына тура ҡарарға тырышты. — Ҡурҡма, үҙе йүгереп киләсәк. — Ҡустыһының ышанмауын күргәс, стеналағы сәғәткә күҙ һирпеп алды ла өҫтәп ҡуйҙы. — Теүәл ун минуттан.

— Ҡитсәле! Булмаҫ! — Фәһим ысынлап тороп аптыраны. — Ҡайҙан таптың уны?

Уны аптырата алғанына ҡәнәғәт ҡалған Рәзим йәнә ирәүәнләнеп һаһылданы.

— Йәшәргә ағайыңдан өйрән, брат! Әтеү йөрөйһөң шунда быҙау шикелле! Идеалист! Ә беҙ тормоштан кәрәген уны ҡайырып алабыҙ. Һәм нисегерәк алабыҙ әле!

— Йә кем һуң... Әйт инде!

— Ышанмаҫһың, брат! — Рәзим Фәһимдең ҡолағына эйелде, тегенең аптыраясағына алдан уҡ ҡыуанып, бышылданы. — Лирочка!

Фәһимдең битенә уңлы-һуллы саптылармы ни! Ул йөҙө үҙгәреп, кинәт энә менән сәнселгәндәй булып ситкәрәк шыуҙы.

— Ҡит, булмаҫ! — тип бышылданы ағарған ирендәре. Элегерәк тә шикләнеү ғәләмәте уны эстән ашаһа ла, был кимәлгә үк килеп етмәгәненә, ниңәлер, ул ышана ине әле. Ә Илсура ағаһы? Ә Айрат?

— Ишшеү нисегерәк була әле! — тип, ҡәнәғәт ҡиәфәттә әйткән һүҙен йәнә бер раҫлап ҡуйҙы Рәзим.

— Нисек инде... Һуң эргәһендә ире йоҡлап ята ла баһа...

— Әйтәм бит, быҙау тек быҙау... Эй, ҡустым, йәшәй белмәйһең шул әле! Лирочканың кем икәнен белмәйһеңме ни? Фармацевт ул, ҡолағыңа киртеп ҡуй! Теге алашаһына иртән бер дарыу эсерә... уныһын ул бахыр биодобавка тигән булып услап көйшәй. Шунан үҙе үк кисенә башым ауырта тип мыжый башлаһа, инде икенсеһен тамыҙа... Ул алаша үлек кеүек ята ла йоҡлай. Артына типкеләп тә уятып булмай. Ә мин эргәләренә инәм. Бына һиңә бөтә технологияһы! Ә һин нисек тигән булаһың...

Әле генә ишеткәндәренән Фәһим һеңгәҙәгән һымаҡ булып ултыра ине. Ул сикһеҙ нәфрәт менән игеҙ туғанына ҡараны.

— Ҡайҙан килеп сыҡтың һин? Ниңә үҙеңдең Стәрлетамағыңда ғына йәшәмәйһең? Ниңә ҡылаһың был ҡәбәхәтлектәрҙе? Үҙеңде туған тип ҡабул иткән яҡындарыңа хөсөтлөк эшләүҙән тәм табаһыңмы ни?

Рәзим кинәт яһилланды.

— Ә бына бында инде эшең булмаһын! Әлегәсә балда-майҙа йөҙөп етерлек иркәләнеп йәшәнең! Ә хәҙер — минең сират. Нисек теләйем — шулай

йәшәйем. Емтек башың менән аҡыл өйрәтеп маташма. Һинән алдараҡ тыуғанбыҙ һәм күберәкте беләбеҙ. Ҡәрәкһеҙ ергә ботонд̦о күп ҡыҫтыра башлаһаң, һуғып һындырырға ла күп һорамам.

— Ҡурҡытма!

— Мин ҡурҡытмайым. Әлегә. Ҡолағыңа киртеп ҡуй: Рәзим ағайым мине йомшаҡ ҡына итеп иҫкәртте, тиген. Ҡурҡытыу ул, ҡустыҡайым, икенсе төрлөрәк була. — Рәзим һиҙиллаңып Фәһимдең ҡолағынан электрмәксе ине лә, тегеһе ҡымшанмай ҙа туп-тура уға ҡарап ултыра биргәс, һуҙған ҡулын кире төшөрҙө. — Икенсе төрлөрәк тигәнененең ысулдары башҡасараҡ. Паяльник та ярай, йәғни мәҫәлән. Ҡарттың гаражында күргәйнем, — тип һүҙ араһында ғына ҡыҫтырҙы ул, быға айырым мәғәнә һалып. — Үҙ сиратын көтә. Шуның өсөн дә, ҡустыҡайым, тыңлаусан бул. Әтеү эсәктәреңде өҙгөләп алып был һаҫыҡ ауылығыҙҙағы һәр бағанаға элеп сығырмын.

— Ауылды яратмайһың... Туған-тыумасаларға күрә алмауҙан башҡа бер ниндәй хис-тойғо һиндә юҡ. Нимә кәрәк һиңә беҙҙең арала?

— Беҙҙең арала! — тип һаһылдап көлдө Рәзим. — Беҙҙеке, имеш! Ҡарап ҡарарбыҙ — нисек булыр икән был “беҙҙеке”...

Шул мәл һаҡ ҡына ишек асылды, һәм унда баҙлап торған матур пеньюар кейгән Лира күренде. Ул тауышланмаҫҡа тырышып, ишекте шым ғына япты һәм шунда ғына Рәзимдең үҙе генә булмауын күреп ҡалды. Диван яғына әйләнде һәм... ни өндәшергә, ни сығып йүгерергә белә алмай ҡатып ҡалды. Матур күҙҙәре ҙур булып асылды, ирендәре ҡалтырай башланы, үҙе таяныс эҙләгәндәй, эргә-тирәһенә күҙ йүгерткеләне.

— Мин... ни...

— Әйҙә, уҙ, Лирочка, — тип мыҫҡыллы йылмайҙы Рәзим. — Бөгөнгө сеанста Фәһим дә ҡатнашырға теләк белдерҙе. Лирочка ысынлап та шулай ҡыҙыу бисәме тип ҡыҙыҡһына.

— Рәзим, туҡтат был кәмитте!

— Мин башлағанмынмы ни уны? — тип аптыраны Рәзим. — Үҙ бүлмәмдә тыныс ҡына ултырам. Еңгәмде бик татлы тип әйтәһең, миңә лә өлөш сығар әле тип, үҙең инәлеп килеп индең. Улай ярамай, тип инде ярты сәғәт һиңә тылҡыйым, ә һин һаман ныҡышаһың. Шул арала был бисә үҙе килеп инде. Мине нимәлә ғәйепләйһегеҙ, аңлай алмайым.

— Рәзим... һин нисек... шулай? — Лира ауыҙын бөрөштөрөп шым ғына илап ебәрҙе.

— Ана, хәҙер икебеҙ ҙә баш тартҡас, был бисә ишаратының йөрәге күтәрә алманы. — Рәзим йәнә мыҫҡыллы йылмайҙы.

— Етер, Рәзим! Ир була бел!

— Ниңә, булдырабыҙ уны! — Рәзим урынынан тороп, салбарын сисә башланы. — Үҙе килеп ингән икән, күңелен күрәйем. Тем более, ана тегендә видеокамера барыһын да яҙып тора. Иртән иренә кино күрһәтербеҙ.

Фәһим менән Лира икеһе бер юлы ул күрһәткән яҡҡа бороллдо. Мөйөштәге кескәй телевизор өҫтөндә, ысынлап та, видеокамераның ҡыҙыл уты баҙлай ине.

— Ой! — Әлегәсә иҫәңгерәгән шикелле торған Лира ҡурҡышынан сығып йүгерҙе.

— Маладис, ысын йөҙөңдө астың. — Фәһим урынынан торҙо. — Хәҙер һине ағай тип тә, туған тип тә әйтергә тел әйләнмәй. Һин минең өсөн, ғөмүмән, хәҙер юкһың. Миңә бындай туған кәрәкмәй.

— Ә ҡайҙа барырһың икән? — тип ыҫылданы Рәзим, артығыраҡ ҡыланып ташлауын кинәт аңлап. Теге аҙғын бисә менән ҡустыһын бер юлы ҡурҡытып, үҙ ихтыярына буйһондороп алырға тигән ниәте тулыһынса килеп сыҡманы, ахыры. Һәр хәлдә Фәһимгә ҡарата. Бысраҡҡа башкөллө буялған Лира хәҙер инде артыҡ сыпрандай алмаҫ. Рәзим ни теләһә, шуны эшләйәсәк.

— Ҡарап ҡарарбыҙ. Һәр хәлдә, беҙҙең арала һис ниндәй уртаҡлыҡ юҡлығын күрәм. Һәм һинең менән хатта аралашҡым да килмәй.

— Ана бара юлың! Был минең бүлмә!

Фәһим ишек тотҡаһына ҡулын һалғас, әйләнеп, уға ашарҙай булып ҡарап торған Рәзимгә күҙ ташланы.

— Иртәгә мин барыһы хаҡында ла олатайыма һөйләйәсәкмен. Ниндәй йыланды ҡуйынына һыйындырғанын ул белергә тейеш.

Игеҙ туған йәнә һаһылдап көлдө.

— Ә миңә шул ғына кәрәк тә! Бөгөн генә әле ошонда арты ҡысып баҫып торған ахмаҡ бисәнән йөрәк дарыуы һорап алып эсте. Теүәл өс тапҡыр. Тағы бер нокаут — һәм каюк! Ҡартыңа ясин сығаһы ғына ҡала. Әтеү йөрөй бөтә ергә лә моронон тығып, темеҫкенеп. Ә теге алйоттары уның һүҙенә төшөргә генә тора. Лутсы һин уны хәҙер үк уятып һөйлә. Ә мин ҡәбер ҡаҙырға китә торайым, — тип мыҫҡыллланы Рәзим.

Фәһим бынан ике-өс көн элек кенә тәүләп күргән игеҙ туғанының үҙендә шул тиклем ауыр хис-тойғо уятыуына аптыраны. Улар инде ғүмерҙә лә ярашмаясаҡтар һәм мәңге бер-береһенә ҡаршы торасаҡтар һымаҡ тойолдо. Рәзимгә йәнә ни ҙә булһа әйтеү урынһыҙ ине. Фәһим сығып китте. Төнө буйы бошаланып урынында әйләнеп сыҡты ул. Таң атҡанда күҙенә һаман да йоҡо ҡунмағайны әле. Офоҡ сите аллана башлағас, тороп кейенде һәм ашап та тормаҫтан әйберҙәрен алып Өфөгә илтә торған трассаға сығып баҫты. Ә уның ике-өс көн буйы етемһерәп ултырған юл сумкаһының тышҡы кеҫәһендә баҙлап торған фирүзә ҡашлы йөҙөк ята ине. Тик хужаһы ғына был хаҡта бер ни ҙә белмәне.

* * *

...Фәһим ағаһы менән бергә үҙе йәшәгән бүлмәгә инде. Ағаһының ҡапыл һәм уның артынса уҡ килеп етеүенә тәүҙә һөйөнгәндәй иткәйне лә, Илсура бер ни өндәшмәгәс, һағайып ҡалды. Ғәҙәттә киң йылмайып йөрөгән ағаһының теше һыҙлаған кешенеке шикелле йөҙө һытыҡ. Күҙҙәрендә уҫал осҡондар ҙа һикергеләп ала. Әйтерһең дә, үҙенең насар кәйефен башҡаларға ла йоҡторғоһо һәм шуның менән кемдәндер һәм ниҙәндер үс алғыһы килә.

— Йә, ҡустым, һөйлә хәлдәреңде, — тине ул бүлмәгә инеү менән үк ҡырыҫ тауыш менән.

— Хәлдәр... бер көйө...

— Бер көйө, тиһең инде? Ә мин һине сереп байып ята, тип ишетеп ҡалғайным.

— Нисек? — Фәһим аптырап ағаһына ҡараны.

— Күпмегә осорҙоң йөҙөктө?

— Ниндәй йөҙөк?

— Башыңды иҫәргә һалма әле, Фәһим. Барыһын да беләм бит инде. Фирүзә ҡашлы йөҙөк. Сит-ситтәре ваҡ бриллианттар менән биҙәлгән. Айрат тыуғас, еңгәңә бүләк иткәйнем. Ана шул йөҙөктө һин урлағанһың!

— Кем әйтә?

— Күреүселәр бар. Йә, әйт, ҡайҙа ҡуйҙың? Эргәңдә булһа, атай ҡартты йәлләп бер юлға кисерергә була. Ә инде һатып өлгөргән булһаң, ҡара уны илла! — Илсура һәлмәк йоҙроғон Фәһимдең танау төбөндәрәк уйнатып алды. — Ҡустым тип тормам. Бәлки, ҡусты булараҡ ныҒыраҡ та эләгер әле. Ҡыләсәктә шундай бурлыҡ менән беҙҙең йөҙгә ҡара яҡмаҫҡа һабаҡ булыр.

Фәһим үҙен көсләп тигәндәй йылмайҙы. Әлеге мәлдә урынһыҙ булғанға ла, йылмайыу ахмаҡтарса килеп сыҡты.

— Мин белмәйем, ағай. Ысынлап әйтәм.

— Фәһим, һинең менән мин әле ағайҙарса ғына һөйләшәм. Атайҙың да йөрәге ауыртып торғанға, эште ҡатмарлаштырғым килмәй, — тип үҙен ҡулда тоторға һәм һалҡынлыҡ һаҡларға тырышып дауам итте Илсура. — Ҡурҡма, тинем бит, сығар ҙа бир. Уны йәһәт кенә һатып ебәреп булмай, сөнки ҡыйбатлы әйбер. Магазинға тапшырып өлгөрһәң дә, әйҙә, хәҙер үк барабыҙ ҙа алабыҙ. Бер һүҙ әйтмәй, боролам да ҡайтып китәм. Хатта атайға ла әйтмәм. Яңылышҡандар, тиермен. — Илсура тауышын йомшартып ҡустыһына ҡараны. Ҡүңелендә шик тә ҡуҙғый биреп ҡуйҙы. Сөнки бында нимәһелер осо осҡа ялғанмаған кеүек күренә ине. Ҡүрәләтә кеше әйберен урлап, бер кемгә бер ни әйтмәй һәм хушлашып та тормай төн уртаһында ҡасып киткән кеше шундай ҡиәфәттә була аламы? Икенсенән, Фәһим ҡустыһының ҡылған яманлыҡтары һуңғы арала күбәйеп китте. Уның ошондай гонаһһыҙ әҙәмдәй аптырап ултырыуына инде ышанғыһы ла килмәй.

Фәһимдең кинәт игеҙ туғаны ҡулындағы матур йөҙөк күҙ алдына килде. Стеналағы бра яҡтылығында ҡалай баҙлап, ялт-йолт итеп, күҙҙең яуын алып тора ине. Шуны юғалтҡандармы икән ни?

Рәзим!

— Ағай, мин уны Рәзимдә күргәйнем.

Илсура мыҫҡыллы көлдө.

— Тап шулай тип әйтерһең тип уйлағайным да. Их, һин, ҡустым... Был тиклем түбәнлеккә төшөрһөң тип уйламағайным. Етмәһә, үҙ ағаңа яла яғаһың. Ҡем һин хәҙер бынан һуң?

— Илсура ағай, мин ысынды әйтәм.

— Их, ҡустым... — Илсура инде башҡа бер һүҙ ҙә әйтмәне, тороп үҙҙәре ултырған карауат аҫтын, шкафты ҡараны. Фәһимдең күҙҙәре генә ағаһының хәрәкәттәре артынан эйәрә, ә башы бер ни уйларлыҡ хәлдә түгел. — Ҡайҙа юл сумкаң? — тип һораны ахырҙа Илсура ҡырҡыу тауыш менән, эҙләй-эҙләй кәрәкле нәмәһен таба алмағас.

Фәһим бер ни өндәшмәй шкаф антресолендә ятҡан сумкаһын алып иҙәнгә ҡуйҙы.

— Йә инде, хәҙер тышҡы кеҫәһенең замогын ас.

Йөрәге “жыу” итеп киткән егет машиналь рәүештә Илсура әйткәнде эшләне һәм бының тикмәгә булмауын аңлап ҡулын эскә тыҡҡайны, бармаҡтары ыҡсым ғына ҡаты әйбергә төртөлдө, һәм ул уны тартып сығарҙы. Уның усындағы ғәжәйеп матур йөҙөк тәҙрәнән төшкән һаран ҡояш нурҙарында йәйғор көлтәһе кеүек күҙҙең яуын алып баҙланы. Фәһим ултыра төштө.

— Бер ни аңламайым.

— Их, ҡустым... — тип ҡабатланы Илсура, уның усынан йөҙөктө алып, һәм уны салбар кеҫәһенә һалып ҡуйҙы. — Бындай көнгә үк төшөргә кәрәкмәҫ ине...

— Ағай, мин уны алманым. Ышан миңә.

— Бик ышаныр инем дә бит, күреүселәр бар.

— Ҡем?

— Ағайың Рәзим. — Илсура урынынан торҙо. — Мин ҡайтайым. Сәй эсерергә тип маташма, юлайҡан берәй кафеға һуғылырмын. Ошо хәлдән һуң һинең менән бер өҫтәл артына ултырыуы бигүк килешкән эш түгел. — Илсура ишеккә йүнәлде.

— Ағай!

— Фәһим, кәрәкмәҫ! Мин инде һине тыңларға ла теләмәйем. Беләһең килһә, беҙҙең нәҫелдә әлегәсә урлашып йөрөгән кешеләрҙең булғаны юҡ ине. Ҡотлайым! Матур бит астың шәжәрәбеҙҙә.

— Ағай...

— Аҡланма, тим! Енем һөймәй шундай әҙәмдәрҙе. Ҡәбәхәтлек эшләгәнһең икән — иңең менән күтәр. Ир була бел!

— Мин ул хаҡта түгел... Икенсе нәмә әйтмәксе инем.

Ишек тотҡаһына үрелгән Илсура бер минутҡа ғына туҡтап ҡалды. Йөҙөндә йәнә мыҫҡыллы йылмайыу хасил булды.

— Тағы шул Рәзим насар ҙа мин һәйбәт тип әйтергә уйлайһыңдыр инде. Ҡөнсөллөк шәп нәмә түгел бит әле ул, ҡустым.

— Юҡ, ағай, мин улай тип әйтергә йыйынмайым. — Әлегәсә уңлы-һуллы сикәләнгән кеүек ултырған Фәһимдә ҡайҙандыр көс килде. Таң һарыһынан бер кемгә бер ни әйтмәй, хушлашып та тормай китеп барыуын ул әлегәсә ғорурлыҡ тип иҫәпләп йөрөгән була ине. Ә ысынында ҡурҡаҡлыҡ һәм насарлыҡ менән ҡара-ҡаршы тороп көрәшергә теләмәү булып сыҡты. Ул ғорурлыҡты кем алдында күрһәтте инде ул? Һәм нимә отто? Баҡтиһәң, был бысраҡлыҡ артабан да йәйелеп, эргә-тирәһендәгеләрҙең береһен дә ҡалдырмай үҙ ҡосағына ала бара икән... — Беләһеңме, ағай, хәҙер һин ишекте шарт ябып сығып китә алаһың. Һәм артабан минең менән бер ҡасан да һөйләшмәҫкә лә хаҡың бар. Ләкин бер кәңәшемде тыңла — Лира еңгәмдең ҡулынан бөгөн-иртәгә бер ниндәй ҙә дарыу эсмә. Һәм үҙең күрерһең.

Илсураның йөҙө үҙгәрҙе.

— Һин быйың менән нимә әйтергә теләйһең?

— Бер ни ҙә әйтергә теләмәйем. Үҙең күрерһең.

— Юҡ инде, ҡустым, башлағас, әйтеп бөтөр. Һуҙма.

— Ағай, әйтәм бит, кеше ғаиләһенә ҡыҫылырға минең бер ниндәй ҙә хаҡым юҡ. Үҙең хәл итерһең. Тик кәңәшемде тот, зинһар: артыҡ яндырайланма. Сөнки мин Айратты бик яратам. Төрмәлә ултырған атай уны тәрбиәләй алмаҫ.

— Тәк, тә-әк... Һин инде, ҡустым, мине төрмә менән дә ҡурҡытырға уйлайһың инде? Бик шәп! Ҡотмәгәйнем!

Фәһим әсе көлөмһөрәне.

— Их, ағай... Аңлатыр инем дә бит, ул сиктән уҙғанһың шул... Мин һиңә бер кәңәш кенә бирә алам. — Фәһим ҡапыл иҫләгәндәй ағаһына ҡараны. — Туҡта әле, көтөп тор, бөгөн еңгәм һиңә биодобавка типме берәй таблетка йотторманымы?

— Юҡ, — тине Илсура ышаныр-ышанмаҫ ҡиәфәттә. — Дөрөҫөрәге, өлгөрмәне. Таң һарыһы менән сығып киттем. Ихатанан сыҡҡас ҡына иҫләгәйнем дә, юл уңмаҫ тип боролоп торманым. Ҡайтҡас эсермен, тигәйнем. Ниңә улай тиһең? Ә һин ҡайҙан беләһең?

— Ул таблетканан кисен һинең башың ауырта башлай, — тине Фәһим ағаһының һорауына иғтибар итмәй.

— Ә һин ҡайҙан... — Илсура ҡабат карауатҡа килеп ултырҙы. — Һин бит минән ниҙелер йәшерәһең, ҡустым.

— Мин әйтһәм дә, барыбер ышанмаҫһың шул, ағай. Ҡешегә бысраҡ өйә, тиәсәкһең. Ә мин былдай ғәйепләүҙәрҙе инде күп ишеттем.

— Йә, дауам ит...

— Һәм тағы ла бер дарыу эсергә тура килә.

— Уныһы ла хаҡ. — Илсура башын ике ҡулы менән услап уйға ҡалды.

— Ләкин уныһы, ағай, инде йоҡо дарыуы. Һин бер нәмә лә белмәй, үлек кеүек йоҡлайһың... Ул йоҡо дарыуынан башың сатнап килеп тора. Атай алдында сер бирмәҫкә тырышып, хужалыҡ эргәһендә йөрөгән булаһың... Ә үҙең еңгәнең баш ауыртыуын бөтөрә торған дарыуы хаҡында уйлайһың... Һәм был көн һайын ҡабатлана.

— Ниңә, эсмәҫкәме ни? Ә ауыртыуы һуң?

— Их, ағай... Эсмә шул. Ләкин быны үҙең генә бел. Һәм... күрерһең.

— Нимәне?

Фәһим бер нәмә лә өндәшмәне. Күҙ алдына ҡыуана-көлә йүгереп йөрөгән Айрат ҡустыһы килде.

— Айрат ни эшләп йөрөй? — тип көтмәгәндә һөйләшеүгә бер ниндәй ҙә ҡағылышы булмаған һорауҙы бирҙе ул.

— Айрат... уйнай... — тип таркау ғына киәфәттә яуап бирҙе Илсура. — Һине һорай ине. Фәһим ағай ни эшләп был юлы минең менән уйнаманы, тип аптырай. — Илсура урынынан калкынды. — Әйтмәйһең инде?

— Юк.

— Мәйелең.

Фәһим дә урынынан торҙо.

— Ағай, самалап кылан. Үҙең әйтмешләй, шәжәрәне бысратма. Беҙҙең нәҫелдә әлегә саклы бурҙарҙың да, кеше үлтереүселәрҙең дә булғаны юк ине.

Илсура кинәйәне аңланы, кеҫәһенән әлеге йөҙөктө алып әйләндергеләне.

— Ә быны әйтәм... кайҙан һинең сумкаға килеп эләккән?

— Белмәйем, ағай... Хәйер, беләм... Уның да әтнәкәһен бөгөн төнөн, моғайын, аңларһың.

— Һы...

Илсура хушлашмай ҙа сығып китте. Унан боролоп һаубуллашырға тип уйланы ла инде килештермәне. Ә күңелендәге шик көсәйгәндән-көсәйә бара ине.

* * *

Илсура башы үлтереп һыҙлағанға уянып китте. Тәүҙә үҙенең кайҙа һәм ни эшләп ятыуын аңларға маташты. Сисенмәгән-нитмәгән килеш урын-ер өҫтөндә аунап ята ине ул. Ул торорға ынтылды ла кабат ауҙы. Башының ауыртыуы үтергә уйламай ҙа. Әкренләп кисәге хәлдәр урык-һурык булып хәтеренә килә башланы. Иҫләгән һайын асыуы кабара, йоҙроғо йомарлана барҙы. Эйе, уға нимәлер эсерҙеләр. Кымыҙға һалып. Һәм кем бит әле. Кустыһы! Һәм был йоко дарыуы ише лә түгел. Булһа ла, атты ла аяктан йығырлык дозала ине.

Хәҙер ул торор. Бер аҙ ғына хәл алыр. Унан инде... Илсураның юлында осрамау хәйерлерәк булыр был мәлдә. Эсендә урғылып килгән нәфрәтенән сәсәр һымак ине ул хатта. Юлында осраған бөтә нәмәне кыйратып-емереп үтергә әҙер ине ул ошо вакытта.

— Ағайың нишләп һаман тормай, улым? — Быныһы әсәһенең тауышы.

— Кисә артығырак һалып кайткан, ахыры. Еңгәм менән көс-хәлгә бүлмәләренә индереп һалдык. — Рәзим ине быныһы.

— Атак-атак! Ғүмерҙә кыланмағанды!

— Улай тимә, өләсәй. Суфый түгел дә инде ағай. Көн һайын эсеп йөрөмәй бит. Дуҫтарын осраткандыр...

Илсура тештәрен шығырҙатты... Хәҙер ул торор. Акылға еңеләйгән кеше һымак, бөтә донъяны емереп-кыйратып бөтөр. Ә артабан? Артабан? Әсәһенең куркынған йөҙө. Атаһының рәнйеүле карашы. Улының кобараһы осасак һәм атаһының которған януар хәлендә йөрөгән мәлен инде ул бер касан да онотмаҫ. Сабыйының балалығын урлаһынмы инде хәҙер? Кисә лә бит ошо болотһоҙ бала сактың ниндәйҙер бер өлөшө кителеп төштө. Һәм ул, атай була тороп, шуны бөтәйтергә кулынан килмәне. Ситтә тороп калыуҙы хуп күрҙе. Бер нәмә лә күрмәне, бер нәмә лә белмәне. Анһат юлды һайланы. Ирлекме инде был? Ә катыны? Хыянатсы һәм алдаксы... Илсураның уның хакында инде уйлайһы ла килмәй.

Илсура торорға тип уктады ла кире уйланы. Артабан ни эшләрен хәл итергә кәрәк ине. Ни эшләргә? Бөтә был яуызлыктарҙың төп сәбәпсеһен ул инде белә. Йылмайып-көлөп торған, күңеленә инә яҙып хәбәр һөйләгән кустыһы Рәзим ул. Хәҙер Илсура торор... Бер аҙ хәл алыр... Һәм уның үңәсенән эләктереп алыр ҙа йоҙроктарын йомарлап берҙе генә елгәрер. Бындай кеүәтле көс менән һукканға башы ярылып китһә лә бер ни түгел... Бер ни ҙә түгел? Ә ысынлап үлтереп куйһа? Һуң был бит баштар төрмәгә китерлек эш! Шунда ғына Илсура Фәһим кустыһының әйткәндәрен иҫләне һәм асырғаныулы ауаз күкрәген ярып бәреп сыкты.

— Аһ, мин, йүләр! Йыбытҡы! Әллә ҡайҙағы Өфөнән ике-өс көнгә ҡайтҡан ҡустым да бит был хаҡта белә! Ә мин?

Бәлки, инде бөтә ауыл беләлер? Хурлығы ни тора! Юҡ, булмаҫ, ата-әсәһе кинәйәләп булһа ла еткерерҙәр ине. Уларҙың үҙ йорттарында ошо мөрәүәтһеҙлеккә сыҙап йәшәрҙәренә ышанмай. Ышанмай! Илсураның уйы йәнә Фәһимгә әйләнеп ҡайтты. Ҡусты була тороп, ҡолағына төшөрһә булмай инеме ни? Ә һуң... Илсура тыңлар инеме уны? Юҡ бит! Тағы ла өҫтәп ғәйепләр ине үҙен. Һуңынан ҡайтып Рәзимдең күҙенә ҡарап һораған булыр ине. Һәм ни менән бөтөр ине барыһы ла? Бына быныһын инде әйтеүе ауыр.

Иманын уҡытты ла, ти, Рәзимдең. Ә үҙ-үҙен тота алмай, артығыраҡ ҡыланып ташлаһа? “Төрмәләге атай Айратты инде тәрбиәләй алмаҫ”, — тигән һүҙҙәр Илсураның йәнә хәтеренә килде. Ҡаршыһына ҡыуана-һөйөнә, шатланып йүгереп килгән улының тимер рәшәткәгә килеп бәрелгәнен күҙ алдына килтереп, һиҫкәнеп ҡуйҙы. Һәм үҙенең ни эшләргә тейешлеген аңланы.

Уға улын һәм... һәм... хыянатсы бисәһен бынан йәһәтерәк алып китергә кәрәк! Мөмкин тиклем тиҙерәк. Башҡа юл юҡ. Лира менән артабанғы мөнәсәбәттәре — инде икенсе мәсьәлә. Алдарына килеп баҫҡан мәсьәлә яман шеш кеүек ҙурая бара, һәм ул шартлап һытылһа, бөтә тирә-яҡты бысратасаҡ. Унан инде таҙарыныуы ҡыйын булыр. Бәлки, мөмкин дә булмаҫ. Һөҙөмтәһе бер генә — үҙенең емерелгән тормошо, балаһының урланған балалығы. Ә был инде — һуңғы сик. Бына шул һуңғы сиккә барып етмәҫкә кәрәк ине.

Илсураның башының һыҙлауы әкренләп баҫыла төштө. Ул хәҙер инде тынысланыбыраҡ уйларлыҡ хәлгә килде. Бөгөн уларҙы алып китә... Һәм үҙе кире ҡайтасаҡ. Ауылға. Рәзим менән иҫәпләшәһе бар ине уның. Был килеш кенә ҡалдырмаясаҡ уны Илсура! Нишләтер — әлегә белмәй. Уның боҙоҡ ҡанына буялып, тормошон емермәҫ инде. Бер этрәгәләм өсөн хаҡты улай юғары итеп түләү кәрәкмәҫ. Иң яҡшыһы — елкәһенән эләктереп алып ҡына элек ҡайҙа йәшәгән, шул ергә ҡабат илтеп ырғытыу. Бында уға урын юҡ!

Илсураның теште рәйәнә шығырҙаны. Ләкин ул инде үҙен ҡулға алғайны. Башын ике ҡулы менән ҡыҫып, карауатынан тороп ултырҙы. Иренең уяныуын хәүефләнеп көтөп йөрөгән Лира бүлмәләрендә ишетелгән хәрәкәтте тойоп, һаҡ ҡына үрелеп ҡараны. Бисәһенең һағайып ҡарауын Илсура күрмәмешкә һалышты.

— Уф, башым...

— Ни булды, Илсура?

Ире өндәшмәне. Их, ошонда ғына тәгәрәткәнсе һуҡ та ҡуй ине ошо хыянатсы бисәне! Юҡ, ярамаҫ... Эш унда ғына булһа, ни тиер инең дә бит. Бында хәлдәр ҡатмарлыраҡ шул. Үҙенә үҙе һоҡланып йөрөй торғас, бер яһил ҡулына ҡоллоҡҡа ҡапҡанын да, күрәһең, Лира һиҙмәй ҡалғайны. Ә инде ҡолға әйләнгән ҡатын-ҡыҙҙы йәлләргә мөмкин. Әммә яратып булмай. Йөрәгеңдең бөтә булған күҙәнәктәрен әйләндереп килтереп һалһаң да — булмай икән шул. Әле лә бына Илсура күңелендә ҡапыл барлыҡҡа килгән бушлыҡҡа үҙе лә ғәжәпләнеп, Лираға күтәрелеп ҡараны.

— Юлға әҙерлән! Бөгөн китәбеҙ, — тип үҙенә һораулы ҡарашын төбәгән бисәһенә ҡырыҫ ҡына өндәште.

Лира аптыраны.

— Нисек? Бөгөн? Бөгөнмө?

— Әҙерлән, тинем! Сәғәт ун икенән дә ҡалмай юлға сығырға кәрәк.

Бисәһенең күҙендә ҡырағай ҡыуаныс хасил булды.

— Илс... Илсура... Ысынмы?

Ирекәй уға күҙ һирпеп кенә алды, ләкин өндәшмәне. “Бахырҡай... Үҙәгенә үткән икән. Шунан, нимәне иҫбатланың инде?”

— Ҡондрашев шылтыратты. Эшләргә кешеләре етмәй, — тип алданы ул. Барыбер түгелме ни? Емереләһе инде емерелгән. Төҙөп маташҡанда ла, инде икенсе йорт сығасаҡ. Ә был осраҡта... серек нигеҙгә уны башҡа ҡороп булмаҫ һымаҡ...

— Бөгөн үк Өфөнән самолет менән осаһың. Ә мин Айрат менән машинала барып етермен, — тип өҫтәне Илсура.

Лира йүгерә-йүгерә әйберҙәрен йыя башланы. Әллә ни арала кейенә һалып та алды. Һуңғы арала ҡыланмағанынса туҡтауһыҙ ҡыуанып һөйләнде, ара-тирә улын да ҡосаҡлап үпкеләне. Уның ҡыланышынан Илсура бер ни ҙә аңламай ине инде. Нимә булды һуң был? Уға хыянат иттеләр. Йөҙөнән көлдөләр. Ә хәҙер... бисәһе лә ана шул хыянат ҡорбандарының береһенә оҡшағайны шул. Әллә Илсура үҙе лә ниҙелер дөрөҫ эшләмәнеме? Лира бит был юлы киләһе килмәй, аяҡ терәп тигәндәй ҡарышты. Әллә күңеле һиҙҙеме? Мәжбүр итеп килтерҙе уны Илсура. Ә хәҙер ҡыйралған карапҡа оҡшап ҡалған ғаиләһен кире тейәп алып китә. Ҡем отто һәм кем отолдо һуң? Бында еңеүселәр юҡ ине...

Аптырап ҡалған ата-әсәһенә Илсура эшләгән ерҙәренән ашығыс рәүештә саҡырыуҙары хаҡында әйтте. Әлбиттә, бер аҙнанан ҡабат ҡайтырға йыйыныуы хаҡында өндәшмәне. Әлегә белмәүҙәре хәйерлерәк. Айрат иһә эте менән хушлашып бөткәс, ҡыуана-көлә машина эсенә кереп ултырҙы. Лира инде түҙемһеҙләнеп ҡуҙғалып китеүҙәрен көтә ине. Үҙе ян-яғына ҡарана. Рәзим генә күренмәне.

— Рәхимйән ағаһын күрергә тип киткәйне, ағалары менән хушлашмай ҙа ҡала инде, — тип борсолған булды Рәхилә.

Рыҫҡужа бер ни ҙә өндәшмәне. Һалмаҡ аҙымдар менән атлап барып, алғы ҡапҡаны асты, артыҡ сөсөләнмәй генә руль артында ултырған кесе улының яурынынан ҡаҡты. Машина ҡуҙғалып китте. Тыуған йорт нигеҙенән минут һайын алыҫлаша бара, алыҫлаша бара... Уның һайын Илсураның йөрәгендә шик-шөбһә көсәйә генә. Был рәүешле хушлашмай ине бит улар. Ата-әсәһенең фатихаһын алып, уларҙың күңел йылылыһы оҙон-оҙаҡ ваҡытҡа етерлек итеп һаубуллаша инеләр. Әле килеп... Әсәһе баҡса эргәһендәге эскәмйәгә барып ултырҙы. Атаһы баҫып тора ла тора. Нишләп тора икән ул? Әйтелеп бөтмәгән һүҙҙәре, бүлешеп бөтмәгән күңел йылылыһы хаҡында уйлаймы? Илсураның йөрәге өҙөлгәндәй булды. Ләкин ул машинаһын туҡтатманы, хатта газын өҫтәй генә төштө. “Ярай, атай, тағы бер аҙнанан ҡайтам бит, — тип үҙ-үҙен йыуатты ул. — Шунда тағы ла һөйләшербеҙ әле бер...”

Рыҫҡужаның тау башындағы яңғыҙ сауҡаны хәтерләткән һыны машина көҙгөһөндә байтаҡ ваҡыт сағылып барҙы әле. Әкренләп юйылды, һүнде, һүрелде... Тағы бер аҙнанан ошо юлдан кире килгәнендә был һынды Илсура йәнә серәнеп, үткәндә ҡалған ваҡыт эсенән һурып алырҙай булып эҙләйәсәк ине әле...

Өфөгә еткәнсе Лира менән йүнләп һөйләшмәнеләр ҙә. Айрат ҡына юлда күренгән әле бер, әле икенсе машинаға ҡыҙығып, тәҙрәнән тәҙрәгә күсеп ауаланды ла арып йоҡлап та китте. Бынан айға яҡын ваҡыт элек ошондайыраҡ кәйеф менән ҡайтып төшкәйне улар Иҫәнсураға. Ул ваҡытта Илсура кәләшенең күңелен күрергә, үпкәләүен яҙырға тырышып аҙапланды. Хәҙер — киреһенсә. Лира төрлөсә итеп һүҙ башлап ҡарай. Ләкин Илсура яуап бирмәй. Күрәһе лә килмәй ине уның эргәһендәге ҡатынын. Сөнки өҙөлгән өмөттәр, ҡыйратылған хыялдар саҡрымдарҙай булып артта һуҙылып ҡала бара. Алда — билдәһеҙлек.

Машина тәгәрмәстәре аҫтында саҡрым артынан саҡрым һуҙылып ҡала бара. Уларҙың бергә үткән юлдары, күрәһең, ахырына яҡынлаша ине...

* * *

Ихатала бер кемдең дә булмағанына бер аҙ ғәжәпләнеберәк, Фәһим болдор буйлап күтәрелде һәм тупһа аша атланы. Өйҙә бер кем дә юҡ һымаҡ. Хәйер... Рәзим өйҙә ине, ахыры. Тыуған йортона йөрәгенә ғәзиз кешеләрен күрергә атлығып ҡайтһа

ла, күптән түгел табылған һәм инде бер-ике аҙна эсендә ытырғаныу хисе уятырға өлгөргән игеҙ туғанын яңғыҙын осратыуға әле бына Фәһим хатта һөйөнгәндәй ҙә итте. Ни тиһәң дә, төп маҡсаты — Рәзим менән һөйләшеү һәм, мөмкин булһа, хатта уртаҡ тел табырға тырышыу бит.

— Ә, йөҙөк буры ҡайтып килә! — тип һүҙ ырғытты Рәзим диванға ҡырын ятҡан килеш.

— Һаумы, Рәзим. — Һөйләшеү башта уҡ әр-битәргә әйләнмәһен өсөн, Фәһим тыныслыҡ һаҡларға тырышты.

— Һау! Һау! — тип эт шикелле өрөп күрһәтте Рәзим һәм үҙ мәҙәгенән үҙе шарҡылдап көлдө. — Ха-ха-ха! Ха-ха-ха! Уф, үләм!

Фәһим ултырғыс алып уның ҡаршыһына ултырҙы.

— Йә, маймылланып бөттөңмө?

— Ә мин бурҙар менән һөйләшмәйем! — Рәзим мыҫҡыллы йылмайҙы. — Бурлыҡ ул, ҡустыҡайым, ҡысынма кеүек йоғошло. Бер эләкһә, бер нисек тә ҡотолоп булмай. Шуның өсөн дә минән арыраҡ йөрө. Бар, бар, сыҡ бынан!

Фәһим ҡымшанмай ҙа уға төбәлеп ултырыуын дауам итте.

— Әйт әле, Рәзим, ни кәрәк һиңә бында? Береһен дә бит яратмайһың. Хатта күрә алмайһың.

— Нисек инде яратмай? Ә Лирочка?! Нисегерәк яраттым әле мин уны! Ә һин, бәлеш, ауыҙыңа инергә торған майлы ҡалъяны ла йота белмәнең. Илсура ағайыңдың маңлайына йәнә бер саталы мөгөҙ үҫтереү мөмкинлеген ысҡындырҙың. Бешмәгән!

— Их, һин! Килгәнеңә күпме генә... ә күпме яуызлыҡ ҡылырға өлгөрҙөң.

— Яуызлыҡ? Һин нимә, аҡылдан шаштыңмы әллә?

— Шунан ниндәй намыҫ менән ошо йортта йәшәргә уйлайһың инде?

— Ә бына быныһында һинең эшең булмаһын! Ҡарт инде ашарын ашаған, йәшәрен йәшәгән. Иртәгә үк аяғын һуҙһа ла, бер ни түгел.

Фәһим бының менән һүҙ көрәштереп маташыуҙан бер ниндәй ҙә мәғәнә сыҡмаҫын күрҙе. Ни бары һүҙ генә әрәм итеү ине был. Ул урынынан торҙо.

— Әйт әле, Рәзим, һин үҙеңдең әшәке булмышыңды барыһынан да йәшерергә тырышаһың, ә минән йәшереп тә тормайһың. Барыһын да асып һалыр тип ҡурҡмайһыңмы?

Рәзим һаһылдап көлдө.

— Кемдән? Һинәнме? Ҡолағыңа киртеп ҡуй, туғанҡайым, һинең кеүектәрҙе мин бик яҡшы беләм. Һинең һымаҡтар һәр саҡ тәтәй булып ҡалырға тырыша. Кеше рәнйетеүҙән ҡурҡалар. Йәнәһе, әхлаҡ юғарылығынан төшмәйҙәр. Төкөрәйем мин һинең ул әхлағыңа! Икенсенән, инде бер кем дә һиңә ышанмаясаҡ. Буҡҡа етерлек буялғанһың. Ышанһалар ҙа... түү-түү, поезд ушел! Бер ниҙе лә үҙгәртергә инде ҡулыңдан килмәҫ. Ә һиңә бында хәҙер урын юҡ. Әйберҙәреңде йый ҙа һыпырт бынан. Күҙемә күренмә!

Фәһим урынынан һикереп торҙо ла Рәзимде яғаһынан эләктереп алды.

— Хәҙер мин һине!

Ишек янында ҡыштырҙау ишетелде.

— Уландар! Фәһим, әллә һин ҡайттыңмы? — Был Рыҫҡужа ине.

Ярһыған ике егет бер-береһенә сат йәбешкәйне. Икеһе лә йыш-йыш тын ала, нервылары көсөргәнеүҙән йөҙҙәрендәге мускулдары тартышып-тартышып ҡуя. Тағы бер секунд — һәм көрмәкләшеүҙән ултырғыстар ауасаҡ, тәҙрәләр ҡыйратыласаҡ, ә һуңынан... Һуңынан...Фәһим үҙен ҡулға алды. Тыуған йортон ошо кимәлгә төшөрөп, мыҫҡыллайһы килмәй ине уның.

— Йә, ярар... Һөйләшеү әле бөтмәгән... — Ул ҡулдарын бушатты. — Бүлмәгә инеп килгән олатаһына һаулыҡ ҡына ҡушты ла тышҡа атылды. Бында башҡа артыҡ бер минут та ҡалғыһы килмәй ине. Фәһимде аптыраулы ҡарашы менән оҙатып ҡалған Рыҫҡужа Рәзимгә өндәште.

— Ни булды бында?

Рәзим яурындарын ғына һикертте.

— Белмәйем, олатай... Ҡилеп керҙе лә яғаға йәбеште бит. Үҙ-үҙен ҡулда ла тота алмай башланы. Әллә наркоманға әйләнеп бара инде.

Рысҡужа бер ни ҙә өндәшмәне. Уларҙың һөйләшеүен башынан аҙағынаса ишетергә мәжбүр булыуын әйтһенме инде? Һәм бынан ни мәғәнә? Иң урынлыһы — уландарын йыйып кәңәш тотоу. Тик хәҙер генә түгел. Йөрәге бит уйнаҡлап тик тора. Нимәгә булыр был?..

Ә Фәһим, тиҙ генә тынысланa алмай, ихатанан уҡ сығып китте. Ярһығайны егет. Ҡасандыр бер ҡарында ятҡан туғаны менән дошманлашыуының сәбәбен аңлай алмай ине ул. Бына нисәмә төндәр инде баш вата, әммә ләкин осона сыға алмай. Үҙен бит баштан уҡ ҡара-ҡаршы ла ҡуйманы, аңларға тырышты. Хатта ярҙам ҡулы ла һуҙып маташты. Ләкин икеһе сиктең ике яғындалар. Ә хәҙер күрә: улар булмыштары менән ҡапма-ҡаршы, һәм бында инде килешеү мөмкин түгел. Ә бит хәҙер йөрөгән ерҙәре бер үк. Олатай һәм өләсәй. Туғандар. Тыуған йорт, ахыры килеп. Нишләргә?

Фәһим әсәһенең ҡәбере рәшәткәһенә башын терәп уйға ҡалғайны.

— Их, әсәй, ниңә һин шулай иртә киттең? Мин бит был һорауҙы һиңә бирергә тейеш инем. Бәлки, һин уларға яуап таба алыр инең. Эйе, моғайын да, таба алыр инең...

Ләкин әсәһе юҡ шул. Бала сағындағы кеүек йомшаҡ ҡулдары менән сәстәренән һыйпар ҙа күкрәгенә ҡыҫып яратыр кеүек ине. Юҡ, һыйпаманы шул. Ыҡсым мәрмәр һәйкәлгә беркетелгән дүрткел быяла аҫтындағы фотоһынан улына бойоҡ ҡына ҡарауын дауам итте.

Ә, бәлки... Ә, бәлки, Рәзимдән уның ҡабат элек йәшәгән яғына ҡайтыуын һорарғалыр? Бында бит уны бер ни ҙә тотмай. Элек татыу йәшәгән кешеләр араһын боҙоп йөрөүҙән уға һуң ни файҙа? Был бөтөнләй уның донъяһы түгел. Һәйбәтләп һөйләшкәндә аңламаҫ инеме икән һуң?

Артта кипкән япраҡтар ҡыштырҙауынан Фәһим һиҫкәнеп башын күтәрҙе. Уның артында Рәзим баҫып тора ине. Йөҙөндә һис ниндәй асыу ҙа, үпкә лә юҡ. Әйтерһең, бынан бер-ике сәғәт элек кенә сәйнәп ташларҙай булып бер-береһенең боғаҙына йәбешмәгәндәр...

— Ә-ә, бына һин ҡайҙаһың икән, — тип һис ни булмағандай өндәште ул Фәһимгә. — Олатай һинең артыңдан ебәрҙе.

— Нисек? — тип аптыраны Фәһим. — Ә ул минең бында икәнлекте ҡайҙан белә?

— Нишләп белмәһен. Ҡайҙа йүнәлгәнеңде артҡы ихатанан ҡарап ҡалған бит... — Рәзим рәшәткәгә килеп тотондо. — Ошонда ята икән әсәй... Йәл, күреп булманы үҙен... Бик сибәр ҙә булған икән үҙе... — Бер аҙға ғына тынлыҡ урынлашты. Шунан Рәзим ҡапыл иҫенә килгәндәй, башын күтәрҙе. — Фәһим ҡустым, һинең һүҙҙәреңдә хаҡлыҡ бар... — Игеҙ туғанының үҙенә ғәжәпләнеп төбәлгәнен күргәс, Рәзим ғәйепле ҡиәфәттә йылмайҙы. — Эйе, һин хаҡлы... Уйламайыраҡ күп нәмәләр ҡылып ташланым... Күп хаталарға юл ҡуйҙым... улай уҡ кәрәкмәҫ ине лә... Әйҙә, был хаҡта юлда һөйләрмен... Бында төндө үткәреп булмаҫ бит инде...

Фәһим уға ышанмайыраҡ ҡараһа ла, игеҙ туғаны бер ни булмағандай хәбәрен һөйләй бирҙе. Улар зыяраттан сыҡты, әкрен аҙымдар менән бейек яр буйлап киттеләр.

Ауылдың был осонда зыярат тамамланған ерҙә текә ярлы йырын башлана ине. Ҡаҙмаш йылғаһы ауылды уртаға бүлеп, ошонда килеп етә лә, сылтырап торған тау йылғаһына әүерелеп, аҫҡа табан ағып төшөп китә. Шундай күркәмлек бирә ине был тирә-яҡҡа. Зыяраттың яҡын булыуы ғына был шиғри илаһилыҡты бер аҙ кәметә төшкән кеүек. Әле Фәһим игеҙ туғаны менән ошо йырын эргәһенән килә. Аҫта тау йылғаһына әүерелгән Ҡаҙмаштың сылтырап аҡҡан тауышы ишетелә. Йырын буйлап һибелгән муйыл ағастары еҫенән баштар әйләнерлек. Шул тиклем илаһи хозурлыҡ! Йәшә һәм донъяға тыуғаныңа һөйөн генә лә бит! Ниңә ошо тиклем ма-

тур донъяның ҡәҙерен белмәй, йәмһеҙләшәләр әле һуң улар? Һәммәһенә лә урын етмәйме ни был ерҙә?

— Эйе, һин хаҡлы, — тип дауам итте Рәзим.

— Мин бит һиңә ярҙам ҡулы һуҙмаҡсы инем, Рәзим. Тәүҙән үк үҙен йәмһеҙ хәлгә ҡуймаһын тип кенә эшләнгән эш ине. Ә ул, ана, ҡалайға олғашып китте.

— Әйттем бит, ғәйеп миндә, ҡустым. Әлеге шул ярҙам күреп өйрәнмәгәнгәлер инде.

Фәһимгә игеҙ туғаны йәл булып китте.

— Аңлайым да... Тик хатаны төҙәтергә бит бер ҡасан да һуң түгел.

— Мин дә шулай тим... Ҡитергә кәрәк миңә бынан, ҡустым.

Фәһим аптырап китте. Ул бөгөн генә уйлаған нәмә хаҡында Рәзим үҙе үк әйтеп тора! Булмаҫ! Йә ул ағаһы хаҡында насар уйлап яңылышҡан, йә... бәлки, ул тиклем үк яман уйлы ла түгелдер әле? Үҙ хаталарын да аңлаған һәм төҙәтергә уйлаған...

— Нисек шулай... ҡапыл?

— Ҡапыл түгел шул. — Рәзим уфтанды. Уның күҙҙәре моңһоу ине. Унда хатта йәш бөртөктәре лә ялтырағандай тойолдо. Ҡиәфәтендә баяғы яһиллыҡтан иһә бер нәмә лә ҡалмаған. Эйе, ысынлап үкенә шул. Рәзим ерҙән үрелеп ҡескәй бер үләнде өҙөп алды ла яр ситенә үк килеп баҫты. Тауышы үҙәккә үтерлек һағышлы сыҡты. — Мин бына ошо үлән кеүек, Фәһим. Тупраҡтан өҙөп алынғанмын, тамырҙарым инде юҡ. Һәм бер кемгә лә кәрәкмәйем. Ана, күрәһеңме, ырғытҡайным — осто. Һәм шунда ятып серейәсәк. Бәлки, миңә лә... ошо үлән кеүек... Мине лә бит ошолайтып тамырҙарымдан өҙөп алып...

— Рәзим, кәрәкмәй! — Фәһим ҡаты бәрелгәне өсөн ысын-ысынлап үкенә ине инде. Ул ҡулын игеҙ туғанының яурынына һалды һәм... Ни булғанын ул аңламай ҙа ҡалды. Әле генә алыҫ офоҡтарға ҡарап, үҙенең ҡылған хаталары өсөн үкенгән һәм ғәфү үтенгән игеҙ туғаны ҡапыл боролоп уның бөгәренә типте. Аҫҡа — урыны-урыны менән ҡая таштар сурайып сығып торған тәрән йырынға һелтәмәксе ине, әллә хәрәкәтен дөрөҫ иҫәпләмәне, әллә яҙлыҡты...

Фәһим көтөлмәгән һөжүмдән бөгөлөп төштө. Бер-ике секундтан аҫҡа осасаҡ ине ул... Нимәлер ҡамасауланы. Ауыр нәмә егетте аяҡтан йыҡты. Һәм был уны упҡынға осоуҙан һаҡланы.

— Ах, һин, ҡартлас! Йәнеңде алырмын! Падла! — тип ыҫылданы Рәзим.

Эйе, был Рыҫҡужа ине. Йөрәген ус төбөндә тотоп, ҡыуаҡтан ҡыуаҡҡа күсеп, ейәндәре артынан байтаҡ килде ул. Ерле-юҡҡа хафаланғаны өсөн үҙен битәрләп тә бөттө. Ә йөрәге дөпөлдәне лә дөпөлдәне... Һуңғы минутта Рәзим Фәһимдең бөгәренә типкән мәлдә генә, бөтә булған көсөн йоҙроғона йыйып, уларҙың араһына һеләүһендәй ырғылды. Һәм үҙе менән Рәзимде алып упҡынға осто...

Юҡ, Рәзим яр ситендәге талға ҡулдары менән эләгеп өлгөргәйне. Ул йән көсөнә ҡырталашып, аяҡтарына йәбешкән ҡартты һелтәргә маташа ине әле. Фәһим иҫенә килеп аяғына баҫҡанда, яр ситендә алыш һаман да дауам итә ине. Рәзим ситтә генә үҫкән тал ботаҡтарына йәбешеп үрмәләп менергә маташа, ләкин ниҙер уны аҫҡа һөйрәй. Фәһим атылып яр ситенә килде. Рәзимдең ҡулдары ысҡына бара, ысҡына бара...

— Фәһим, ҡустым, ярҙам ит, зинһар!

— Ҡит, Фәһим! Ҡит, тинем! — Рыҫҡужаның тауышы ғыжылдап сыҡты.

Рәзим аяҡтарына йәбешкән ҡартты тибеп төшөрөргә аҙапланды.

— Олатай! Олатай!!! — Йәне асырғанып һөрән һалды Фәһим. — Нығыраҡ тотон! Хәҙер!!!

— Ҡит, тинем! — Рыҫҡужаның тауышы бөтөнләй ят ине. — Ҡит... зинһар... хәҙер ул һинең үҙеңде лә упҡынға һөйрәйәсәк... Ҡит... балам...

— Олатай! — Фәһим ситтә ятҡан йыуан ғына таяҡты күреп ҡалды. Уның инде үҙ уйынан ҡайтмаҫын күргән Рыҫҡужа йән асыуы менән Рәзимде аҫҡа тартты. Улар икеһе лә упҡынға осто...

...Күк шундай зәп-зәңгәр. Муйыл сәскәләренән һағышлы ла, яҡты ла бер моң ҡойола... Сылтыр-сылтыр килеп өҫтән атылып төшкән тау йылғаһының кескәй генә бер инеше төп ағымдан айырылып сығып, Рыҫҡужаның йәнһеҙ ҡулдарына хушлашҡандай итеп ҡағыла ла көлә-сылтырай артабан йүгерә. Үҙ ағымын ҡыуып еткеһе килә уның. Ә Рыҫҡужа, ғүмер баҡый ырыу-ил хәстәре өсөн янып-көйгән һәм үҙ ырыуының ана шул ғәмен ҡарт ҡарсығалай һаҡлаған Рыҫҡужа, хәҙер инде ҡаяға һыйынып ҡына тынып ҡалған.

Баш осонда сыйырсыҡ һайрай. Өҙҙөрөп-өҙҙөрөп һайрай ул. Әллә ҡая ташты ҡосҡан уҙаманды уятмаҡсы буламы? Юҡ, уянмаҫтыр инде ул...

“Рыҫҡужа, бына һинең артыңдан да килдем. Ашығыбыраҡ киттең, ахыры, был донъяларҙан...”

Рыҫҡужа күҙәһен ҡалҡытып тормаҡ була, ләкин уныһы ауырайған икән шул. Һис тә генә көсө етмәй. Ахырҙа ул үҙе генә ҡалҡына. Күҙәһе иһә, уны тыңламай, ҡая ташты ҡосҡан килеш ятып ҡала. Ул хәҙер Рыҫҡужаға башҡа буйһонмаҫтыр инде...

“Нишләйем һуң, Ағинәй... Башҡа сарам булманы шул”.

Ағинәй эргәләге таш ҡая өҫтөндә ултырып тора. Ҡулында — тиҫбеһе. Үҙе ап-аҡтан ғына кейенгән. Тиҫбеһенән күҙҙең яуын алып, йым-йым иткән нурҙар тарала. Әллә эргәләге инеш һыуҙың сағылышымы был? Рыҫҡужа, күҙәһенең үҙен тыңларына инде өмөтөн өҙөп, Ағинәй эргәһенә күсеп ултыра.

“Беләм, Рыҫҡужа... Ғәйепләмә үҙеңде. Мин ебәрҙем һине уландарың артынан”.

“Ә һин... нисек...”

“Фәһимеңдең ҡурсалаусыһы мин, Рыҫҡужа. Күңелендә аҡлыҡ булғанда, мин уны бер ҡасан да ҡалдырмаясаҡмын”.

“Ә һуң... икенсеһе лә бит... минең ейән”.

“Их, Рыҫҡужа... Улар икеһе ике донъянан шул. Сығыштары менән йәндәре икеһе ике ерҙән. Тамырҙарҙа бер үк ҡан ағыу ғына барыһын да хәл итмәй. Ана, күрәһеңме... — Ағинәй бынан ун биш-егерме аҙымдай ситтәрәк ятҡан Рәзимдең күҙәһе яғына күрһәтә. — Уның артынан да килделәр...”

Ослайып, суҡайып сығып торған таш өҫтөнә тура килеп, ҡанға туҙып ятҡан Рәзим өҫтөндә мәхшәр ҡупты. Геүләп, шаулап торған кескәй ҡара өйөрмә, имәнес сыйылдап, бер мәлгә генә туҡталып ҡалғандай булды ла шунда уҡ юҡҡа сыҡты. Тирә-яҡта һиллек урынлаша.

“Ана ул да... үҙ донъяһына ҡайтты”.

“Их, Ағинәй... Нишләп шулай булды һуң барыһы ла? Хоҙай алдында ни ғәйебем бар ине?”

“Улай тимә, Рыҫҡужа. Ғәйеп эҙләмә үҙеңдән. Хоҙай Тәғәлә һынауҙарҙың да күтәрә алырҙайҙарын ғына бирермен, тигән. Был донъяларҙа Аҡ һәм Ҡара көс мәңге айҡаша. Һәм улар бер-береһенә ҡаршы сығыр мәлдә үҙҙәренә тиң, үҙҙәренә тиңдәш булырҙайҙарҙы һайлайҙар...”

Рыҫҡужа уның күҙәһе өҫтөнә эйелгән Фәһим ейәненең биттәре буйлап субырлап аҡҡан күҙ йәштәрен һөртмәксе була. Ләкин үтә күренмәле ҡулдары быны эшләй генә алмай. Сөнки фани донъяларҙа ул хәҙер юҡ инде...

Ә был мәлдә Ваҡыт Аллаһының Изгелек һәм Яуызлыҡ атлы улдарының да йырын эргәһендә барған алышты Йыһан кимәлендәге иҫ киткес көсөргәнеш менән күҙәткәнен бер кем дә белмәне.

— Мин еңдем! — тине Яуызлыҡ ҡәнәғәт көлөп, Рыҫҡужаның йәнселгән күҙәһен күреү менән.

— Мин еңдем! — тине Изгелек, Рәзимдең йәнен ҡара сиреү алып китеү менән.

— Тигеҙлек һаҡланды! — ти Алла үҙе һәм Ваҡыт Үлсәүенең ике яҡҡа тартҡан бизмәндәрен тигеҙләп ҡуя һәм уфтана. — Ләкин ниндәй ҡорбан менән бит...

Ләкин шулай ҙа унда яҡты өмөт уяна. Сөнки был ҡорбандың тоҡомо тере ине әле.